ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

КискеӨфө

6-12 июль (майай) 2019

№27 (861)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!
Танышарығыҙ, дуҫтарығыҙ араһында 2019 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылмай ҡалғандар булһа, беҙҙең сәләмде тапшырығыҙ, зинһар: 17 июлгә тиклем яҙылып өлгөрһәләр, гәзитте августан алдыра башлаясаҡтар. Индекстар үҙгәреүен дә белеп ҡуйығыҙ: ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә ҡалған 5 ай өсөн 520 һумға яҙыла алаһығыҙ. Бергә булайыҡ!

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Берҙәйлек һәм берҙәмлек хаҡында 3

Матур өлгө 6

Баланды яратырға өйрән - уны тәрбиәләүҙәге төп өлөшөң шул булыр 8-9



Һүҙебеҙ һәм ҡылығыбыҙ менән… халҡыбыҙҙың бөйөклөгөн арттырайыҡ! 12-13

ТВ-программа 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Дөрөҫлөк - һауаған һөттән аҡ, тиһәләр ҙә, эскән һөтөң, ашаған ризығың сифаты дөрөҫлөккә тап киләме?

Азамат АБДРАХМАНОВ, "Миәкә һөт заводы" акционерҙар йәмғиәте директоры: Беҙҙең хеҙмәт коллективы халыҡта иң изге иҫәпләнгән һөт ризыҡтары - аҡ менән эш итә, шуның өсөн дә беҙ был эштең яуаплылығын аңлайбыҙ һәм етештергән продукциябыҙ сифаты тел тейҙергеһеҙ булһын тип тырышабыҙ. Йәшерә торғаны юҡ, һуңғы ваҡыт магазин кәштәләрендә сифатһыҙ һәм улай ғына ла түгел, составы буйынса ҡулланыусылар өсөн хәүеф тыуҙырыусы аҙыҡ-түлек, шул иҫәптән һөт ризыҡтары күбәйҙе. Бигерәк тә ит, балыҡ, йомортҡа, шулай уҡ һөт ризыҡтарында тикшереүсе ойошмалар тарафынан йыш ҡына патоген микроорганизмдар, листериялар, эсәк таяҡсалары төркөмө бактериялары, антибиотиктар, шулай уҡ мал аҙығынан килеп эләгеүсән нитрофуран һәм микотоксиндар табылып тора. Былар кеше сәләмәтлеге өсөн ҙур хәүеф тыуҙыра. Намыҫһыҙ етештереүселәрҙе, ә улар ғәҙәттә әллә ни билдәле булмаған бәләкәй предприятиелар, үкенескә, күберәк табыш мәсьәләһе ҡыҙыҡһындыра. Беҙҙең предприятие иһә, үҙегеҙгә мәғлүм, Башҡортостанда ғына түгел, ил кимәлендә билдәлелек яулаған эре һөт етештереү заводы иҫәпләнә, шуға ла беҙгә үҙебеҙ етештергән ризыҡ маркаһы, етештереүсе абруйы ҡәҙерлерәк. Күңелһеҙ хәлдәр килеп сыҡмаһын өсөн сифат мәсьәләһе - һәр саҡ беренсе урында, тап шуға күрә лә "Белое облако" тип исемләнгән һөт ризыҡтары күптән инде брендҡа әйләнде. Ҡулланыусылар иғтибарына ҙур яуаплылыҡ менән шулай тип белдерәм: беҙ эшкәртеүгә фәҡәт айыртылмаған, сифатлы һәм тәбиғи һөт кенә ҡабул итәбеҙ. Йәғни сифат мәсьәләһендә аңлашылмаусылыҡтар килеп тыумаһын өсөн тәьминәтселәрҙән һөттө ҡабул итеү этабында уҡ етешһеҙлектәргә юлды ябабыҙ: продукция магазиндарға оҙатылғанға тиклем өс-дүрт тапҡыр - сеймалды ҡабул иткәндә, эшкәртеү барышында һәм әҙер продукцияны сауҙа селтәрҙәренә оҙатыр алдынан махсус лабораториялар тарафынан тикшерелә. Тапшырыусынан ҡабул иткән саҡта һөт санитар талаптарға яуап бирмәһә, сеймал хужаһына кире ҡайтарыла һәм беҙ башҡа етештереүселәргә мөрәжәғәт итергә мәжбүр булабыҙ.

(Дауамы 2-се биттә).

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

БАБИЧ ҺӘЙКӘЛЕ ҠАРШЫЛАЙ

Өфөлә күренекле шағир һәм йәмәғәт эшмәкәре Шәйехзада Бабичҡа һәйкәл асылды. Шағирға һәйкәл ҡуйыу Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығына арналған саралар программаһы сиктәрендә планлаштырылғайны һәм уны асыу тантанаһы V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына тап килтерелде.

Бабич һәйкәлен асыу тантанаһында Ҡоролтай делегаттары менән бергә республика етәкселеге вәкилдәре лә ҡатнашты. "Шәйехзада Бабичҡа һәйкәл асыу - республикабыҙ өсөн әһәмиәтле ваҡиға, - тип билдәләне үҙ сығышында Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров. - Хәҙер Башҡортостан бөтә донъя менән осрашҡан төп конгресс майҙансығында шағир һыны торасаҡ. Ул беҙҙе тотош республикабыҙ һәм уның күп милләтле халҡының мәнфәғәте өсөн изге эштәргә дәртләндерәсәк. Бөгөн мин Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы йыйыны ында көсөбөҙҙө берләштерергә, тыуған төйәгебеҙҙе нығытыуҙа мөһим аҙымдар яһарға тигән тәҡдим менән сығыш яһаным. Йөҙ йыл элек Шәйехзада Бабич тап ошондай көслө һәм берҙәм Башҡортостан өсөн ғүмерен биргән дә инде. Бабич ғәҙелһеҙлекте фашлаған талантлы һүҙ оҫтаһы булып халыҡ хәтерендә ҡалған. Беҙҙең, уның тоҡомдары өсөн Бабич тауышы әүәлгесә йөрәгебеҙҙә яңғырай һәм беҙ Башҡортостандың шәп улҡыҙҙарының эшен лайыҡлы дауам итеү өсөн барыһын да эшләрбеҙ!"

Бронзанан ҡойолған алты метр бейеклектәге Бабич һыны Зәки Вәлиди урамында, Телеүҙәк алдында тора. Уны ҡуйыу урыны осраҡлы һайланмаған, шағир баш ҡала халҡын һәм ҡунаҡтарҙы үҙенең көрәштәше Зәки Вәлиди урамында "ҡаршы алып" торасаҡ. Ижади концепцияны Рәсәйҙең халыҡ рәссамы Андрей Ковальчук тормошҡа ашырған.

12+

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

Эшһеҙлекте бөгөнгө замандың иң ҙур проблемаһы тиҙәр. Ысынлап та, йәмғиәт үҫешенең нигеҙе ул кешеләрҙең эшле булыуы, нимә менәндер шөғөлләнеүе. Халҡыбыҙҙың күпселек өлөшө ауылдарҙа йәшәгәнлектән, айырыуса эшһеҙлек ауылдарға хас кеүек тойола.

АУЫЛДА...

ЭШТӘН КҮП НӘМӘ ЮҠ!

Һүҙ юҡ, күмәк хужалыҡтар тарҡалғандан һуң күптәр бөгөн дә аптырауҙа ҡалған һымаҡ. Эшһеҙлектең сәбәбе тип, гәҙиттә, ошо миҫалды килтерергә яратабыҙ. Тик бөгөн мин был мәсьәләнең икенсе яғына иғтибар йүнәлткем килә. Мин йәш кеше, һөнәрем буйынса зоотехникмын. Ауылда тыуып-үҫтем һәм ауыл тормошо ғына түгел, ауыл хужалығы ла миңә яҡшы таныш. Ғаиләбеҙҙең шөғөлө - ыылҡысылыҡ, әйткәндәй, ул еңел булмаған тармаҡтарҙың береһе. Атай-әсәйем Шәүрә менән Илһам Фәттәховтарҙың һәм ғаиләләге һәр баланың көсө һалынған хужалығыбыҙ районда ғына түгел, республикала иң алдынғыларҙың береһе. Ғаиләбеҙгә был юлда күпте күрергә, күп мәсьәләләрҙе хәл итергә тура килде. Ниндәй генә ауырлыҡтар булмаһын, гел алға атланыҡ. Мин быларҙы маҡтаныр өсөн яҙмайым. Ауыл хужалығы өлкәһендә тәжрибәм булыуға ғына ишаралайым.

Эйе, һуңғы йылдарҙа ауылдарҙа эш юҡ, тип һөйләүселәр күп. Ҡайһы саҡта, улар ысынбарлыҡтағы хәлдәрҙе бөтөнләй белмәй, ахыры, тип уйлап ҡуям. Ауылда эштән күп нәмә юҡ. Тик эшһеҙҙәр күп һәм бында иң ауыр проблема - ул эскелек. Ҡыҙыу эш ваҡытында ла ярҙамға кеше табыуы ауыр. Йәй таң иртә ата, шул мәлдә лә эсергә яратыусыларҙың аңы томаланып өлгөргән була. Унан һуң, эскән кешене эшкә ҡушыуы ла ҡурҡыныс, берәй нәмә сығып ҡына тора. Өйрәнгәнсә, колхоз-совхоздар тарҡалғас ни, тип кенә сәбәбен табып та ҡуйыр инең, халыҡтың ошо оҙаҡҡа һуҙылған эшһеҙлеккә күнегеп өлгөргәненә йән әсей. Ауылдарында, райондарында берәй башҡорт кешеһе эш асып, үҙенә эшкә саҡырһа ла бармай ул. Бәлки, ҡатыраҡ яңғырар, ялҡаулыҡҡа күнсәллек, күрә алмаусанлыҡ өҫтәлә. Асыҡтан-асыҡ һиҙҙермәһәләр ҙә, быны тойорға мөмкин. Бар хужалыҡтарҙа ла бер үк хәл - ерҙә, малсылыҡта эшләргә эшһөйәр кешеләр юҡ. Был эшкыуар уларҙы алдар, тип тә ҡурҡалар. Дөрөҫөн әйткәндә, барыһы ла еңел аҡса эҙләй, шуға ла Себер тарафтарына барып, бил бөгөп хеҙмәт түгеп тә, аҡсаһыҙ ҡайтыусылар арта. Шул арҡала ғаиләләр тарҡала.

Ә шулай ҙа бөгөн дәүләт ярҙамы менән ауылдарҙа тормош ыңғай яҡҡа үҙгәрә, быныһына бик шатланам. Йәш белгестәр ауыл хужалығына ҡайта. Ваҡыт үткәрер өсөн ҡайтмай, ә аныҡ маҡсаттар ҡуйып, ошо уй-хыялдарын тормошҡа ашырырға, халҡыбыҙға хас кәсеп-шөғөлдәрҙе тергеҙергә ҡайта. Эшҡыуарлыҡ та күбәйә. Дәүләт эштәрен йәш белгестәр етәкләй, быныһы ла тик яҡшыға ғына. Был быуат - йәштәр ҡулында. Хәҙер беҙгә йәштәрҙе дөрөҫ юлға баҫтырыу, сәләмәт тормошҡа, спортҡа әйҙәү кәрәк. Иң мөһиме - үҙ телен, тарихын, ғөрөф-ғәҙәттәрен белгән иманлы, айыҡ башҡорттар тәрбиәләү. Һәм, әйҙәгеҙ, социаль селтәрҙәрҙә үҙебеҙҙең тырышлыҡ, яҡты уйҙарыбыҙ ярҙамында тәҙәгән ошо матур тормошобоҙ хаҡында һөйләйек, башҡаларға, йәш быуынға үрнәк күрһәтәйек. Бәлки, улар ҙа дәртләнеп китер, ыңғай тойғолар йоғошло бит ул. Һәр хәлдә, мин үҙ алдыма ошондай маҡсаттар ҡуйып йәшәйем.

Айтуған ФӘТТӘХОВ.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Дөрөҫлөк – һауған һөттән аҡ, тиһәләр ҙә,эскән һөтөң, ашаған ризығың сифаты дөрөҫлөккә тап киләме?

(Башы 1-се биттә).

Һөттө ҡабул итеп алғас, махсус цехтарҙа ул йылытыла, айыртыла, гомогенизация (йәғни бер тигеҙ майлылыҡ тәьмин ителә) үткәрелә, эҫетелә, унан һыуытыла һәм һауыттарға ҡойола. Тейешле температураға еткерелеп, ҡатыҡ, кефир, ряженка кеүек ризыҡтар ойотоуға ҡуйыла, ә әҙер һөт һауыттарға ҡойола. Әҙер продукция һыуытҡыстарҙа тотола һәм оҙатыла. Смена аҙағына бөтөн булған һыйҙырышлы һауыттар һәм конвейер линияһы үҙәкләштерелгән таҙартыу-зарарһыҙландырыу системаһы тарафынан йыуыла. Әйтеүемсә, беҙ фәҡәт тәбиғи сеймал менән эш итәбеҙ, "ҡоро һөт" онтағы ла ҡулланылмай, продукцияға бер ниндәй арзанлы пальма-үҫемлек майҙары, башҡа төрлө өҫтәмәләр ҙә ҡушылмай. Ундай һөт ризыҡтары етештереүселәр ҙә хәҙер уны "һөт" йә "кефир" тип түгел, ә "составында һөт булған продукт" тип айырып күрһәтергә тейеш. Улар, әйткәндәй, ошо йылдың 1 июленән магазин кәштәләренә тәбиғи һөт ризыҡтарынан айырым урынлаштырып һатыласаҡ. Башта әйтеп китеүемсә, "Белое облако" сауҙа маркаһын булдырыуға күп көс һалынды, завод 1965 йылдан алып эшләй. Ул замандан алып хәҙер етештереү эшмәкәрлеге, завод танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Һәр төрлө йәрминкә-күргәҙмәләрҙә алған наградаларыбыҙ ҙа шул хаҡта һөйләй. Әлеге көндә лә предприятиела етештереү процесын үҙгәртеп ҡороу, яңы технологияларҙы индереү буйынса эш туҡтауһыҙ алып барыла. Киләсәктә беҙҙең сифатлы продукцияны һайлаусылар тағы ла күберәк булһын өсөн тырышабыҙ.

Зәкиә ТЕРЕГОЛОВА, медицина фәндәре докторы, БДМУ профессоры, хеҙмәт гигиенаһы һәм һөнәри ауырыуҙар кафедраһы мөдире, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы: Ҡулланыусы мәнфәғәттәре беҙҙә дәүләт кимәлендә контролдә тотола, шулай булыуға ҡарамаҫтан, кеше сәләмәтлегенә өсөн зарарлы матдәләр менән ағыуланған аҙыҡ-түлек даими рәүештә магазин кәштәләренән урын ала тора. Айырыуса сит илдәрҙән килтерелгән диңгеҙ балыҡтарында металл ҡатыш терегөмөш менән зарарланған партиялар йыш осрай һәм улар шундуҡ юҡ ителә. Үҙебеҙҙең республикала етештерелгән продукцияны ла тикшереп торабыҙ, әлбиттә, ләкин беҙҙә зарарлы матдәләр аҙыҡ-түлек өлгөләренең ни бары 5-6 процентында ғына асыҡлана. Токсиндарҙан тыш, санитар-микробиологик анализдар ҙа үткәрелә, бәхеткә, улар ҙа әллә ни хәүефле һөҙөмтә биргәне юҡ. Шулай ҙа бер мәсьәлә хәүеф тыуҙыра: аҙыҡ-түлек баҙарында фальсификат кимәле бик юғары. Айырыуса аҡ майҙы ныҡ боҙалар. Уның урынына йыш ҡына күпләп үҫемлек майҙары ҡушып яһалған спред тип аталған яһалма май аҡ май тип һатыуға сығарыла. Шулай уҡ эремсек, ҡаймаҡ, ҡуйыртылған һөт һәм һөттән эшләнгән башҡа төр ризыҡтар, ит продукттары сифатын да тупаҫ боҙоуға юл ҡуйыла. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, аҙыҡ-түлектең, бигерәк тә һөт ризыҡтарының 60 процентына тикләме яһалма аҙыҡ төрҙәре, өҫтәмәләр ҡушып етештерелә. Уларҙың күбеһе зыянлы ғына түгел, ә кеше һаулығы өсөн ифрат хәүефле, сөнки әкренләп яман шеш сирҙәренә, аллергик яфаларға юлыҡтырыуы ихтимал. Ҡайһы бер һатып алыусылар спред тигән яһалма майҙың "сифатын" белә-күрә ярамһыҙлыҡ итеп ихтыяр итә, ә кайһы берәүҙәр һөттән эшләнгәненә ышанып аптырауҙа ҡала ...

Шулай ҙа яһалма ризыҡтар етештереү глобаль күренешкә әйләнгән заманда тәбиғи ризыҡҡа әллә ни өмөт итеп тә булмай. Шуға күрә табип буларак, бер-ике кәңәш бирер инем. Сәләмәт тормош рәүешенә ынтылып йәшәгеҙ. Организмды токсиндарҙан таҙартып торогоҙ. Иң беренсе - дисбактериозға юл ҡуймау. Уның өсөн эсәк трактын таҙартыу. Икенсе аҙым - лимфаларҙы таҙартыу. Бының өсөн йәй мәлендә көүҙә ауырлығының һәр килограмына 40-50 мл һыу эсергә тәҡдим ителә. Халыҡ медицинаһында ҡанды таҙартыу буйынса кәңәштәр ҙә күп, тик уларҙы табип менән кәңәшләшеп ҡулланыу кәрәк. Сәләмәт аҙыҡ-түлек, йәшелсә-емешкә өҫтөнлөк бирегеҙ: ташкабаҡ, шалҡан, тоҙланған кәбеҫтә. Организмды таҙартыуға диңгеҙ ылымығы, шыттырылған бойҙай, имбир ҙа булышлыҡ итә.

Гөлшат ӘМИНЕВА, ҡулланыусы, Өфө ҡалаһы: Баш ҡалабыҙҙа һөт һәм һөт ризыҡтары күпләп һатыла һәм был төр аҙыҡ-түлек ҡулланыусылар рационында төп урындарҙың береһен алып тора. Беҙҙә һөт ризыҡтарының популярлығы хаҡында йыл һайын Өфөлә үткәрелеп килгән "Һөт иле" фестивале лә яҡшы һөйләй. Былтыр, мәҫәлән, ошо һөт байрамына 54 мең кеше килгән; йәмғеһе 46 тонна һөт, 5 тоннаға яҡын май, 2 тонна сыр, 17 мең банканан ашыу ҡуйыртылған һөт, 4,4 тонна ҡымыҙ, 1, 4 тонна туңдырма һатылған; былдай фестиваль халыҡты дөрөҫ туҡланырға, сәләмәт тормош алып барыуға өйрәтә, тип яҙҙылар. Минең башҡа шундуҡ бер һорау килеп тыуҙы: шунсама һөт аҙыҡтарының барыһы ла сифатлы, тәбиғи сеймалдан етештереләме икән? Фестиваль, ярай, йылына бер була, ә беҙ бит һөт аҙыҡтарын көн дә тиерлек һатып алабыҙ. Йәй көнө айырыуса, сөнки был ризыҡ тиҙ боҙола: һөт икенсе, өсөнсө көнөнә әсеп сыға, ойой, эремсек-ҡаймағы күпсегән - ауыҙға алырлыҡ түгел. Шуға күрә етештереүселәрҙе лә, сауҙа объекттарын да йышыраҡ тикшереп торһондар ине: һөт аҙыҡтары ниндәй сеймалдарҙан хасил була? Улар һатып алыусы өҫтәленә килеп еткәнсе дөрөҫ һаҡланамы? Һөт, май-ҡаймаҡ, эремсек, сыр тигәнебеҙҙең составы ниҙәрҙән ғибәрәт икән? Арзан пальма майы, башҡа төрлө үҫемлек майҙары, һәр төрлө консервант күпме ҡушыла? Консервант, тигәндән, балалар яратып ашай торған йогурт, туңдырмалар, мәҫәлән, тотош консерванттан торалыр, тип уйлайым. Ә улар мотлаҡ ҡушыла, миңә май-сыр комбинатында эшләгән танышым сер итеп кенә әйткәйне. Ә беҙ ул хаҡта былай ҙа яҡшы беләбеҙ, сөнки сырҙан - сыр, майҙан май тәме килмәй. Ҡала һөтөн яратмайым, әҙләп сәйгә генә һалам. Быны шул һөттә янылыш ҡына ауыҙға ҡабып ебәрһәң, кире төкөргө килә: тәмһеҙ! Ниңә тауар тышына уның составында ниҙәр барлығы ентекләп яҙылмай? Дөрөҫ, беҙҙең күҙҙән йәшерәләр. Арзан компоненттар ҡушылған ризыҡты ҡимматҡараҡ һатып, етештереүсе үҙ кеҫәһенә аҡса эшләй. Шуға ла мин ҡулланыусы баҙарында абруй яулағанырак, намыҫлыраҡ етештереүсе тауарын һайлайым. Әммә ләкин шул һүрәттә лә беҙҙең етештереүселәргә аҫыллыҡ, намыҫлылыҡ кеүек сифаттар етешмәй. Продукцияны магазинға килеп еткәс түгел, уны етештергән еренә - һөт заводтары, майсыр комбинаттары, фермер хужалыҡтарына көтмәгәндә барып төшөп тикшерергә кәрәк, югиһә, предприятиеларҙа планлы тикшереү көнө хаҡында алдан хәбәр итеп киләләр. Шулай булғас, әлбиттә, бөтәһе лә ал да гөл!

Фаил МӨХӨТДИНОВ, блогер: Белеүемсә, Башҡортостанда һөт һәм һөт ри-

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Мәскәүҙә Рәсәйҙең ауыл хужалағы министры Дмитрий Патрушев менән осрашты. Һүҙ аграрийҙарға дәүләт ярҙамы күрһәтеү һәм төбәктең экспорт мөмкинлектәрен үҫтереү тураһында барҙы. Билдәләнеүенсә, быйыл республиканың ауыл хужалығына дәүләт ярҙамы күрһәтеү өсөн федераль бюджеттан 2.71 миллиард һум аҡса бүленеүе көтөлә. Дәүләттән күрһәтелгән ярҙам ауыл хужалығы тауарҙарын сит илдәргә һатыу күләмен дә арттырасаҡ.

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров май-июнь айҙарында Губернаторҙарҙың милли рейтингында 13-сө урынды биләне. Рәсәй Федерацияһы субъекттары башлыҡтарының эшмәкәрлеген баһалауға арналған сираттағы тикшереүҙе "Рейтинг" мәғлүмәт коммуникациялары үҙәге әҙерләне. Рейтинг тәҙәүгә профессиональ һәм социаль урын биләгән эксперттарҙың киң даирәһе йәлеп ителгән. Тап ошондай состав "тикшереү һөҙөмтәләрен демократик", "ябай халыҡ" фекеренә яҡынайтыбыраҡ эшләргә мөмкинлек бирә.

✓Республиканың Үҙәк һайлау комиссияһына Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһына 11 кандидат документ тапшырған: "Берҙәм Рәсәй"ҙән - Радий Хәбиров, "Рәсәй пенсионерҙары партияһы"нан - Владимир Кобзев, КПРФ-тан - Юнир Ҡотлоғужин, ЛДПР-ҙан - Иван Сухарев, "Ғәҙел Рәсәй"ҙән - Юрий Игнатьев, "Яблоко"нан - Зөлфиә Ғайсина, "Рәсәй патриоттары"нан - Рәфис Ҡадиров, "Йәшелдәр"ҙән - Сания Тимасова, "Граждандар көсө"нән - Владимир Барабаш, "Социаль яҡлау"ҙан - Алексей Молокин, "Рәсәй Социалистик партияһы"нан - Рәмилә Сәйетова.

✓Һуңғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса Рәсәй Федерацияһында 1 673 389 башҡорт йәшәй. Башҡорттар Рәсәйҙә һан буйынса дүртенсе урынды биләй. Башҡортостанда 1 172 287 милләттәшебеҙ теркәлгән, был дөйөм республика халҡының 28,79 процентын тәшкил итә. 26 процент Силәбе, Ырымбур, Ҡурған, Һамар, Һарытау, Свердловск өлкәләрендә, Пермь крайында йәшәй. Донъяла башҡорттарҙың дөйөм һаны - 2 миллион самаһы.

✓ *Башҡортлоҡ юҡҡа сыҡмаған, йәшәйешебеҙҙә ошо сифатҡа ихтыяж булған һәр осраҡта милләттәштәребеҙҙең күпселеге үҙ ғәмәлдәрен нәҡ башҡорт кешеһенә хас булғанса бойомға ашырасаҡ.*

зыҡтарының сифаты һәм хәүефһеҙлеге әленән-әле тикшерелеп тора. Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының төбәк бүлексәһе эксперттары, шулай уҡ журналистар ҡатнашлығында үткәргән ана шундай бер нисә тикшереү һөҙөмтәһендә Башҡортостанда сифатһыҙ, һаулыҡҡа һөт ризыҡтары етештереү осраҡтары асыҡланғайны. Һөт составында арзанлы үҫемлек майҙар, крахмал, "коро һөт" онтағы, йоғошло эсәк таяҡсалары табылды. Белгестәр шул осорҙа 2265 һөт ризыҡтары өлгөһө тикшергән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был төр аҙыҡ-түлек етештереүҙә һаман булһа нормативтарҙы боҙоу осраҡтары ҡабатланып тора. Роспотребнадзор белгестәре әйтеүенсә, улар был өлкәлә бер нисә дөйөм тәртипһеҙлекте асыҡлаған: һөт ризыҡтарын һаҡлау шарттарын, ваҡытын һәм маркировкаһын тупаҫ боҙоу. Һөҙөмтәлә шул осорҙа административ хоҡуҡ боҙоу тураһында протоколдар төҙәлгән, һаҡланыу ваҡыты үтеү сәбәпле, күпмелер күләмдә һөт һәм һөт ризыҡтары бракка сығарылған. Ул ғына ла түгел, микробиологик күрһәткестәр буйынса эсәк таяҡсалары төркөмө бактериялары табылған етештереү предприятиеларына ҡарата ул саҡ ярайһы ҡәтғи сара ла күрелә: һөт ризыҡтарын эшкәртеү туҡтатыла, хоҡуҡ боҙоу осрағы хаҡында эш асылып, судҡа ебәрелә. Контроль ойошмалар эксперттары ҡатнашлығында бына шундай тикшереүҙәр йышыраҡ булып торһон ине. Әле бына 1 июлдән сауҙа кәштәләренә тәбиғи һөт сеймалынан һәм үҫемлек майҙар, башҡа төр консерванттар ҡушып етештерелгән һөт ризыҡтарын бүлеп урынлаштырыу тәртибе индерeләсәк. Күптән кәрәк был өлкәлә тәртип булдырыу, тик шулай ҙа был сара ғына сифатһыҙ продукция сығарыуға юлды яба алырмы?.. Әмәлгә ҡалғандай, иҫкерҙе, тип ГОСТ талаптарын да бөтөрөп яталар. Евразия стандарты беҙҙең йылдар буйы һыналған ГОСТ талаптарын алыштыра алырмы? Дөрөҫөн әйткәндә, совет стандарттары ла һуңғы йылдарҙағы ҡырағай баҙар тип аталған осор тарафынан барыбер боҙолоп бөттө, ышанысты тамам ҡаҡшатты. Намыҫты аҡсаға алыштырған заманда йәшәгәс, Евразия булмағайы, Донъя стандартына ла ышаныс ҡалмай башланы инде. Сит илдәрҙән беҙгә ебәрелгән продукция "сифаты" ла был хаҡта асыҡ һөйләй бит.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.

УЙЛЫҒА - УЙ

БЕРҘӘЙЛЕК ҺӘМ БЕРҘӘМЛЕК ХАҠЫНДА

Хәҙерге осорҙа халыҡтарҙың килеп сығышы, тарихи үткәне, этнос һәм милләт булып формалашыуы проблемалары замандаштарыбыҙҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Ошо өлкәгә ҡараған ғилми тикшеренеүҙәр ҙә бихисап, әленән- әле яңы китаптар баҫылып сыға, интернет селтәрҙәрендә ошо тема буйынса ҡыҙыу бәхәс-дискуссиялар ҙа тоҡанып китә. Бән фәкирегеҙгә башҡорт милләте (этносы) проблемалары менән бәйле аналитик мәҡәләләрҙә сағылыш тапҡан ҡайһы бер ғилми ҡараштар менән танышырға тура килде.

Ошондай мәҡәләләрҙә тикшерелгән төп мәсьәләләрҙең береһе - башҡорттарҙың хәҙерге осорҙағы этник берҙәйлеге (идентичность) проблемаһы.

Ябай тел менән әйткәндә, башҡортлоҡ күренешенә ҡарата билдәле бер ғилми ҡараш булдырырға ниәтләп, шуға нигеҙләнеп, "тарҡалып барған" башҡорт социумының сәләмәт, конструктив көстәрен ни рәүешле нығытыу, бергә туплау бурысы хаҡындағы изге теләктәр ҙә иғлан ителә.

Йәш ғалимдарыбыҙҙың милләтебеҙ өсөн үтә әһәмиәтле булған мәсьәләләр буйынса үҙ ҡараштарын зыялылар ҡорона сығарыуы хуплауға лайыҡ, әлбиттә. Әммә уларҙың айырым идеялары менән танышҡас, зиһенде борсоулы уйҙар биләй башлай, хәүефле, ауыр хистәр ярала, ошолар ысынбарлыҡҡа тап килһә, башҡортлоҡ тамам юҡҡа сығып бөткән икән, тигән уйҙан арынып булмай.

Алдан уҡ бына нимәне белдереү зарур: ғалим ҡулы менән яҙылған бар нәмәне лә хәҡиҡәткә тап килә икән, тип иҫәпләп булмай. Ғалим затынан булғандар ҙа яңылыша, был осраҡта уларҙың ҡайһы бер фекерҙәре менән ни сәбәпле килешеп булмауы хаҡында асыҡлыҡ индереү фарыҙ.

Этник берҙәйлек - шәхестең үҙ-үҙен ниндәй ҙә булһа этнос (халыҡ) кешеһе итеп аңлауы, ҡабул итеүе һәм тормошта үҙен шуға ярашлы тотоуы. Мәҫәлән, үҙенде башҡорт итеп танытҡанһың икән, милли үҙаңың, тойғоларың да башҡортлоҡ менән бәйле буласаҡ, башҡа милләт кешеләре лә һине башҡорт кешеһе итеп ҡабул итәсәк. Бөгөн башҡорт этник берҙәйлеген саманан тыш киңәйтергә тырышыу тойола: башҡорт берҙәйлегенә бер юлы дөйөм граждан-лыҡ, дини, төбәк берҙәйлеге һәм хатта локаль (урындағы) бер ишлек инә. Башҡортлоҡ, йәнәһе, рәсәйле булыуҙы ла, үҙенде башҡортостанлы итеп таныуҙы ла, мосолманлыҡ менән бер ҡатар яҡташлыҡты ла (мәҫәлән, Баймаҡлыҡты) үҙ эсенә ала. Бында һанап кителгән ижтимағи сифаттарҙың һәр береһенең башҡорт кешеһенә хас булыуы ла, булмауы ла бар бит әле. Испанияла, йәиһә Төркиәлә йәшәгән, ошо илдең гражданлығын ҡабул иткән, башҡа динле йә атеист башҡорт бынан ары башҡорт берҙәйлеген юғалтып, башҡортлоҡтан азат ителергә тейешме инде? Улай булғас, Төркиә гражданлығын алған Ә.-З. Вәлиди Туғандың ҡәбер ташында ни өсөн "Көҙән башҡорто" тигән һүҙҙәр булыуын нисек аңлатып булыр? Был ябай кешеләрҙең башын бутауға тиң түгелме һуң?

Тамам аптыратҡаны ла бына нимәлә: ҡайһы бер ғалимдарыбыҙ милли берҙәйлекте тик мәҙәнилек менән, этник мөхиттәге мәҙәниәт торошо менән аңлатырға маташа. Йәнәһе, быға тиклем башҡорт берҙәйлеген аграр мәҙәниәт хасил итте; ауыл хужалығында тарҡалыу процестары башланғас, ҡалалашыу (урбанизация) күренештәре нығ көсәйҙе, башҡорттар күпләп ҡалаларға күсенде, әммә ҡала башҡорттарының яңы мәҙәниәте барлыҡҡа килмәне. Ауыл мәҙәниәте юҡҡа сығып бара, башҡорттоң айырым ҡала мәҙәниәте формалашмағас, тотош башҡорт социумы ла, башҡорт берҙәйлеге лә көрсөккә төртөлдө, тигән хаталы фекер пайҙа булды мәғлүмәт киңлегендә. Әлбиттә, мәҙәни берҙәйлек тип аталған күренеш бар. Мәҫәлән, ҡурай моңдарын үҙ итеүселәр, әҙәбиәт һөйөүселәр, классик музыкаға табыныусылар, теге йәки был популяр йырсыны фанаттарса ҡабул итеүселәр һ.б. Әммә ошондай сифаттарҙың булыу-булмауы менән генә этник берҙәйлекте бар итеп тә, юҡҡа сығарып та булмай. Ҡалала йәшәүсе башҡорт ниндәйҙер үҙенә башҡа мәҙәнилеккә мохтаж түгел. Шул уҡ башҡорт сәнғәте, әҙәбиәте, поэзияһы, музыкаһы, театры һәм киноһы - дөйөм халыҡ мәҙәниәтен тәшкил итә, һәм уны бер нисек тә ауыл йәки ҡала мөхитенеке, тип бүлгесләп булмай. Мәҙәниәт быуаттар дауамында үҫешә, көсәйә, киңәйә бара, ул сәйәси система торошонан йә ижтимағи-иҡтисади ситуация үҙгәреүҙән генә юҡҡа сыҡмай. Башҡорттарҙың күпселеге ауылда йә ҡалала йәшәүе "Урал батыр" эпосы аша милли үҙаңыбыҙға һеңдерелгән мәҙәни ҡиммәттәребеҙҙе юҡҡа сығармай. Башҡорт менталитеты, башҡорт берҙәйлеге тиҙ арала барлыҡҡа килеп, замананың сәйәси шарттары үҙгәреү менән тиҙ генә юғала торған күренеш түгел: ул халыҡ йәшәешенең оҙайлы ваҡыт арауығында хасил булған ижтимағи феномен.

Ошо йәһәттән интернет селтәрендә осраған тағы ла һис бер нигеҙһеҙ һәм аңлайышһыҙ фекер менән килешеп булмауы хаҡында әйтмәй булмай. Башҡорт социумы кризислы хәлдә йәшәй, иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ һәм матди тигеҙһеҙлек башҡорттарҙың ижтимағи энергетикаһын ике алама тарафҡа йүнәлтә - ул архаикаға (иҫкелеккә) бирелеү һәм социумдың саманан тыш сәйәсиләшеүе, тигән ҡәтғи һығымталарға юлығаһың. Мәҫәлән, башҡорт сходтарының (йыйындарының) йыш ойошторолоуын да архаик күренеш, тип иҫәпләү бер ниндәй ҙә ҡалыпҡа һыймай. Йыйын - ысынлап та боронғо башҡорт үҙидаралығы (демократияһы) күренеше. Әммә халыҡ йыйылыштарының заманса ҡануниәткә ярашлылығы, гражданарҙың ошондай хоҡуҡҡа эйә булыуы Рәсәй Конституцияһында нығытылған. Бына һинә архаика! Сәйәсиләшеүгә килгәндә лә шул уҡ хәл - хатта Рәсәй Президенты ла чиновниктарға һәм сәйәсмәндәргә ябай халыҡтың ижтимағи-сәйәси әүҙемлеген күтәреү буйынса кәңәш-талаптарын бер туҡтамай тиерлек еткереп тора.

Дөйөмләштереп әйткәндә, әлеге көндә башҡорт берҙәйлегенә зарланырға, уның харап булырына артыҡ хәүефләнер сәбәптәр юҡ. Башҡортлоҡ юҡҡа сыҡмаған, йәшәйешебеҙҙә ошо сифатҡа ихтыяж булған һәр осраҡта милләттәштәребеҙҙең күпселеге үҙ ғәмәлдәрен нәҡ башҡорт кешеһенә хас булғанса бойомға ашырасаҡ.

Әлбиттә, башҡорт берҙәйлеге тик үҙенән-үҙе генә бар булмай, уны тәрбиәләү, булдырыу зыялыларыбыҙҙың рухи бурыстарының иң мөһимдәренәндер. Туған мөхит, туған телле мәғрифәт, милли мәҙәниәт, әҙәбиәт, сәнғәт, гәзит-журналдар, радио һәм телевидение милли берҙәмлекте һәм этник берҙәйлекте булдырыуҙа ҡатнашып, үҙҙәренең дә һаҡланыуын һәм үҫешен тәьмин итә. Тап шуның өсөн башҡорт берҙәмлеге һәм берҙәйлеге бөтөп бара икән, тип зарланыуға ерлек бирергә һис ярамаҫ ине. Башҡорт киләсәгенә өмөт менән бағайыҡ - был рухи инаныстарыбыҙға көс-ҡеүәт кенә өҫтәйәсәк.

Бәҙри ӘХМӘТОВ.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров 3 июлдә Түбәнге Новгородта "Етештереүсәнлек 360" икенсе федераль форумында ҡатнашты. Форум хеҙмәт етештереүсәнлегенең сәнәғәт, мәшғүллеккә булышлыҡ итеү, дәүләт идараһы, һаулыҡ һаҡлау һәм мәғариф өлкәһендәге алдынғы тәжрибәләр менән уртаҡлашыу маҡсатында ойошторолдо.

✓Рәсәй Йәмәғәт палатаһы йыл да үткәргән "Минең проект - минең илгә!" социаль әһәмиәтле проекттар конкурсына 26 августҡа тиклем ғаризалар ҡабул итә. 14 номинация буйынса билдәләнгән һәр еңеүсегә 200 мең һум ярҙам биреләсәк. Проект эштәре ойошманың Мәскәүҙә үткән "Берләшмә" йомғаҡлау форумында күрһәтелә. Конкурста коммерция булмаған ойошма ағзалары, социаль проект етәкселәре ҡатнаша ала.

✓Росгидромет килтергән мәғлүмәткә ярашлы, июль айында Башҡортостандағы һауа торошо алдағы йылдарҙағы кеүек булмаясаҡ. Өфө ҡалаһы өсөн уртаса күрһәткес көндөҙ 25,5 градус, төндә 13,5 градус тәшкил итә. Республикала яҡын көндәрҙә һауа температураһы 21-25 градус йылы булһа, 15 июлдән 13-17 градусҡа түбәнәйәсәк. Ай аҙағына тиклем ямғыр көн дә яуасаҡ.

✓"Топ-100 Рәсәй һаулыҡ йорто" инвестиция йәлеп итеү федераль рейтингы һөҙөмтәләре билдәле булды. Рәсәйҙең 1700-ҙән ашыу шифаханаһы араһында Башҡортостандан"Янгантау", "Танып", "Яҡтыкүл" шифаханалары яҡшы баһаланды.

✓13 июлдә Мәләүез районы Иштуған ауылында "Иштуған" ҡыҫала тотоу фестивале үткәрелә. Унда ҡыҫала тотоу буйынса ярыштар һәм ҡоралдар эшләү, ҡыҫала йүгертеү, төрлө оҫталыҡ дәрестәре үткәреү ҡаралған. Икенсе көндә ҡатнашыусылар үҙаллы йәки туроператорҙар менән "Башҡортостан" милли паркына, Моразым тарлауығына, Йомағужа һәм Нөгөш һыуһаҡлағыстарына, "Иная" этнопаркына, "Башҡорт кәзәһе" экофермаһына экскурсия яһай ала.

✓Көйөргәҙе районы Яңы Мораптал ауылы "Деревенька моя-2019" төбәк-ара конкурсының "Иң уңыш ҡаҙанған биләмә" номинацияһында өсөнсө урын яуланы.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

✓ *Үсемлек майҙарынан яһалған продукттар арзан, халыҡ уларҙың хаҡына ҡарап ала. Һеҙемтәлә намыҫлы етештереүсенең продукцияһы сифат буйынса өҫтөн булһа ла, хаҡ буйынса дәғүәселекте еңә алмай.*

ТУКТА, МӘЛ!

ТОРАТАУ ЙЫЙЫНЫ

Ишембай районындағы изге Торатау итәгендә шәмбе көн үткән "Торатау йыйыны" республика байрамы V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының үҙенсәлекле дауамы булды һәм бөтә Башҡортостандан 50 меңдән ашыу кешене бер урынға йыйҙы.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

ЯҺАЛМА ҺӨТ...

Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары "Халыҡ контроле" проекты сиктәрендә баш ҡаланың эре сауҙа селтәрҙәрендә һөт продукттарын һатыуҙың яңы ҡағиҙәләре үтәлешен тикшерҙе.

1 июлдән көсөнә ингән талаптарға ярашлы, һөт һәм һөт продукттары үсемлек майҙары файҙаланып эшләнгән суррогаттарҙан айырым ҡуйылырға һәм "Һөт майы менән алмаштырылмаған продукттар" ("Продукты без заменителя молочного жира") тигән яҙыу менән билдәләнергә тейеш. Ҡануниәт көсөнә инеүҙең беренсе көнө булғанлыҡтанмы, ҡайһы бер магазиндарҙың талаптарҙы үтәп өлгөрмәгәнлеге асыҡлана, әммә был уларҙы яуаплылыҡтан азат итмәй. Парламент Рәйесе Константин Толкачев белдереүенсә, был рейд профилактик характерға эйә, сөнки сауҙала фальсификаттар бик күп. Бик йыш ысын һөт продукттарын суррогаттан төҫө һәм тәме буйынса айырыуы бик ауыр. Ҡаптарҙа яҙылған составты күптәр уҡып та тормай, оло йәштәгеләргә ваҡ хәрефтәрҙе күреүе лә енел түгел. Икенсе яҡтан, үсемлек майҙарынан яһалған продукттар арзан, халыҡ уларҙың хаҡына ҡарап ала. Һөҙөмтәлә намыҫлы етештереүсенең продукцияһы сифат буйынса өҫтөн булһа ла, хаҡ буйынса дәғүәселекте еңә алмай. Әммә иң мөһиме - суррогаттар халыҡтың сәләмәтлегенә кире йоғонто яһай. Был проблемаға федераль кимәлдә лә етди иғтибар бирелә. Ғинуарҙа суррогаттарҙы мотлаҡ маркировкалау тураһында талаптар көсөнә инһә, хәҙер улар тағы ла көсәйтелде.

СИРАТ БӨТӨРМӨ?

2019-2020 йылдарҙа республикала 7,5 меңдән ашыу урынлыҡ 53 мәктәпкәсә белем биреү объекты файҙаланыуға тапшырыласаҡ. 2020 йылда 3890 урынлыҡ 24 балалар баҡсаһының файҙаланыуға тапшырылыуы планлаштырыла.

Быйыл иһә 29 объект сафҡа инергә тейеш, шул иҫәптән Өфөлә - 2, Өфө районының Дмитриевка ауылында, Күмертау, Бәләбәй, Белорет, Борай, Ейәнсура, Краснокама, Күгәрсен, Мәсетле, Салауат, Стәрлетамаҡ, Саҡмағош, Әбйәлил, Архангел, Асҡын, Балтас, Баймаҡ, Балаҡатай, Бөрйән, Иглин, Ҡариҙел, Ҡыйғы райондарында. Республикала дөйөм алғанда демография үсеше темптары түбәнәйеүгә ҡарамаҫтан, ҡала һәм район үҙәктәренә миграция ағымы көсәйеүе бөгөн мәктәпкәсә балалар учреждениеларына өҫтәмә ихтыяж тыуҙыра. Шуға күрә, тәү сиратта бындай объекттарҙы Өфө, Стәрлетамаҡ, Нефтекама, Октябрьский, Салауат ҡалаларында, Иглин, Стәрлетамаҡ, Туймазы райондарында төҙөү күҙаллана. 2025 йылға тиклем баш ҡала тағы ла 37 объект төҙәләсәк.

КЕМ ТОТҠАРЛАЙ?

Бөгөнгә республикала күп фатирлы йорттарҙы ремонтлау буйынса программа графигы ике тапҡыр өҙөлгән һәм ремонтланырға тейешле 1123 подъездың ни бары яртыһында ғына эштәр башҡарылған.

Шул сәбәпле БР Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров уны тормошҡа ашырыу барышын ҡаты тәнҡитләне. Республика етәксеһе билдәләүенсә, программа яҡшы финансланыуға ҡарамаҫтан, подъездарҙа ремонттың сифатһыҙ башҡарылыуына ялыуҙар күп. Быйылға программаға 4 мең подъезд иҫәпләнгән 1374 күп фатирлы йорт инә. Уларҙың 1288-е - Өфөлә, 1218-е - ҡала округтарында, 1494-е - райондарҙа. Ремонт эштәре 1 ноябргә тамамланырға тейеш.

УҠЫУСЫЛАР ШӘП

Быйыл республика мәктәптәренең сығарылыш уҡыусыларының 109-ы (былтыр - 58) Берҙәм дәүләт имтихандарын 100 балға тапшырған. Уларҙың 68-е Мәскәү, Санкт-Петербург һәм Ҡазандың юғары уҡыу йорттарына инергә йыйына.

Имтихандар өсөн иң юғары балды Нефтекама Башҡорт гимназияһынан Эдуард Владимиров (дүрт фән буйынса 388 балл) һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһының 2-се дөйөм белем биреү мәктәбенән Адель Хәйретдинова (өс фәндән 291 балл) йыйған. Әммә юғары белем артынан абруйлы уҡыу йортон эҙләп мотлаҡ республиканан ситкә китергә тимәгән, быйыл Башҡортостандың барлыҡ вуздары ла Рәсәйҙең иң яҡшы 200 вузы иҫәбенә ингән. Өфө дәүләт нефть-техник университеты техник вуздар араһында 5-се урынды биләй, Өфө дәүләт авиация-техник университеты - 35-се. Аграр вуздар араһында Башҡорт дәүләт аграр университеты 4-се урында тора. Педуниверситеттар араһында М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты - 12-се баҫҡыста. Медицина университеттары араһында БДМУ - 11-се, классик вуздар араһында БДУ 17-се урында.

БАШ ҠАЛАЛА ӨМӘ

3 июлдә Һупайлы биҫтәһендә иртә таңдан ҡаланың коммуналь хеҙмәттәре ихаталарҙы һәм урамдарҙы таҙарта, тәртипкә килтереү менән шөғөлләнә башланы.

Төҙөкләндереү буйынса ҡала идаралығы начальнигы урынбаҫары Илнур Иҙиәтуллин белдереүенсә, был эш өмә формаһында үтә, йәғни бында баш ҡаланың ете районы коммуналь хужалығы хеҙмәткәрҙәре десанты, муниципаль предприятиелар хеҙмәткәрҙәре эшләй. Ямғыр яуып тороуға ҡарамаҫтан, был көндө күмәк көс менән газондар сабылды, юлдар бысраҡтан таҙартылды, ҡороған ботаҡтар, эре сүп-сар йыйып сығарылды. "Кашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркы территорияһында күлдең яр эргәһе ылымыҡтарҙан таҙартылды, бордюрҙар эргәһендәге ер тигеҙләнде. Ошо арала юлдарҙағы соҡорҙар тигеҙләнәсәк, балалар майҙансыҡтары ремонтланасаҡ, уларға ҡом һәм тупраҡ ташыласаҡ.

ХАҠТАР АРТА

Өфөлә коммуналь хеҙмәттәрҙең хаҡы уртаса 46,65 һумға арта, тип хәбәр иттеләр Тарифтар буйынса дәүләт комитетында.

1 июлдән республикала тариф 2 процентҡа ҡиммәтләнә. Волга буйы федераль округының тағы һигеҙ төбәгендә хаҡ арта. Башҡортостанда фатир өсөн түләүҙең 47,2 проценты йылытыуға тура килә. Хеҙмәттең был төрө 1,85 процентҡа арта. 1 Гкал йылылыҡ энергияһының хаҡы 1 июлдән 1992,89 һум була (элекке тариф - 1956,76 һум). Электр энергияһына тариф 3,6 процентҡа артып, 1 КВт сәғәт уртаса 3,17 һум була. Газға тариф йыл башында бер кубометры 7,1 һум тәшкил итте. 1 июлдән тариф 1,4 процентҡа индексациялана - һөҙөмтәлә 7,2 һум. Һыу менән тәьмин итеү 1,85 процентҡа арта - бер кубометры 25,57 һумдан 25,96-ға тиклем. Һыу буреу - 1,4 процент: бер кубометры 25,91 һумдан 26,28 һумғаса. Хеҙмәттең ошо төрөнөң хаҡы буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округында дүртенсе урында.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2016 йылдың 12 декабренән Дим районы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Сергей Плотников Өфө ҡалаһы Октябрь районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. 2016 йылдан районды етәкләгән Роберт Ахунов отставкаға китте.

✓Башҡортостандың бөтә юғары уҡыу йорттары Рәсәйҙең Топ-200 вузы исемлегенә ингән. Был турала БР премьер-министры вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Ленара Иванова Республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә белдерҙе.

✓1 июлдән алданған өләшсәләр мәсьәләләрен тамырынан бөтөрөүгә йүнәлтелгән яңы ҡағиҙәләр үҙ көсөнә инде. Хәҙер фатир һатып алыусыларҙың аҡсаһы банкта һаҡланасаҡ. Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн тарифтар арта. Яғыулыҡҡа хаҡтар үҙгәреүе ихтимал.

✓5 июндән 60 йәштән өлкән пассажирҙарға алыҫ араға йөрөгән поездарҙа биш процент ташлама менән юл йөрөү документтарын һатыла башланы. Купе вагондарына махсус тариф буйынса билет алырға мөмкин, тип хәбәр иттеләр компанияның матбуғат хеҙмәтенән. Ташламалы билет 2 сентябрҙән 25 декабргә тиклем ил эсендә йөрөгән поездарға һатыла. Электрон билет һатып алғанда пассажирҙың паспорт мәғлүмәттәрен һәм тыуған көнөн яҙғандан һуң автоматик рәүештә ташлама яһала.

✓Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында миграция темптары һаҡланған осраҡта 2031 йылға субтөбәктә пенсионерҙар һаны 1000 эшләүсегә 900-гә етеүе мөмкин. Бынан алда ғалимдар ун йыллыҡ аҙағына Асҡын, Мәсетле, Дыуан, Ҡыйғы, Нуриман, Салауат, Балаҡатай, Ҡариҙел райондарына фараз биргәйне, ә хәҙер һөҙөмтәләрҙе сағыштыра алды. Тыуым һәм үлем күрһәткестәре - көтөлгәндән яҡшыраҡ, миграция иҫәбенә кәмеү буйынса насарыраҡ булып сыҡты.

✓Учалы ҡалаһында үҙәк ҡала дауаханаһының хирургия корпусы төҙәлә. Хирургия корпусын 24 урынлыҡ итеп төҙөү ҡаралған. Шулай уҡ бер сменала 150 ауырыуҙы ҡабул итерлек ауырыуҙы билдәләү корпусы һәм 70 урынлыҡ травматология пункты эшләнә.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

✓ Теләүселәр традицион халыҡ уйындарында: тоҡ менән һуғышыу, ауыш бағана буйлап үтеү һ.б. көсөн һынап ҡарай ала. Әммә саранның иң мауыҡтырғас өлөшө булып милли көрәш һәм ат сабыштары торасаҡ.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

БАЛАЛАР УЙЫНДАРЫ БАШЛАНА!

Һуңғы арала сағыу төҫтәге, МДИ тип яҙылған эмблемалар күҙегеҙгә йыш салына башланымы? Аптырамағыҙ, Өфө мөһим сараға әҙерләнә - киләһе аҙнала, 9-14 июлдә, баш ҡалала 53-сө Йәйге халыҡ-ара Балалар уйындары үтәсәк. Ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә лә тап ошо тема иғтибар үҙәгендә торҙо тиергә мөмкин.

Ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Рөстәм Ғәзизовтың сығышынан мәғлүм булыуынса, сараға 84 ҡала һәм 35 илдән, шул иҫәптән Канада, Африка, Мексика, Австралия, Көньяҡ Корея, Ҡытай һәм Европа илдәренән 1207 йәш спортсының, шулай уҡ 280 тренерҙың, ҡалаларҙың мэрҙарының һәм вице-мэрҙарының, Уйындарҙың халыҡ-ара комитеты ағзаларының килеүе көтөлә. Ярыштарҙы 277 спорт судьяһы баһаласаҡ. Сара барышына 506 ирекмән ярҙам итәсәк.

Бөгөнгә Халыҡ-ара Балалар уйындары комитеты талаптары тулыһынса үтәлгән, ярыштар үтәсәк объекттарҙа һуңғы тикшереү ваҡытында асыҡланған етешһеҙлектәр бөтөрөлә. Дөйөм алғанда, улар әҙер.

Бер нисә көн дауамында 9 Олимпия спорт төрө буйынса 433 миҙал уйнатыласаҡ. Еңел атлетика, грек-рим көрәше, фехтование буйынса ярыштар Ҡамышлы урамындағы Спорт әҙерлеге үҙәгендә үтәсәк. "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркы пляж волейболсыларын һәм баскетболсыларҙы ҡабул итәсәк. Баязит Бикбай урамында урынлашҡан 32-се спорт мәктәбендә дзюдосылар көс һынашасаҡ. Футболсылар "Нефтяник" стадионында уйнаясаҡ. Быйыл беренсе тапҡыр программаға грек-рим һәм ҡаяға үрмәләү дисциплиналары индерелгәнлектән, "Ватан" паркында яһалма ҡая урынлаштырыласаҡ һәм ярыштар шунда үтәсәк.

10 июлдә рәсми делегацияларҙы Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин ҡабул итәсәк. Һуңынан, киске сәғәт 5-тә, "Өфө-Арена"ла 53-сө Йәйге халыҡ-ара Балалар уйындары асыласаҡ. Тантана программаһы буйынса спортсылар парадта үтәсәк, Уйындар уты тоҡандырыласаҡ һәм "Голос-Дети" проектында ҡатнашыусылар башҡарыуында уның рәсми гимны башҡарыласаҡ. Шулай уҡ артистарҙың һәм вокал-хореография коллективтарының сығышы буласаҡ. Төп тема булып Халыҡ-ара балалар уйындарының тарихы торасаҡ - "виртуаль алып барыусы" 1986 йылда Словенияның Целе ҡалаһында үткән беренсе балалар спорт форумынан башлап бөгөнгә тиклемге тарих менән таныштырасаҡ. Тамашасыларға 200 квадрат метр майҙанды биләгән экран һәм проектр ярҙамында үҙенсәлекле яҡтылыҡ шоуы күрһәтеләсәк.

11-12 июлдә төрлө объекттарҙа 9 спорт төрө буйынса ярыштар үтәсәк. Уларҙың аныҡ расписаниеһы менән icgufa2019.ru сайтында танышырға мөмкин.

Шулай уҡ 12 июлдә спортсылар һәм ҡунаҡтарҙы ҡала менән таныштырыу планлаштырылған. Ҡаланың һәр районы "Аҡбуҙат" ипподромында башҡорт йорто ҡороп, һабантуй ойоштораcаҡ. Теләүселәр традицион халыҡ уйындарында: тоҡ менән һуғышыу, ауыш бағана буйлап үтеү һ.б. көсөн һынап ҡарай ала. Әммә саранның иң мауыҡтырғас өлөшө булып милли көрәш һәм ат сабыштары торасаҡ.

13 июлдә футбол, йөҙөү һәм еңел атлетика буйынса ярыштар үтәсәк. Шулай уҡ Уйындарҙың генераль бағыусыһы - "Газпром" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең "Дуҫлыҡ өсөн футбол" проекты тормошҡа ашырыласаҡ һәм уның сиктәрендә Боливия, Һиндостан, Ҡытай, Нидерландтарҙан һәм Рәсәйҙән программаның йәш илселәре киләсәк.

Шул уҡ көндө "Ватан" паркында Йәйге халыҡ-ара балалар уйындары рәсми рәүештә ябыласаҡ, эстафета Венгрияның Кечкемет ҡалаһына тапшырыласаҡ. Тантанала спорт делегациялары Салауат Юлаев майҙанынан Зәки Вәлиди урамы буйлап "Ватан" паркының түбәнге майҙанына үтәсәк. Бында инде тарихтың яңы бите - Өфөлә үткән уйындарҙың видеохронологияһы, ярыштарҙың иң сағыу мәлдәре күрһәтеләсәк. Күңел асыу программаһы байрам салюты менән тамамланасаҡ.

ШОС һәм БРИКС илдәре саммитының Өфөлә үтеүе ҡаланы халыҡ-ара конгресс үҙәктәренең береһе кимәленә күтәргәйне. Ҡунаҡтарҙы урынлаштырыу өсөн төҙөлгән яңы ҡунаҡханалар бөгөн дә хеҙмәт күрһәтә. Йәш спортсылар һәм рәсми делегация ағзалары ла уңайлы отелдәрҙә йәшәйәсәк. Туҡланыу мәсьәләләре лә юғары кимәлдә хәл ителгән, Израилдән килеүселәр өсөн айырым меню төҙөлгән.

Спортсылар ярыштар үткән объекттарға автобустарҙа (25) һәм микроавтобустарҙа (25) алып барыласаҡ, шулай уҡ еңел автомобилдәр, такси йәлеп ителәсәк. Сарала 200 журналист эшләйәсәк.

Дөйөм алғанда, Өфө 53-сө Йәйге халыҡ-ара балалар уйындарын ҡабул итергә һәм ярты быуатлыҡ тарихҡа ҡыш-ҡы ла, йәйге лә уйындарҙы ла ҡабул иткән Рәсәйҙең берҙән-бер ҡалаһы булып инергә, ошо форумды лайыҡлы үткәрергә, ҡунаҡтарға ҡунаҡсыллыҡ, республика баш ҡалаһының милли колоритын күрһәтергә, ул ғына ла түгел, сара өсөн махсус төҙөлгән спорт объекттарын артабан баш ҡалала спортты үҫтереү, балаларҙы, йәштәрҙе сәләмәт тормошҡа ылыҡтырыу йүнәлешендә оҙаҡ йылдар файҙаланырға ла әҙер.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

ҺОРАУ - ЯУАП

ЯЛҒАН БЕЛЕШМӘ

Һорау: "Аҙыҡ-түлек менән бәйле эшкә төшөү сәбәпле, медицина тикшереүҙәре үтеп, санитар кенәгә алырға тура килде. Уны үтеү өсөн медицина үҙәге эҙләгәндә күҙемә "тиҙ арала медицина белешмәһе эшләп бирәбеҙ", тигән иғландар күп сағылды. Уларҙың ялғанмы-түгелме икәнлеге бер нисек тә тикшерелмәйме ни? Һәм уның өсөн бер ниндәй яза ла ҡаралмағанмы? Шул белешмәләргә ышанып кеше бассейнға йөрөй. Ә водитель танытмаһы алыусыларҙы ошондай уҡ ялған белешмәләре ҡот осҡос фажиғәләргә килтерергә мөмкин бит".

Яуап: Медицина тикшереүе үтеүҙе күрһәтеүсе белешмәләр цифрлы билдә менән күрһәтелгән махсус бланктарҙа (форма) тултырыла. Был бланктың һәр береһе махсус журналда теркәлә һәм һәр белешмә рәт номерына эйә. Ошо рәт номеры менән ул белешмәнең ялғанмы, әллә юҡмы икәнлеген тикшереп була. Шулай уҡ мисәт һәм ҡултамға ҡуйған табип тураһында табиптарҙың махсус реестрында тулы мәғлүмәт алырға мөмкин. Ялған медицина белешмәһен эшләү административ яуаплылыҡҡа тарттырыу ҡаралған. Яза юридик шәхестәр өсөн эш хаҡының 300-400 минималь күләме дәүмәлендә штраф һалыуға (КоАП-тың 19.23-сө статьяһы) йәки 3 йылға тиклем иректән мәхрүм итеүгә, йәки 4-6 айға тиклем ҡулға алыуға ҡайтып ҡала.

УН АЛТЫ ЙӘШТӘН...

Һорау: "Йортобыҙ янындағы эскәмйәлә йәштәр йыйылып һыра эсәләр. Минең һәм башҡаларҙың киҫәтеүенә ҡолаҡ та һалмайҙар. Полиция менән ҡурҡытырға тырышыуыбыҙ ҙа бушҡа. "Полиция беҙгә бер нәмә лә эшләй алмай, беҙ балалар ғына әле", тип көлә лә ҡуялар. Ысынлап та, полицияның уларға көстәре етмәйме ни? Ошондай осраҡта уларға ниндәйҙер яза ҡаралғанмы?"

Яуап: РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексына ярашлы, йәмәғәт урындарында спиртлы эсемлек эскән һәр граждан 16 йәшенән язаға тарттырылырға мөмкин (РФ КоАП. 20.20-се статья). Күрһәтелгән хоҡуҡ боҙоу өсөн 500 һумдан алып 1500 һумға тиклем штраф һалыу ҡаралған. Әгәр ҙә ул яуаплылыҡтан ҡасырға ниәтләһә, 15 тәүлеккә тиклем ҡулға алыныуы ихтимал. Шуға күрә, тәртип урынлаштырыу өсөн полиция хеҙмәткәрҙәрен саҡырта алаһығыҙ.

МАШИНА ҠУЙЫУ БУШЛАЙ!

Һорау: "Күп фатирлы йорт янында машина ҡуйыу өсөн фатир милекселәре ширҡәте (ТСЖ) түләү талап итә. Был законға ярашлымы?"

Яуап: Машина ҡуйыу урыны - йорт яны биләмәһе тип һанала һәм күп фатирлы йорттоң дөйөм милке иҫәпләнә. Фатир хужалары дөйөм милекте яҡшы торошта тоторға бурыслы. Сығымдар иһә фатирҙарҙың квадрат метрынан сығып иҫәпләнә. Шуға күрә фатир хужалары йорт яны биләмәһе менән ирекле ҡулланырға хоҡуҡлы. ТСЖ йорттоң "хужаһы" түгел, ул бары тик төрлө коммуналь-хужалыҡ инстанцияларында милекселәрҙең мәнфәғәтен яҡлаусы ойошма. Фатир хужаһының ТСЖ вәкиле булыуы йәки булмауы йорт яны биләмәһе менән ҡулланыуҙан мәхрүм итмәй. Был шулай уҡ машина ҡуйыу урыны мәсьәләһенә лә ҡағыла. ТСЖ бының өсөн бер ниндәй ҙә түләү таптырырға тейеш түгел. Әгәр ҙә үтә лә ныҡышмалы ТСЖ хеҙмәткәре менән осрашырға тура килһә, полицияға ялыу менән мөрәжәғәт итергә мөмкин буласаҡ.

Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.

Иң шифалы мәл

❖ Ҡан йөрөшөн яҡшыртыу, тире, мускулдарҙы нығытыу өсөн ысыҡта йөрөргә кәрәк. Сама менән таңғы 4-тән иртәнге 8-гә тиклем иң яҡшы мәл. Ялан аяҡ йөрөү, үләнгә ятып бит-ҡулдарҙы, кәүҙәне ысыҡ менән сылатыу бик файҙалы. Быға бала саҡтан күнегеү яҡшы һөҙөмтә бирә.

Эҫе ҡом

❖ Бил һыҙлауын, быуындар ауыртыуын дауалай. Ҡомға күмелеп ятҡанда башты ҡояш эҫеһенән һаҡларға кәрәк. Шулай уҡ йөрәк тәңгәлен ныҡ итеп ҡом менән күмергә ярамай.

Эсәктәр "йырлаһа"

❖ Эс быға башлауы эсәктәге ҡайһы бер кәрәкле микробтарҙың юғалыуынан булыуы ихтимал. Зарарлы микробтар күбәйә, бығырҙау башлана, ашҡаҙан эше боҙола башлай. Табиптарҙа дауалай был сирҙе, халыҡ дауаһы ысулдары ла бар. Мәҫәлән, ҡара ҡарағат төнәтмәһе, ҡарағат япраҡтары һәм мәтрүшкә сәйҙәре эсергә кәрәк. 1-2 аҙна буйы ашарға 1 сәғәт ҡалғас бер нәмәгә лә ҡушмайынса 1 теш һарымһаҡ, ә ашағандан һуң 2 сәғәт үткәс 2 теш һарымһаҡ ашарға.

Ҡарабойҙай

❖ Ҡан баҫымы юғары булһа, кистән үк ҡарабойҙайҙы һалҡын һыуҙа йыуып, өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөлөккә ҡалдырырға. Ул калий менән магнийға бай. Иртәнсәк ҡоро табала йылытырға ла ашарға. Аҙ ғына һырғанаҡ майы ҡушып йылытырға ла була. Калий ҡан баҫымын нормала тота, магний йөрәкте нығыта, ҡан тамырҙары эшмәкәрлеген яйлай. Был дауаны аҙнаһына 4-5 мәртәбә эшләргә кәрәк.

Һыу эс

❖ Иртәнсәк ас ҡарынға һыу эсергә ғәҙәтләнегеҙ. 1 стакан эҫе һыуға 1 балғалаҡ бал, лимон һуты һәм тәбиғи алма һеркәһе ҡушып эсһәң, организмға май тупланыуҙан һаҡлай, холестеринды нормала тота, аш һеңдереүҙе яҡшырта.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

XX быуаттың 30 йылдарына тиклем һуғылған балаҫтарҙа төҫтәр артыҡ сағыу түгел, күберәк тәбиғи төҫтәге йөн ҡулланыла. 1957 йылда Рәсәй этнографик музейына алынған эсле, йәғни аҡ кейеҙгә тегелгән балаҫ 1917 йылда Стәрлебаш районы Ҡабыҡкыуыш ауылында һуғылған. Ул 4 аҙер балаҫтан ҡушып тегелгән.

Һәр берейе күрән линия ярҙамында киҫелгән аҡ буйҙан башланған. Артабан ҡыҙыл фонда өс төҫлө "таҫма": һары юллы алһыу зәңгәр, һары һәм аҡһыл йәшел ҡыҙыл юл менән. Раппортты ҡыҙыл ҡайма тамамлай. Балаҫтың ситтәре аҡ һәм ул ҡыҙыл ептәр менән уратып алынған.

1920 йылда һуғылған балаҫтың һүрәтен 1958 йылда Мәләүез районы Арыҫлан ауылына экспедиция мәлендә төшөрөп алалар. Балаҫ өсөн төп сырье булып кәзә ҡылы тора. Ҡуйы сейә, һары, йәшел, асыҡ күрән буйҙар ҡара күрән тешле линиялар менән ҡушылған, һәҙәмтәлә, тоташлыусы художестволы алым ҡулланыу иллюзияһы барлыҡҡа килгән.

Көньяҡ-көнсығыш балаҫтарын һүрәтләгәндә осраған ике ҡатламлап һуғыу алымы ("баҫҡыс", "ҡарышлауыҡ", "тараҡ" биҙәктәре) ҡайһы берҙә көньяҡ-көнбайышта ла ҡулланылған. Бындай балаҫтар Урал буйының көньяғындағы ауылдарҙа ла, Дим йылғаһы буйында ла осрай.



Дим башҡорттарының буйлы балаҫы. Н. Бикбулатова фотоһы. 1980

"Теш"ле буйлы орнаменттарҙы Дәүләкән районында бик оҫта һуғалар. Был биҙәктәр йә бер йәки ике яҡлап сығып тора һәм нигеҙҙең ике йәки өс ебен эләктерep алып яһала. Һәҙәмтәлә, төҫлө буйҙар бер-берейенә эләгеп торған кеүек. Ҡайһы бер осраҡтарҙа күрән төҫтәге йөндән торған нигеҙҙен ебе төҫтө йәки аҡ буйҙарҙы 6-10 урында тотошлайынса йәки яртылаш арҡыры "тегеп" сыға.



Бишбүләк районы балаҫы. Аҙнай ауылы. И. Кибальник һүрәте. 1969

Светлана ШИТОВА.
"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.

АФАРИН!

МАТУР ӨЛГӨ

Интернетта Өфөнөң Салауат Юлаев майҙанындағы кафе эргәһендә "АЯБашкир" исемле алтаҡта тураһында фекер алышыуға осрағас, әлеге яҙыуҙың "хужаһы" булған компанияның идара итеүсеһе Кристина Миллер менән осрашып әңгәмә ҡорҙоҡ.

- Беҙ кафе һәм ресторан өлкәһендә күптән үҙ урыныбыҙҙы тапҡан компания. Әлеге кафены уҙған йылдың июлендә астыҡ һәм ул тиҙ арала танылыу яуланы. Башҡортостанда йәшәүсе булараҡ беҙ ошо ерҙе, уның күп милләтле халҡын, урындағы ғөрөф-ғәҙәттәрҙе ихтирам итәбеҙ һәм һанлайбыҙ. Өфөлә тукланыу, ял итеү урындары бихисап. Ләкин улар араһында нәҡ миллилеккә нигеҙләнгәндәре бик һирәк. Беҙ ошо ғәҙелһеҙлекте кәметеү теләгендә республиканың төп милләтенә - башҡортлоҡҡа - баҫым яһаған кафе астыҡ. Мәҫәлән, кафе үҙе тирмәне хәтерләтә, башҡорт орнаменттары менән биҙәлгән һәм унда урыҫ теләндә, әммә башҡортлоҡто һыҙыҡ өҫтөнә алған яҙыуҙар урын алған.

Менюла башҡорт милли ашамлыҡтары менән бер рәттән бөгөнгө көндә популяр булған аш-һыу ҙа бар. Шулай ҙа беҙҙә килеүселәр араһында иң популяр эсемлек - башҡорт коктейле. Ул ҡымыҙҙан һәм төрлө шәрбәтле төнәтмәнән эшләнә. Ҡурай еләге, маракуйя, банан һәм кокос төнәтмәләре айырыуса ҙур һорау менән файҙалана. Әлбиттә, менюла урындағы еләк-емештән әҙерләнгән төнәтмәләр ҙә урын алған. Шулай уҡ менюға милли эсемлек - буҙаны индереү тураһында ла уйлайбыҙ.

Үҙенең ҡунаҡсыллығы менән билдәле башҡорт һымаҡ, беҙ ҙә һәр клиентыбыҙҙың гастрономик теләгенә иғтибарлыбыҙ. Шулай ҙа төп принципыбыҙҙы боҙмайбыҙ, йәғни спиртлы эсемлектәр һәм уның нигеҙендәге коктейлдәр һатмайбыҙ. Башҡорт халҡының ата-бабалары шарапҡа вайымһыҙ булыуын, эскенән ситтә тороуын беләбеҙ һәм эшебеҙҙе ошо нигеҙгә таянып башҡарабыҙ. Бер йыл эшләүебеҙ эсендә бер кем дә спиртлы эсемлектәр булмауына ризаһыҙлыҡ белдермәне, тимәк, беҙ дөрөҫ юлдабыҙ, тип уйлайым.

Бер кемдең дә иғтибарынан ситтә ҡалмаған тағы ла бер үҙенсәлегебеҙ - кафе янындағы ағасҡа беркетелгән "АЯБашкир" исемле яҙыу. Хәҙер төрлө социаль селтәрҙәрҙә һәм микроблоггтарҙа махсус яҙыу - хештегтар - киң ҡулланыла. Беҙҙең әлеге хештег бөгөнгө көндә интернет киңлектәрендә меңәрләгән фото һәм видеоны үҙенә берләштерә. Шуныһы ҡыҙыҡлы, был яҙыу тик башҡорт милләтенән генә булғандарҙы үҙенә ылыҡтырмай, ә төрлө этнос вәкилдәрен берҙәй үк үҙенә тартып тора. Ҡайһы берәүҙәр "Ни өсөн яҙыу башҡорт телендә түгел?", тигән һорау-ризаһыҙлыҡ белдерә. Ләкин улар ҙа урыҫ теләндә яҙыуҙың барыһына ла аңлайышлы булыуы һәм хештег булараҡ күберәк тараласағы менән ризалашалар. Башҡортлоҡ, йәки икенсе милләт вәкиле булыу - ниндәйҙер яҙыу йәки һүрәттә түгел, ә күңел торошонда. Алыҫ Африкала йәшәп тә башҡорт булып ҡалыу мөмкин булған кеүек, Өфөнөң ҡап уртаһында көн итеп тә үҙ булмышыңдан, тарихыңдан, телеңдән ситләшергә була. Бына ошонойо ҙур мәсьәлә, минеңсә. Шуға күрә башҡорт дуҫтарыбыҙ беҙҙең тырышлығыбыҙҙы баһалар һәм шелтә һүҙҙәре ташламаҫ, тип өмөтләнәм. Ни тиһәң дә, әлеге алтаҡтабыҙ янындағы фотоһон интернет селтәренә һалған төрлө милләт вәкилдәре башҡорт халҡы тураһында ер шарының бөтә нөктәләренә лә "һөйләй", уға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уята.

Кафе-тирмә стенаһындағы "Һеҙгә башҡорт кейәүе кәрәкме?" тигән яҙыу ҙа бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Шулай уҡ стаканға йәбештереп биргән һәм шулай уҡ башҡорт мөхитенә йүнәлтелгән "Мөхәббәт ул..." этикеткалары ла матур һәм заманса. Үҙебеҙҙең егет һәм ҡыҙҙарыбыҙ араһында ла миллилеккә таянған, шул уҡ ваҡыта хәҙерге көнгә ауаздаш, башҡорт өсөн генә түгел, ә барлыҡ милләттәргә лә һәм йәшенә-ҡартына ла берҙәй ҡыҙыҡлы булған алымдарҙы ҡулланған эшҡыуарлыҡ өлгөләрен күберәк күргe килә.

Гөлназ САФУАНОВА.

БАШ ҠАЛАМ

ҺӘР УҢЫШЫҢА ҺӨЙӨНӘМ...

Оҙаҡ йылдар сит илдә йәшәһәм дә мин Башҡортостаным ҡыҙы булып ҡалам. Тыуған ерем, Өфөм бер ҡасан да хәтеремдән дә, йөрәгемдән дә сыҡмай. Баш ҡалабыҙҙы яратам, уның һәр уңышына һөйөнәм, уңышһыҙлығына көйөнәм. Әле бына өс йыл тигәндә Өфөмә аяҡ баҫтым. Аэропортҡа килеп төшөп, тыуған төйәгемдең саф һауаһын һулау әйтеп бөткөһөҙ рәхәтлек килтерҙе.

Өфө айлап түгел, көнләп үҙгәрә кеүек. Ул башҡа ҙур ҡалалар кеүек үк замандан артта ҡалмайынса үҫешә, ләкин шул уҡ ваҡытта йәнһеҙ таш биналар "коллоғона" эләкмәйенсә йәшәп килә, үҙенең үҙенсәлеген юғалтмай. Бөгөнгө көндә ҡайһы бер ҡалалар тере йәшеллектән мәхрүм булып, яһалма ағас һәм гөлдәр ҡармауында ҡалып бара. Ә Өфөлә, элекке ваҡыттағы һымаҡ уҡ, тере йәшеллек көслө. Башҡорт өсөн урман, тәбиғәт һәр ваҡыт ҙур әһәмиәткә эйә булған. Үҙем туктаған ҡунаҡхана янындағы ҡайындарҙың ҡосаҡлап-ҡосаҡлап алдым. Шуға күрә артабан да ҡала хакимиәте ошо йүнәлештә әүҙем эшләр, тигән өмөттә ҡалам, сөнки тере япраҡтар шыбырлауы ишетелмәгән ҡала йәнлелеген юғалта, төҫһөҙләнә.

Өфөлә матур-матур йорттар ҡалҡып сыҡҡан, ҡунаҡханаларҙың төрлөләгенә һәм зауыҡлы булыуына һоҡланып ҡарайым. Шул уҡ ваҡытта буш торған һәм бер нисек тә ҡулланылмаған биналарҙың күп булыуы күңелде ҡырҙы. Мәҫәлән, БДУ янында ҙур бина бар. Уның әллә күпме йылдар ҡоро һөлдә булып тороуы ла, саммит алдынан матурланып ҡалыуы ла һәр кемгә мәғлүм. Ләкин әле ҡарап үттем, унда һаман да бушлыҡ. Уға берәй ҡулланылыш табып булмаймы икән ни, тип аптырарға ғына ҡала.

Мин фонтандар яратам. Өфөләге бөтә фонтандарҙы ла ҡарап сыҡтым. Бер килеүемдә Конгресс-холл янындағы фонтан эргәһендә башҡортса йырҙар ҡуйыла ине, хәҙер иһә тынлыҡ. Хатта бөтә донъянан башҡорттар йыйылған саҡта ла үҙебеҙҙең телдәге йырҙар ишетелмәне. Ә бына "Ете ҡыҙ" фонтаны янында матур музыка тыңлап, күңелем булды, рәхәтләнеп ял иттем.

Бөйөк шағирыбыҙға һәйкәл асылыуын шатланып ҡабул иттем. Миңлеғәле Шаймуратов исемен йөрөткән колхозда үҫтем һәм ул миңә айырыуса яҡын. Шуға күрә Өфө ҡалаһында легендар геройыбыҙҙың һыны ҡалҡып сығасағын ишетеп, ҙур ҡыуаныс кисерҙем. Шулай уҡ башҡа билдәле башҡорт әһелдәренә лә Өфөбеҙҙә лайыҡлы урын табылыр, тип ышанам. Ошондай шәхестәребеҙ яҙмышында халҡыбыҙҙың үткәне, республикабыҙҙың тарихы сағыла. Беҙҙең уларҙы оноторға хаҡыбыҙ юҡ.

Ҡала урамында велосипедта елдереүселәрҙең күп икәнлеген аңғарҙым. Улар өсөн махсус юлдар бүленеүе лә, махсус парковкалар ҡуйылыуы ла бик мәслихәт хәл. Сәләмәт тормошҡа, спортҡа ынтылыш булған ерҙә насар ғәҙәттәргә урын булмай, тимәк, Өфө халҡы айыҡ аҡыл менән йәшәй, тип ҡыуандым. Алдағы йылдарҙа бөгөнгө велосипедсылар рәтенә тағы ла күптәрҙең баҫасағына шикләнмәйем.

Өфөгә килеп, бала саҡтан күңел төбөндә йөрөткән хыялымдың тормошҡа ашыуын күрҙем. Элек ни өсөн үҙебеҙҙең милли кейемдәрҙе кейеп йөрөмәйбеҙ икән, тип уйлай инем. Бөгөн ҡала урамдарында милли стилдәге футболка һәм күлдәктәрҙә йөрөгән йәштәрҙе күреп ғорурландым. Ә ҡоролтайға башҡорт кейеменә килгән ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-аттарҙың күркәмлеге һуң! Ул күлдәктәре, ул баш кейемдәре, һаҡал һәм башҡа биҙәүестәре. Ҡарап һоҡланып туйғыһыҙ. Шулай уҡ "Өфө" тип яҙылған кейемдәгеләрҙең күп булыуын да билдәләп үткем килә. Тимәк, йәштәрҙә илһөйәрлек тойғоһо бар һәм был бик позитив күренеш.

Гөлгөнә ҒӘЙНУЛЛИНА.
Испания,
Барселона ҡалаһы.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

7

Ғаиләм-ҡәлғәм

6-12 ИЮЛЬ (майай) 2019 йыл №27 (861)

ӘСӘЙҘӘР МӘКТӘБЕ

ҒӘЙЕПЛӘМӘГЕҘ -

ул иң ауыр хеҙмәтте башҡара

Өләсәй менән әсәйҙең араһында ниндәй айырма бар? Ни өсөн балалар өләсәйҙәрҙе ярата, уларға тартыла? Улар янында ҡалырға, барырға, ялдарын йәки каникулдарын шунда үткәрергә ынтыла Әрләмәгәндәре, барыһын да рөхсәт иткәндәре, күберәк маҡтағандары, уларға ваҡыт бүлгәндәре, ихлас яратҡандары өсөнмө? Былар ҙа етерлек сәбәптәр, шулай бит? Ә ни өсөн өләсәйҙәр шулай була ала ла, әсәйҙәр булып етә алмай? Ҡыҙыҡ һорау, эйеме? Сөнки өләсәйҙәр психик өлгөрөүҙең юғары дәрәжәһенә еткән, улар тынысланған, юҡҡа-барға ҡыҙып, ҡаңғырып бармай торған халәткә еткән. Өләсәйҙәр аҡылланған, улар йөрәген дә, асыуын да, хистәрен дә аҡылға буйһондорған. Өләсәйҙәр ҡыйыу, улар ейәнен эттән дә, уҡытыусынан да, хатта баланың үҙ ата-әсәһенән дә яҡлай ала. Һәм бына йәнәшәһендә ошондай үҙ-үҙенә ышанған, тәжрибәле, күпте белгән, бер хәлдә лә ҡалтырап төшмәгән, ҡысҡырмаған һәм барыһын да тик ыңғайға ғына һаплап торған өләсәй булыуы йәш әсәләр өсөн бер бәхет.

Ә әсәй булыуы еңел түгел! Бөгөнгө йәш әсәйҙәргә, әсәй буласағы асыҡланғас та уҡ, "белмәйһең" тигән ярлыҡ тағыла. Йәғни, уға "насар әсәй" тигән темаға ғәйепләүҙәр өйөлә башлай. "Дөрөҫ туҡланмайһың! Дөрөҫ кейенмәйһең! Ни эшләп улай иттең - балаң шулай була! Ауырлы көйөнә!.." Бала табыу йортонда табиптарҙа беренсе "дәрес" үтелә: тота белмәйһең, имеҙә белмәйһең, йыуа белмәйһең... Өйгә ҡайтҡас иһә, был хәл саҡ ҡына йомшағыраҡ юҫыҡта, әммә дауам итә: хәҙерге йәштәр бала ҡарай белмәй, төнө буйы илата, төрмәй ҙә, йоҡоһо тыныс булмай, ҡоро имеҙеүгә генә туямы, йоҡа кейендерәһең... Күп атайҙарға сабыйҙың илауы, юҡҡа көйһөҙләнеүе, ҡатынының күберәк балаға иғтибар бүлеүе, бәпесе янында йоҡлауы, арыуҙан кәйефһеҙ булыуы оҡшамай. Улар былдай ваҡытта сабырһыҙланып, әлеге әсәгә ҡарап: "Нимәгә туҡтауһыҙ илай? Нимә булған уға? Нишләп йоҡлата алмайһың?" тигәнерәк һорауҙарҙы ташлай ҙа, аныҡ яуап көтә. Ә әсәй ҡайҙан белһен? Бәпестең ни өсөн тыныс ҡына ятырға теләмәгәнен, ниңә ҡулда ғына булғыһы килгәнлеген, ниндәй сәбәп менән йоҡлап китә алмағанын үҙе лә тәүге тапҡыр ғына әсәй булған ҡатын ҡайҙан белергә тейеш? Уға әсәй булырға кем өйрәткән?

Балалар баҡсаһында тәрбиәселәр "насар һөйләшә, насар ашай, шөғөлләнмәйһегеҙ", башланғыс мәктәптә уҡытыусылар "шаяра, иғтибарһыҙ, тыңламай", юғары кластарҙа "әҙерлек етмәй, етди түгел, имтиханын бирә алмаясаҡ", тиҙәр. Һәм бөтөн ошо "етешһеҙлектәрҙә" лә әсә үҙен ғәйепле тоя. Балаһын ҡулына алғандан алып уның күңелендә ошондай хәбәрҙәрҙән "нимәнелер яңылыш эшләйем, белмәйем, ҡарап еткермәйем, аңлай алмайым" тигән ҡурҡыу, шом, үҙ-үҙенә ышанмаусанлыҡ инеп урынлаша ла, уның психикаһын яйлап ҡына ҡаҡшата. Әсә бөтөн был ғәйепләүселәрҙән дә балаһын араларға, уны артына йәшереп алып ҡалырға тырыша. Балаһы хаҡында әйтелгән бәләкәй генә насар һүҙ ҙә уның күңелендә ҙур яра яһай. Әле үҙе лә балалыҡтан сығып, холҡо нығынып өлгөрмәгән йәш әсә "өйрәтеүселәр"ҙән һаҡланыуҙың бер нисә генә сараһын башҡара ала: йәки ҡаршы ирешә, йәки илай, йәки... балаһын әрләй.

Мин йыш ҡына йәш әсәләргә иғтибар итәм. Уларҙың паркта коляска менән йөрөгәнен, балаларын уйнатҡанын күҙәтергә яратам. Ҡарап торһаң, уларҙың күптәре тынысһыҙ. Йоҡо етмәү, режим тота алмау, йонсоуы ла, башҡа сәбәптәре лә барҙыр, ҡатындар сабырһыҙ, ҡыҙыу, көйгәләк. Ҡала урамдарында, парктарында сабыйын тынысландыра алмай, коляскаһын һелкеткән, тыңлата алмай елтерәткән, туҡмаған, ҡысҡырған әсәйҙәр аҙ осрамай. Бында ла һәр кем әсәйҙе шелтәләп, әрләп үтә. "Нимә эшләйһегеҙ? Хәҙер мин һеҙгә полиция саҡыртам!" тип тә янап китәләр. Тик береһе лә туҡтап, уға ярҙам итергә теләмәй. Берәү ҙә әсәнең хәлен һорамай. Асылда бит, әсә балаһын тыңлата алмай, әсә ҡысҡыра, әсә илай икән, бында ярҙам иң беренсе әсәнең үҙенә кәрәк. Бала әсәһен тыңламай, сөнки уның эсендә ҡурҡыу барлығын тоя. Ҡосаҡлашҡанда, бергә ятҡанда, нимәлер башҡарған ваҡытта ул әсәһенең эсендә ныҡлы көс, үҙ-үҙенә ышаныусанлыҡ юҡлығын аңғара ала. Ә бәләкәй бала ул шундай йән эйәһе, ул көслөрәккә тартыла, ә көсһөҙөрәккә буйһонмаусанлыҡ күрһәтә. Былдай төшөнсә уларға һалынған була. Һәм шул бәләкәй генә кешекәй ҙә әсәһен еңеп алырға, баҫырға, уның менән идара итергә ынтыла. Был тәңгәлдә балаға әлеге эргә-тирәләгеләрҙең әсәһенә ҡарата "белмәйһең" тигәнде күп ҡулланыуы ла йоғонто яһай. Үҫә бара улар ҙа "Һин белмәйһең! Аңламайһың!" тип ысҡындыра башлайҙар.

Бер оҙон юлда поезда ҡайтҡанда, күрше урындағы бала менән әсәнең "һуғышын" күҙәтеп килдем. Әсә баланы әүрәтеп кенә бер урында тота алмай. Уйынсыҡтары ла күп, аҙыҡты ла төрлөләп алған, әммә ҡыҙыҡай уларға әүрәмәй. Ә янындағы пассажирҙар әсәгә туҡтауһыҙ шелтә ташлай: тыныслыҡ бирмәйһегеҙ, шаулайһығыҙ, балағыҙҙы ҡарай алмайһығыҙ. Ахырҙа, ҡатын иҙәндән тәпешкәһен алды ла балаһын уңлы-һуллы һуҡҡылап ташланы. Уның был ҡыланышынан халыҡ "ах" итте. Асылда, ике йәшлек ҡыҙыҡайҙың әсәһе арыған ине. Ул ошо тынысһыҙлыҡ хәлендә ярҙамһыҙ һәм яңғыҙ ине. Уны барыһы ла ғәйепләй ҙә ғәйепләй ине. Балаһын туҡмап йоҡлатырға һалған ҡатын, башҡаларға арҡаһын ҡуйып, шым ғына мыршылдап иланы...

Шул ваҡыт мин үҙемдең балаларым бәләкәй ваҡытты иҫләнем. Бәләкәстәр туҡтауһыҙ ауырый ҙа, һиңә ярҙам иткән кеше юҡ. Атай кеше "ни эшләп ауырытаһың" ти, табиптар "дауалай белмәйһегеҙ" тиҙәр, эштә "ул ниндәй туҡтауһыҙ больничныйға сығыу" тиҙәр, баҡсала "бөтә нәмәнән артта ҡалдыраһығыҙ" тиҙәр. Мин дә шундай саҡтарҙа сараһыҙлыҡтан, көсһөҙлөктән ултырып илай ҙа, ирешә лә, ҡысҡыра ла, асыуымды балаларға төшөрә лә торғайным...

Бөгөн йәш әсәйҙәргә ярҙам иткәндәй әҙәбиәт тә күп һымаҡ, интернет тулы материалдар, әммә эш һәр кемдең шәхсән хәл-ваҡиғаһына килеп төртөлһә, һәр әсә менән балаға индивидуаль ярҙам кәрәк була ла ҡуя шул. Йәғни, уҡып ҡына әсәй булырға өйрәнеү ауыр.

Ошо урында туғыҙ балаға әсәй булған әсәйемдең беренсе балаһы тыуғандағы бер ҡыҙығын да миҫалға килтереп киткем килә. Тәүге ағайым ни эшләптер йөнтәҫ булып тыуған. Сикәләрендә, маңлайында, яурын-арҡаларында тырпайып торған ҡап-ҡара бәпәй йөнө булған. Үҙе медик булһа ла әсәйем быны күреп ҡурҡҡан, етмәһә, өләсәйем "көсөк шикелле тас йөн" тип уны тағы ла шомландырған. Атайыма күрһәтмәү өсөн ныҡ итеп урап тотҡан бер нисә көн. Ахырҙа, ул да барыбер күргән һәм шулай уҡ аптырап "әллә ипләп кенә гәзит менән өтөп ҡарайыммы" тигән. Ай тирәһендә бәпәйҙәге был йөндәр үҙенән-үҙе ҡойолоп бөткәнме, юғалғанмы инде. Ҡартайғас әсәйем шуны ҡыҙыҡ итеп һөйләй ҙә: "Шулай булырға мөмкин икәнен уҡығанмын, теорияһын беләм бит инде. Юҡ шул, үҙ хәлемдә ҡаушаным да төштөм. Йәш саҡта шулай икән", - тип ҡуя торғайны.

(Дауамы 10-сы биттә).

БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

✓ Инновациялар, яңы ысулдар, иҫ китмәле мөмкинлектәр - былар барыһы ла яҡшы ул. Тик былар барыһы ла нимә өсөн? Әгәр ҙә бала ошо һорауға яуап тапмаһа, уға белем алыуы ҡыҙыҡ булмаясаҡ, уҡыуҙың мәғәнәһе юғала.

БАЛАҢДЫ ЯРАТЫРҒА уны тәрбиәләүҙәге төп

Тәрбиә өлкәһе - мәңгелек темаларҙың береһе инде ул. Тормош, йәшәү шарттары менән бергә үҙебеҙ ҙә, балалар ҙа, тимәк, тәрбиә ысулдары ла, уның менән бергә мәктәптәрҙә белем биреү саралары ла үҙгәреп кенә тора. Бөгөн мәғариф системаһы күберәк нимәгә иғтибар йүнәлтә? Балаларҙы ниндәй хәүефтәрҙән аралау мөһим? Ғөмүмән, һуңғы йылдарҙа мәғариф системаһында йыш яңғыраған психологик хәүефһеҙлек тигән төшөнсә нимәне аңлата? Ошолар тураһында Башҡортостан Республикаһы Мәғарифты үҫтереү институтының педагогика һәм психология кафедраһы мөдире, педагогика фәндәре кандидаты, доцент Лилиә Рәшит ҡыҙы ХАЛИҠОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.

Хәҙерге заман мәғариф системаһы төп урынға тәрбиәне ҡуя. Мәктәп баланың аҡылын, эмоциональ һәм физик үҫешен тәьмин итеү менән бергә, унда кешелеклелек сифаттарын да тәрбиәләргә тейеш, тиҙәр. Әхлаҡ мәсьәләләренең тәүге урынға сығыуы нимә менән бәйле?

- Бөгөнгө көндә мәғариф алдында яңы быуын вәкилдәрендә кешелеклелек сифаттарын тәрбиәләү һәм үҫтереү төп бурыс булып тора, тиһәк тә яңылыш булмаç. Уҡытыу-тәрбиә эше әҙәм балаһының шәхесенең камил булыуына, әхлаҡи аҡтан үҫешенә яуаплы. Тормош ҡатмарланған һайын күңел һыҙаттарына иғтибар итеү зарур. Был иһә шәхестең үҙенең һәм башҡаларҙың ғүмерен баһалай, үҙенең һәм башҡаларҙың ҡыҙыҡһыныуҙары менән иҫәпләшә белеүендә, халыҡтар дуҫлығы, берҙәмлеккә ынтылыуында сағыла. Уҡытыу-тәрбиә эшендә бары тик шәхестең үҙенең генә үҫешен күҙ уңында тотһаҡ, унан эгоист яһаясаҡбыҙ һәм йәмғиәткә бындай кешенең файҙа килтереүе икеле. Дөйөм алғанда, уҡытыу-тәрбиә эшенең уҡыусының күңелен үҫтереүгә, унда кешелеклелекте арттырыуға йүнәлтелеүенең сәбәптәре лә бар.

Бөгөн нимә тип кенә әйтмәһендәр, әммә совет педагогикаһы балала быны бәләкәйҙән тәрбиәләй ине. Ни өсөн совет осорон һағыналар, ундағы тәрбиә ысулдары һөҙөмтәле булған тип әйтәләр? Сөнки был ҡоролоштоң үҙендә үк идея һәм ошо идеяға ынтылыу ята. Тамағы - туҡ, өҫтө бөтөн булыу ғына кешене бәхетле итә алмай. Ул ниндәйҙер идеяға ынтылырға тейеш. Бөгөн идея проблемаһы бар, сөнки совет осоро, уның фильмдары, тәрбиәһе йәш быуынға аңлашылмай, улар ул осорҙа йәшәмәгән. Ә яңы идея юҡ, шуға ла үҫмерҙәр Америка фильмдарын ҡарап, ундағы супергеройҙарға оҡшарға ынтыла. Был супергеройҙар иҫ киткес һәләттәргә эйә, ысынбарлыҡта иһә ябай кеше уларҙы ҡабатлай алмай. Ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйып, троллейбусҡа, поезға эләгеп йөрөүселәр, йорт баштарына менеүселәр ошо супергеройға ынтылыусылар инде. Реаль булған эштәргә, әйтәйек, үҙеңдең тырышлығың менән уҡыуҙа йә башҡа өлкәлә уңыш ҡаҙаныу өсөн ваҡыт кәрәк, ә троллейбусҡа йәбешеп йөрөп килһәң, шунда уҡ герой булһың да ҡуяһың.

Әлбиттә, барлыҡ проблемаларҙы ла идеалдар юҡлығы менән аҡлап булмай. Ғаилә институтының ҡаҡшауы ла үҙ емештәрен бирә. Психологияла депревация тигән күренеш бар, ул кешенең хис-тойғолары менән бәйле. Үҙ ғаиләһендә яратыу, аңлау, хәстәрлек етмәгәнлектән, балала эмоциональ вакуум барлыҡҡа килә. Уның эҙемтәләре ҡот осҡос, кеше агрессив булыуы мөмкин, үҙенең һәм башҡаларҙың ғүмеренә яуаплы ҡарай белмәй. Насар ғәҙәттәр, суицид күренештәре ошо эмоциональ вакуум менән бәйле. Мәғариф өлкәһе ошо эмоциональ вакуумды тултырырыу өсөн мөмкинлектәр тыуҙырырға тейеш, юғиһә, бындай балаларҙың киләсәге ниндәй булыуын аныҡ әйтеп булмай. Уҡыусыға шуның өсөн дә психологик һәм эмоциональ йәһәттән комфортлы мөхиттә үҫеү кәрәк.

Ғаиләнең бала тәрбиәләүҙәге бындай етешһеҙлектәрен мәктәп кенә тулыландыра аламы һуң?

- Тулыландыра алмай, тик ундай балаларға ҡул һелтәп кенә ҡуйһаҡ, был алышта беҙ еңеләсәкбеҙ. Элегерәк, социализация тигәндә, йәш быуынды йәмғиәттә йәшәргә өйрәтеү тип ҡарай инек. Хәҙер ошо ауыр холоҡло тип иҫәпләнгән балаларҙы төрлө хәүефтәрҙән араларға, мөмкин тиклем йылылыҡ биреп, кешелеклелеккә өйрәтергә, улай ғына ла түгел, теләктәрен аңларға, әйтергә, артабан уларҙы тормошҡа ашырыуҙың юлдарын күрһәтергә тейешбеҙ. Сөнки атай менән әсәй уға абруй була алмай икән, уҡытыусыһы был ролде үтәй ала. Ул йүнәлеш бирә, шул эмоциональ вакуумды тултырырға тырыша. Ҡыуанысҡа, ундай уҡытыусылар күп. Минең бер танышым ауыр холоҡло балалар уҡыған колледжда эшләй. Бәлки, эшенде алыштырырһың, тигән тәҡдимдәргә ул: "Бындай балаларҙы ла кемдер яратырға тейеш", - тип яуаплай. Агрессия бит ул - яратыу, иғтибар талап итеүҙең бер формаһы, бала мине яратығыҙ, тип әйтә алмай, бары тик яратылмағанына йәне көйә.

Педагог һәм психолог булараҡ, бөгөнгө мәғариф системаһының даими үҙгәрештәргә, яңылыҡтарға дусар булыуына нисек ҡарайһығыҙ?

- Инновациялар, яңы ысулдар, иҫ китмәле мөмкинлектәр - былар барыһы ла яҡшы ул. Тик былар барыһы ла нимә өсөн? Әгәр ҙә бала ошо һорауға яуап тапмаһа, уға белем алыуы ҡыҙыҡ булмаясаҡ, уҡыуҙың мәғәнәһе юғала. Ул хатта теге йәки был предметты нимә өсөн уҡыуын аңларға тейеш, әйтәйек, уның тормошо, теләктәре, ҡыҙыҡһыныуҙары, киләсәге менән нисек бәйле икәнен. Шул уҡ ваҡытта ошо рәүешле киләсәккә әҙерләнеү баланың төп маҡсатына әүерелмәһен, ул бөгөн үк тулы ҡанлы тормош менән йәшәргә өйрәнһен. Юғиһә, беҙҙә балалар баҡсаһында - мәктәпкә, мәктәптә - вузға, вузда - эшкә, эштә пенсияға әҙерләнәләр, ә пенсиянан ҡайҙа әҙерләнәләр? Бөтөн тормош юлы йәшәүгә әҙерлек менән үтә кеүек.

Шунан һуң, хәҙер шәхес түгел, белем мөһимгә әүерелеп китте. Белемгә табыналар, белем күрһәткестәре тураһында отчеттар бирәләр. Фекерләргә өйрәтеү урынына БДИ-ны еңел бирер тип, хәтерен нығыталар. Мәктәптә күпселек осраҡта бала түгел, ә баланың билдәһе мөһим тип иҫәпләнә. Һәйбәт уҡыған балаларға ғына иғтибар бирелә, уҡый алмағандарынан ҡотолоу яғын ҡарайҙар. Мәктәп, тәү сиратта, баланың шәхесен төп урынға ҡуйып, уның һәләте, мөмкинселектәренә таянһа, шунда ғына һөҙөмтә булыуы ихтимал.

Бөгөн ата-әсә лә балаһынан күпте өмөт итә түгелме? Яҡшы билдәләргә генә уҡыуын, йәмғиәттә өҫтөнлөклө һаналған һөнәр үҙләштереүен?

- Яңылышаһығыҙ, бала тыуғас та уның аңын, белемен үҫтерергә тырыша башлайҙар. Бала саҡтың бөтөн матурлығы шунда - бала бөтөн нәмәне үҙе танып-белергә тейеш. Ата-әсәнең бурысы - уңайлыҡтар, шарттар тыуҙырыу. 1 йәштән 3 йәшкә тиклем ул донъяны үҙе өйрәнә, тотоп, тәмләп ҡарай, әйберҙәрҙең быныһы шыма, быныһы ҡытыршы икәнен аңлай, уйнарға, хис-тойғоларын белдерергә өйрәнә. Шул рәүешле уның һиҙеү тойғолары, баш мейеһе үҫешә. Ә әсәй кеше уны йә математика курсына, йә инглиз теге мәктәбенә йөрөткөһө, балаһының ниндәй һәләтле булыуын күрһәткеһе килә. Ата-әсә талап иткәс, бала циркҡағы эттәр һымаҡ ятлап бирә, хәтер үҫә, әммә ул уның мәғәнәһен аңларлыҡ йәштә түгел әле. Бала - ата-әсәнең проекты түгел, был бик эгоистик позиция. Баланың үҙенең юлы, хыялы булырға тейеш, ә һеҙ уға тик йүнәлеш бирегеҙ. Балам өсөн бөтөн нәмәне эшләнем тип маҡтанған әсәйҙәрҙе йәлләйем. Уның өсөн һеҙ эшләгәс, ул үҙе нимә эшләр? Һөҙөмтәлә, баланың йәшәү мәғәнәһе юғала. Был хатта суицид күренештәренең нигеҙендә лә ята. Балаға бер ниндәй ҙә һайлау мөмкинлеге юҡ һәм уның өсөн барыһы ла уйланылған, ул бер нәмә өсөн дә яуап бирмәй икән, хәүефле логика барлыҡҡа килә: әгәр мин үҙемдең ғүмерем өсөн яуап бирмәйем икән, мин үҙемдең үлемем өсөн яуап бирә алам. Тағы ла бер деривация килеп сыға - баланы яраталар, әммә шәхесен иғтирам итмәйҙәр, фекере менән иҫәпләшмәйҙәр. Бала - һеҙҙең милкегеҙ, берәй ағзағыҙҙың, әйтәйек, ҡулығыҙҙың дауамы түгел, ул айырым кеше. Уны үҙе өсөн яуап бирергә өйрәтергә кәрәк. Ябайҙан ғына башларға, мәҫәлән, бөгөн күк күлдәгеңде кейәһеңме, әллә ҡыҙылынмы? Аш ашайһыңмы, бутҡамы? 18 йәше тулғас, үҙаллы булып китер тип ышанырға кәрәкмәй. Беҙҙең илдә ата-әсә үҙе пенсияға сыҡ-

Бала - ата-әсәнең проекты түгел, был бик эгоистик позиция. Баланың үҙенең юлы, хыялы булырға тейеш, ә һеҙ уға тик йүнәлеш бирегеҙ. Балам өсөн бөтөн нәмәне эшләнем тип маҡтанған әсәйҙәрҙе йәлләйем. Уның өсөн һеҙ эшләгәс, ул үҙе нимә эшләр? Һөҙөмтәлә, баланың йәшәү мәғәнәһе юғала. Был хатта суицид күренештәренең нигеҙендә лә ята. Балаға бер ниндәй ҙә һайлау мөмкинлеге юҡ һәм уның өсөн барыһы ла уйланылған, ул бер нәмә өсөн дә яуап бирмәй икән, хәүефле логика барлыҡҡа килә: әгәр мин үҙемдең ғүмерем өсөн яуап бирмәйем икән, мин үҙемдең үлемем өсөн яуап бирә алам. Тағы ла бер деривация килеп сыға - баланы яраталар, әммә шәхесен иғтирам итмәйҙәр, фекере менән иҫәпләшмәйҙәр. Бала - һеҙҙең милкегеҙ, берәй ағзағыҙҙың, әйтәйек, ҡулығыҙҙың дауамы түгел, ул айырым кеше. Уны үҙе өсөн яуап бирергә өйрәтергә кәрәк.

ӨЙРӘН -

өлөшөң шул булыр

ҡансы балаһын ҡурсалай, аҙаҡтан да пенсияһын да бирә, үҙҙәре аптырай: "Нишләп ул һаман үҙаллы була алмай?" Минең хаталарымды ҡабатламаһын, тип тә ҡурҡмағыҙ, балағыҙҙың үҙ хаталары булырға тейеш.

Ата-әсәләргә тәрбиә эшендә иң кәрәкле бер хис йә сифат ул ниндәй тип һораһаҡ, нисек яуаплар инегеҙ?

- Яратыу. Тимәк, баланы нисек бар, шулай ҡабул итеү, уның кәрәклеген, мөһимлеген күрһәтеү, ниндәй генә осраҡта ла был тойғоларҙың үҙгәрмәйәсәгенә төшөндөрөү. Һәм тағы ла тормошта төрлө хәлдәр булыуын һәм уларҙан сығыу юлдарын да өйрәтһәләр, ошо уның ғүмере буйы үҙен әйләнә-тирә донъя, башҡа кешеләр араһында гармониялы шәхес булырға мөмкинлек бирәсәк. Сөнки глобализация процестары мәлендә беҙ баланы ниндәйҙер стандарт ситуацияға әҙерләй алмайбыҙ. Халҡыбыҙҙың традицияларына әйләнеп ҡайтһаҡ, мәҫәлән, кеше ауылда йәшәй, уның атаәсәһе лә ошо ауылда йәшәгән һәм уның балалары ла ошо ауылда йәшәйәсәк, йәғни, барыһы ла алдан билдәле. Ә бөгөн мин мегаполиста көн итәм, туғандарым ауылда һәм минең балам минең ҡалала йәшәренә ышанысым юҡ. Шул уҡ ваҡытта, тиҙ үҙгәреүсән тормошта баланың тормошон, шунда уҡыясаҡһын, шунда эшләйәсәкһең, шуны аласаҡһың һ.б., контролдә тота ла алмайбыҙ. Был бала ҡайҙа ғына уҡыр инде, тормошо нисек кенә булыр инде, тип, шуның арҡаһында ата-әсә үҙе нығыраҡ стресс кисерә. Әгәр ҙә алда теләк рәүешендә әйтелгәндәргә өйрәтәһегеҙ икән, ул бер ҡайҙа ла юғалып ҡалмаясаҡ - ошоно ҡабул итегеҙ һәм балаға ышанығыҙ. Бала өсөн бөтөн шарттар тыуҙырып ҡына уны бәхетле итеп булмай. Бала өсөн бәхет - ул ошо һеҙҙең идеаль мөхиттән тышта урынлашҡан. Ул үҙен бойомға ашырырға теләй, үҙенә ҡыйынлыҡтар эҙләй - былар нормаль күренеш.

Гел хәүеф тойғоһо кисергән өлкәндәр эргәһендә үҫкән балаға оло тормошта ниндәй хәүефтәр янауы ихтимал?

- Яңыраҡ лекция мәлендә Сибай карьерына бәйле хәл тураһында һүҙ сыҡты ла, бер уҡытыусы бала сағындағы ваҡиға менән уртаҡлашты. Уның әләсәһе шул карьер эргәһендә генә йәшәгән һәм ул бала саҡта унда йыш ҡына ҡунаҡҡа йөрөгән. "Карьерҙағы шартлау тауышы ишетелгәндә өләсәйемде ҡосаҡлайым да, ҡурҡамы икән, тип, уның күҙҙәренә ҡарайым. Ул ҡурҡмаған, мин дә ҡурҡмайым", - тип һөйләгәйне. Бик матур миҫал был, унда мөһим механизм ята. Бөгөн эмоциональ проблемалы тынысһыҙ балалар күп, сөнки уларҙың ата-әсәләре, бигерәк тә, әсәләре гел хәүеф тойғоһо менән йәшәй. Өлкән кеше үҙе ҡурҡҡас, бала уның йөҙөндә терәген юғалта, ул уның һүҙҙәренә ҡарап, тынyслана алмай. Әйтәйек, бала БДИ-ға әҙерләнә, ә әсәһе, был тапшыра алмаҫ инде тип, аһ килеп, көйөп, илап йөрөй. Тимәк, бала ла имтихандан ҡурҡа башлай. Хәүеф тойғоһо кисергән ата-әсә балаһын да шундай итеп үҫтерә. Әгәр ҙә бала ата-әсәһендә таяныс тапмаһа, уны ситтән эҙләйәсәк. Улар уға абруй түгел, сөнки үҙҙәрен ҡулға ала алмай, депрессия хәлендә йөрөйҙәр, үҙҙәрен уңышлы, бәхетле кеше итеп күрһәтә белмәйҙәр. Бөгөн үҫмерҙәр араһында субкультуралар күп, бала уларға китә. Ул төркөмдәрҙә булдырылған кешеләр уға идея һалған, уның үҙенең ҡағиҙәләре бар. Үлем төркөмдәре тигән хәүеф барлыҡҡа килде хәҙер. Уларға ла бала өйҙә яратыу, таяныс, ихтирам, аңлау тапмағандан китә. Ошо урында баланың ыңғай ғына түгел, кире тойғоларын да ҡабул итеү кәрәклеге тураһында әйтергә мөмкин. Беҙ бит агрессияны, асыуланыуҙы беҙгә, өлкәндәргә күрһәтеүҙән тыябыҙ. Ә тойғо ул насар йә һәйбәткә бүленмәй. Берәй төрлө хәл-торош булһа, ул килә лә ҡуя. Үсекмә, ҡыҫҡырма, хатта илама тип кенә торабыҙ. Ә был төркөмдәрҙә ошо тойғоларҙы сығарыу мөмкинлеге бар, улар шуныһы менән үҙенә йәлеп итә баланы. Өйҙә һин тик һәйбәт малай булырға тейешһең, ә бында нисек теләйһең, үҙеңде шулай тотаһың. Эмоциональ интеллект тигән нәмә бар, ата-әсәләргә лә, уҡытыусыларға ла балаңың барлыҡ тойғоларын да аңлап ҡабул итеү кәрәк. "Бындай хәлдә мин дә илар инем", "Быға мин дә көйөр инем" - өлкән кеше баланың эмоцияларын ҡабул итешергә өйрәнһен. Асыуландым, тип, нимә эшләргә була? Яҫтыҡты туҡмап алырға, йәғни хәрәкәт аша сығарырға була. Һеҙҙең бурыс - башҡа кешеләргә зыян килтермәҫлек, конструктив ысулдар өйрәтеү. Бөгөн был ысулдарҙың барыһы тураһында мәғлүмәт табырға, өйрәнергә була.

Халҡыбыҙҙың матур ғаилә йолалары ла онотола төштө хәҙер. Шуларҙың араһынан ҡайһыһын бөгөн мотлаҡ тормошобоҙға ҡайтарырға кәрәк, тип уйлайһығыҙ?

- Бергәләшеп ултырып сәй эсеү ҙә дауа. Хатта психологтар аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла бергәләп табын артына йыйылырға һәм асыҡ аралашып ултырырға кәңәш итә бөгөн. Хәҙер күптәрҙең балаһы менән ултырып һөйләшергә лә ваҡыттары юҡ. Ә кешегә кеше, аралашыу кәрәк. Элек ғаиләләр ҙур ине, әсәй-атай эштә булһа ла, баланы өләсәй менән олатай тәрбиәләне. Улар уҡ уға әкиәт, тарих һөйләне, эш эшләргә, үҙ-ара мөнәсәбәттәргә өйрәтте. Бөгөн ни өсөн тәрбиә эшендә проблемалар күбәйҙе тип уйлайһығыҙ? Сөнки ошолай аралашыуҙар ҡыҫҡарҙы, йолалар онотолдо. Ҙур ҡалаларҙа йәшәйбеҙ, глобализацион процестар көсәйеүе һәҙөмтәһендә күптәр яңғыҙлыҡ тойғоһо кисерә. Дөрөҫөн әйткәндә, ғаилә ҙур психотерапевтик функция үтәй. Унда һине матур йә аҡыллы булған өсөн түгел, ә нисек барһың, шулай ҡабул итәләр, яраталар. Һәр хәлдә, шулай ҡабул итергә һәм яратырға тейештәр. Традициялар менән бер рәттән, проблемалар менән психологтарға мөрәжәғәт итеү мәҙәниәтен дә булдырырға кәрәк. Беҙҙең кәйеф ул химия менән бәйле, шатлыҡ, стресс гормондары бар, кешенең гормональ хәлторошо төрлөсә булыуы мөмкин. Мәҫәлән, шул уҡ депрессияның гормондар менән бәйле булыуы ихтимал һәм уны һөйләшеп ултырып ҡына бөтөрөп булмай, белгестәргә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Ә бит халыҡ араһында "депрессия" тигән һүҙ генә лә йылмайыу уятып ҡуя, ундай диагноздың булыуына ышанмау, тимәк, хата фекер?

- Депрессия - ул бик етди проблема. Бөгөнгө йәмғиәттә ахлаҡи һәм психологик көрсәк күҙәтелә. Педиатрҙарҙың әйтеүенсә, балаларҙың 12 проценты ғына сәләмәт. Тәү урында нервы-психологик сирҙәр тора. Фәндә "генетик арыу" тигән нәмә бар, йәғни, милләт яйлап ҡына ауырыуға әйләнә бара. Тәбиғи һайланыш тигән әйбер юҡ, медицинаның 400 грамлыҡ баланы ла аҙәм итеп алырға мөмкинлектәре бар. Әммә етлегеп өлгөрмәй тыуған балаларҙың 70 проценты сәләмәтлектәре йәһәтенән төрлө проблемаларға дусар. Глобаль рәүештә демографик сиктәрҙең күсеүе лә милләтте һау итмәй. Хәҙер бала бәхетте урлай, тигән фекер бар. Шунан, үҙем өсөн йәшәйем, эшем яҡшы, тип уйлаған ҡатын-ҡыҙ 40 йәшкә ҡарай бала таба. Бала табыуҙың да үҙ мәле бар һәм ул тәбиғәт менән ҡаралған. Ҡайһы бер йәштәргә бала бөтөнләй кәрәкмәй. Илдә цивилизация үҫешкән һайын, тыуым аҙ була, тиғәнгә ышанаһың шулай.

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА...

ҒАИЛӘ ДИЛБЕГӘҺЕН...

ҡулыңда тот

"Һәр ҡатын-ҡыҙ яҡшы ир, яҡшы йорт, яҡшы балалар, аҙыраҡ биҙәүестәр, яҡшы аҙыҡ булыуын теләй. Был яҡшы ла, насар ҙа түгел, бары тик улар шулай яратылған. Әммә гүзәл зат быларҙың барыһына ла эйә булып та, һөйөүһеҙ йәшәй алмай, сөнки һөйөүһеҙ ул эске балҡышын юғалта", тигән бер аҡыл эйәһе.

Ҡатын-ҡыҙ тормоштоң башҡа өлкәләрендә уңышлы булып, мөхәббәттән унмаһа, ул ғүмерен бәхетһеҙ үтте, тип иҫәпләйәсәк, тиҙәр көнсығышта. Быны Европа социологтары үткәргән иҫәпһеҙ-һанһыҙ тикшеренеүҙәр ҙә раҫлай: ҡатын-ҡыҙҙар был тормошта иң мөһиме - бәхетле ғаилә, ти.

"Борон-борондан алып ҡатындар иненә рухи миссия һалынған - ул өйҙә насар тәьҫирҙәрҙән һаҡлаусы һәм бөтә ғаилә ағзаларының ыңғай яҡтарын үҫтереүсе уңайлы шарттар тыуҙырырға тейеш. Әммә бөгөнгө ҡатын-ҡыҙҙар быны бөтөнләй аңламай һәм аңларға ла теләмәй, - ти вед философияһы белгесе, доктор Алексей Мередов. - Шуға ла мин уларға ғаилә тормошоноң серҙәрен белгән боронғо яҙыуҙар - Ведтар менән танышырға кәңәш итер инем".

Ир - хужа, ҡатын - менеджер

Ғаилә тормошо - ул, иң беренсе сиратта, хеҙмәттәшлек. Шуға ла үҙегеҙҙән "хеҙмәттәште" дөрөҫ һайлай белегеҙ. Уның бай һәм матур булыуы мөһим түгел. Бөгөн йәштәр өйләнешә, әммә улар араһында хеҙмәттәшлек юҡ, шул арҡала ярты йылдан һуң - айырылышыу. Был күңелһеҙлектәрҙең барыһы ла "уйын ҡағиҙәләрен" белмәүҙән килеп сыға: никах уртаҡ тормоштоң маҡсаттарын аңлауға нигеҙләнергә тейеш. Ғаилә тормошоноң уңышы 100 проценты менән ҡатынға бәйле. Эйе, ҡорған ғаиләгеҙ тарҡалмаһын тиһәгеҙ, ҡулығыҙға дилбегәне тап һеҙгә алырға тура киләсәк. Мөнәсәбәттәр менән идара итеүҙә ҡатын-ҡыҙҙарҙан да аҡыллыраҡ, уйлап эш итеүсән кеше юҡ.

Ғаиләнең маҡсаты - берҙәм булыу

"Ҡатын иренә ышанырға һәм уны ихтирам итергә тейеш. Ә бының өсөн ир кешенең йәшәү маҡсаты йөҙгә оят килтерерлек булмаһын", ти аҡыл эйәләре. Эйе, маҡсатһыҙ йәшәгән ғаилә тиҙ арала тарҡалыуға дусар буласаҡ. Ғаилә мөнәсәбәттәрендә нисек дөрөҫ маҡсат ҡуйып йәшәргә һуң? Боронғо яҙыуҙар буйынса, ир ҙә, ҡатын да йәшәйештең бөтә кимәлдәрендә лә: матди яҡтан да, рухи яҡтан да берҙәм булырға тейеш. Бөтә кимәлдәр ҙә тигеҙ булһа, ир һәм ҡатын бер бөтөнгә әйләнә.

Буйһоноу - кәмһетелеү түгел

Ярыш сәме, уңышҡа ынтылыу, йәмғиәттә һәм ғаиләлә баш булырға теләү - ирҙәр психологияһының үҙенсәлекле һыҙаттары. Ирҙәр "мин"е һәр саҡ баш булырға тырыша, шуға ла үҙенә буйһоноуҙы һәм уны маҡтауҙы талап итә. Аңланығыҙмы инде, хөрмәтле ҡатын-ҡыҙҙар? Ирегеҙгә буйһонған булығыҙ, уны төрлө эштәргә дәртләндерегеҙ - шул саҡта һөйгәнегеҙҙең бөтә ыңғай реакциялары "уянып" китәсәк.

Бәхетле ғаилә ҡанундары:

♦ Мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртырға кәрәк, ә ирҙе түгел. Был ике төшөнсәне бутау ғаиләне юҡҡа сығара.

♦ Ҡатын һәр ваҡытта ла ире артынан эйәрергә әҙер булырға һәм уның ынтылыштарын уртаҡлашырға бурыслы.

♦ Уны нисек бар - шулай ҡабул итегеҙ, тап һеҙҙең ышанысығыҙ ирегеҙгә ярҙам ғына итәсәк.

♦ Уны аҡыллы, тип иҫәпләгеҙ, был һәр ваҡыт яҡшы уңыш килтерәсәк.

♦ Әгәр һеҙ ирегеҙҙе яңылыш һайлағанмын, тип уйлайһығыҙ икән, бошонмағыҙ. Уның яҡшы һәм кире сифаттарын ҡағыҙға яҙып сығығыҙ. Кире сифаттар яҙылған ҡағыҙҙы ҡаплағыҙ һәм онотоғоҙ. Икенсе яртығыҙҙың ыңғай яҡтарын ғына күрергә тырышығыҙ һәм оҙаҡламай ғаилә мөхите яҡшырыуын һиҙерһегеҙ.

✓ *Бер ғилми тикшеренеү күрһәтеүенсә, аталары менән йышыраҡ һәм оҙағыраҡ аралашҡан балалар социаль яҡтан әүҙем, башҡаларға ҡарата ярҙамсыл була.*

ӘСӘЙҘӘР МӘКТӘБЕ

ҒӘЙЕПЛӘМӘГЕҘ -

ул иң ауыр хеҙмәтте башҡара

(Башы 7-се биттә).

Унан тағы ла бер миҫал. Киленебеҙ 18 йәштә генә әсәй булды. Бала табыу йортонан ҡайтҡас, төрөргә өйрәтәйем әле тип барһам, был бәпесен заманса кейемдәр кейҙереп, ҡурсаҡ кеүек итеп һалған. Ҡулында бейәләйе лә бар хатта. Ҡыҫылманым, ярай, үҙенсә итһен, тинем. Бер-нисә көндән тауыш булып алды. Бәпәйҙәре туҡтауһыҙ илағас, йәш әсәй тынысландыра алмағас, атай кеше ҡыҫылған. Улай иткәндәр, былай иткәндәр - бәпәй ярһыған ғына. Ахырҙа, ҡустым уны сисендереп ҡарарға булған. Бейәләйен һыпырып алһа, эстә сабыйҙың гел хәрәкәттә булған бармаҡтары әлеге бейәләй эсенән бер епте эләктереп һүреп, урта бармағына ҡат-ҡат итеп уралған икән. Бармаҡ туптай шешкән, күгәргән. Дауаханаға һалып, саҡка баланың бармағын ҡотҡарып алып ҡалдылар, аҙ ғына һуңлаһалар, ҡырҡырға тура килер ине, тинеләр. Ошо хәлдән һуң ҡустым яр һала: "Мин хәҙер вахтаға эшкә китһәм, ул баланы ҡарай алмай, үлтерә! Бәпесте уйынсыҡ тип уйлай ул", - ти. Бахыр ҡатыны, ғәйепле булып, балаһын ни эшләтергә лә белмәй хәҙер. Киленемде яҡлашып, уның адвокаты булып алырға тура килде шул саҡ. Ысынында, ул балаһын шул тиклем матур ҡарай, бары ҡайһы бер нәмәләрҙә тәжрибәһе генә юҡ ине...

Әсәй булырға өйрәнеү еңел түгел. Йәш әсә бөтә нәмәне лә белмәй, барыһын да аңлап етә алмай әле. Ул психологик тороҡло була алыу хәләнә өлгәшмәгән, был хәлгә етеү өсөн әле уға аҙ иларға һәм аҙ көйөргә түгел. Ул әле күп мәсьәләләрҙе дөрөҫ хәл итә лә алмай, хаталар яһай, шул хаталарында бешегә. Ул ғүмеренең, йәшәйешенең иң ҙур һәм мөһим бурысын башҡара - бала үҫтерә. Был эште лә уға нисегерәк итеп башҡарырға кәрәклекте берәү ҙә өйрәтмәгән. Интуицияһына, үҙенә һалынған тәрбиә алымдарына, әсәлек һәйөүенә таянып ҡына йәшәй ул. Эстән һәр әсә лә барыһын да яҡшы, идеаль итеп эшләргә теләй, тик улай илеп сыҡмай һәм ул тағы ла шомланып, йөмғиәттең, яҡындарының, ғаиләһендәгеләрҙең "икеле" сәпәүҙәрен көтә.

Интернетты асып ҡараһаң, йәш әсәләр енәйәте тураһында йыш ҡына яңылыҡтар сыға. Ҡайҙалыр әсә балаһы менән ҡуша туғыҙынсы ҡаттан һикергән, ҡайҙалыр әсә балаһын ванныйҙа батырған, ҡайҙалыр сабыйын урамда ҡалдырып киткән, һәм башҡалар. Беҙ хор менән "Ҡайҙан сыға шундай әсәләр? Йәнһеҙ! Хайуан!" тип бот сабабыҙ. Ә психологтар яҙыуынса, бер әсә лә балаһын үлтерергә теләмәй, бер әсә лә балаһына аңлы рәүештә яуызлыҡ ҡылмай. Бындай енәйәттәр йәш әсәнең тышҡы факторҙарға ҡаршы тора алмауынан килеп сыға. Ҡыҙ балаға әсәлек тойғолары тәбиғәттән һалына тибеҙ беҙ. Эйе, һалына. Тик был тойғоларға нисек итеп янғыҙың бала үҫтереү, нисек итеп бер пособиеға йәшәү, ҡалайтып кредит түләү, ипотеканы күтәреү, эскелеккә ҡаршы тороу, эшкә өлгәрөү, ир менән мөнәсәбәттәрҙе яйлау, етәкселеккә ярау, карьера эшләү кеүек бихисап төшөнсәләр инмәгән нишләптер. Былырҙың барыһына ла яуапты ҡатын үҙе эҙләй.

Бер әсәгә лә еңел түгел. Бер әсә лә идеал түгел. Һәм әсәлек оҫталығына бер мәктәптә лә өйрәтмәйҙәр. Һәр әсә балаһына үҙенсә әсәй була, хатта эскесе әсәй ҙә. Балаға әсә һөйөүен һәм йылылығын унан башҡа бер әҙәм дә бирә алмай. Әсәйҙәр донъялағы иң ауыр эште башҡара - кешене тыуҙырып үҫтерә. Бөйөк һәм көслө ир-егетте лә, батшаларҙы ла, президенттарҙы ла ана шул йәш кенә әсәләр тыуҙыра. Һәр береһе балаһын тәүге тапҡыр ҡулына ҡуркып ҡына ала, ҡалайтырға белмәй. Һәм шул әсәйҙәргә кешелектән бары бер нәмә генә кәрәк - мәрхәмәтлек. Ғәйепләү һәм хаталарын төртөп күрһәтеү түгел, ә ярҙам. Ололарға, мәҫәлән, килененә өйрәтеп кенә тороу түгел, ә балаһын алып ҡалып, уға берәй сәғәт ял биреү. Иренә был осорҙа ҡатынына айырыуса иғтибарлы булыу. Эштән ҡайтып, "Нимә менән булдың?" тип шелтәләмәҫкә, ә "Әйҙә, бергә йөрөп киләйек" йәки "Ҡана, мин йоҡлатайым бөгөн" тиергә. Туғандарға уның зарҙарын тыңларға, кәрәк икән - ҡосаҡлап йыуатырға. Тик әсәне тәрбиәләргә, балаларға һәм нимәләлер ғәйепләргә түгел. Сөнки әсәй булырға өйрәнеү - иң ауыр хеҙмәт ул.

Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.

АТАЙҘАР МӘКТӘБЕ

БАЛА ТАПҠАНДА...

ҡатының янында бул

Мексиканың Юкатан штаты аборигендары араһында беҙгә сәйер һәм көлкөлө булып тойолған бер күренеш күҙәтелә. Әгәр ҙә берәй ирҙең йыш ҡына уҡшып, ҡоҫҡоһо килә башлаһа, ваҡыты-ваҡыты менән эс сәнсеүе сығып, диарея бимазалаһа, был тирәяҡтағылар өсөн уның ҡатынының йөклө булыуы тураһында билдә икән. Буласаҡ атайҙарҙы хатта тоҙло аҙыҡ тарта башлап, енси ихтыяжы юғалып, улар төрлө хәүефле төштәр күрә башлай икән. Был һис тә ғәжәп түгел: был ҡәүем ирҙәрендә үҙ-үҙҙәрен ҡатындары менән идентификациялау (тиңләү) халәте бына шулай нык үҫешкән.

Әлбиттә, бындай симптомдар һәр бер ир өсөн хас түгел, бигерәк тә беҙҙең юғары үҫешкән йәмғиәттә. Хәҙерге заман ирҙәре, ҡатындарын нисек кенә яратмаһын, әле бәйән ителгән кисерештәр кимәленә етә алмай. Шулай ҙа уларҙың күптәре өсөн ҡатындарының тәүге тапҡыр ауырға ҡалыуы, буласаҡ үҙгәрештәр тураһында хәбәр итеп, шикшөбһәләр, яңы ҡараштар барлыҡҡа килеү, ғаиләлә роле алмашыныу менән бәйле.

Һуңғы йылдарҙа ғаиләлә атай роле тураһында ҡараштар ярайһы уҡ үҙгәрә, киңәйә бирҙе. Мәҫәлән, ҡатыны бала тапҡан саҡта буласаҡ атайҙың йәнәшендә булыуы йәмғиәттә хуплау тапты. Әлегә ирҙәрҙең күбеһе быға әҙер түгел: уларҙа хатта бала табыу процесында ҡатнашыу ҡурҡыу тойғоһо уята. Ә хәҙер иһә ҡайһы бер ҡатындар бала тапҡанда ирҙәренең ҡатнашыуын мотлаҡ, тип иҫәпләй. Ҡайһы урындарҙа йәш ғаиләләрҙе бала табыуға әҙерләү курстары ойошторолоп, унда ирҙәрҙе ҡатындарына физик һәм психологик ярҙам итеү алымдарына өйрәтәләр. Ҡатын кеше тулғаҡтан мәлдә уның ире, аҡ халат кейеп алып, акушер-табиптарға ассистент булып, хәләл ефетенә ярҙамға килә, яңы ғына тыуған сабыйын тәүләп үҙе ҡулдарына ала.

Бына балаһын хирургик юл (кесарево сечение) ярҙамында тыуҙырған бер йәш әсә ниҙәр һөйләй: "Мин бала табыуҙан бигерәк, иремдең үҙ-үҙен тотоуына иҫем китте. Хирург минең ярамды теккән арала баланы палатаға алып киттеләр, ирем дә табиптар артынан эйәрҙе. Ул ике сәғәттән генә минең яныма кире килде. Ирем сабыйҙы үҙе ҡойондорған, биләгән, һәм ул ошоноң менән шул тиклем ғорурлана, хатта мине лә бала менән нисек мөғәмәлә итергә өйрәтергә әҙер ине".

Ҡатындары бала тапҡанды күреп, ирҙәр бығаса булмаған кисерештәргә юлыға. Улар һөйләүенсә, яңы тыуған сабый шул тиклем ҡәҙерле һәм яҡын булып китә, зиһенде биләй, башҡа нәмәләр тураһында уйлап та ҡарамайһың. Күнелендә эмоциональ күтәренкелек, ғорурлыҡ билән, үҙендә әллә кемдәй тояһың икән. Ҡайһы бер тикшеренеүҙәргә ҡарағанда, бындай атайҙар балаларына тиҙерәк эҫенеп китеп, артабан да улар тураһында ҡайғыртыусан була. Яңы кисерештәр уларҙа ҡатындарына ҡарата ихтирам һәм һөйөү көсөн ҡеүәтләп ебәреп, ир торолоғона нигеҙ була. Йәнә, йәш әсә бар иғтибарын, бар наҙын сабыйына йүнәлткәс, ҡайһы бер ирҙәр ҡатындарын үҙҙәренән ситләшкәндәй итеп күрә башлаһа, балаһы тыуғанда бергә булғандар араһында бындай тойғо күҙәтелмәй.

Тикшеренеүҙәргә ҡарағанда, сабыйҙарын тыуыу менән ҡулдарына алған атайҙар артабан да балаһы менән йышыраҡ уйнарға, уның янында оҙағыраҡҡа ҡалырға тырыша. Был бала өсөн дә һәйбәт. Атайҙары маҡсатлы тәрбиә алып барған ғаиләләрҙә үҫкән балалар физик яҡтан да, аҡыл йәһәтенән дә алдыныраҡ була. Бер ғилми тикшеренеү күрһәтеүенсә, аталары менән йышыраҡ һәм оҙағыраҡ аралашҡан балалар социаль яҡтан әүҙем, башҡаларға ҡарата ярҙамсыл була. Ғәҙәттә, бындай ғаиләләрҙә үҙ-ара аңлашылмаусанлыҡ осраҡтары һирәгерәк булып, татыулыҡ һәм яҡшы кәйеф хөкөм һөрә. Күрәһең, бала тәрбиәләүҙә беренсе көндән үк әүҙем ҡатнаша башлаған атайҙар шәхесендә байтаҡ ҡына күркәм сифаттар пәйҙә булалыр.

Атай һәм әсәйҙең сабый менән аралашыуында билдәле бер айырымлыҡтар булыуын оноторға ярамай. Әсә балаһын имеҙә-ашата, йыуындыра, биләй, йоҡлата, ә атай кеше сабый менән уйнарға ярата. Атайҙың бала менән уйнауы ла башлыса төрлө хәрәкәттәр менән бәйле: ул баланы әйләндерә-тулғандыра, тубыҡтарына ултыртып бәүелтә, өҫкә сөйөп уйната һ.б. Әсә кеше сабыйы менән һәр саҡта ла һағыраҡ була, наҙлай, яғымлы һүҙҙәр менән өндәшә. Был айырманы сабый үҙе лә бик тиҙ һиҙеп ала, күрәһең. Ай ярымлыҡ бәпес тә, үҙе менән уйнарға яратҡан атаһын күреү менән, уға тартыла башлап, ҡаштарын күтәреп-күтәреп ала: йәнәһе, мин һине күрҙем, әйҙә, мине ҡулыңа ал, уйнайыҡ!

Сәңгелдәктә саҡта уҡ ата менән бала араһында яҡын эмоциональ бәйләнеш барлыҡҡа килһә, ул ғүмергә һаҡланып ҡаласаҡ. Бала үҫеп, балиғ булғансы, уның атаһы менән яҡын мөнәсәбәттә булыуы уға ыңғай йоғонто яһай. Бындай балалар аталары менән һәр саҡ ғорурланырға ярата, уларға оҡшарға тырышып, шундай уҡ күркәм сифаттарға эйә була. Ә атай өсөн балаһының яҡшы кеше булып үҫеп, башҡалар араһында кәм-хур булмауынан да ҙурыраҡ ҡыуаныс вә шатлыҡ юҡтыр ул.

Вәли ИҘРИСОВ.

УЙЫНЛЫ-ЫСЫНЛЫ…

ҺАҢҒЫРАУ КЕШЕ МӘҘӘКТӘРЕ

Һаңғырау кешеләрҙең әленән-әле мәҙәк хәлдәргә тарып тороуы барыбыҙға ла мәғлүм. Ишетеү һәләте түбәнәйгән, йә иһә бындай нәмәнән бөтөнләйгә мәхрүм булғандар хаҡында йыш ҡына һәр төрлө көләмәстәр ҙә ишеткеләй торғайным. Уларҙың ҡайһылары кемдәрҙер тарафынан уйлап сығарылһа, бәғзеләре тормоштан да алына торғандыр. Хәҙерге көндә тома һаңғыраумын тиерлек, шул уҡ ваҡытта, һәр күренешкә, төрлө хәлдәргә оптимистик ҡараштағы кеше булараҡ, үҙем менән булған бер нисә ҡыҙыҡлы эпизодты һөйләп китмәк булам.

Ике һаңғырау осрашып, береһе икенсеһенә: "Ҡайҙа юл тоттоң, мунсағамы?" - тип һорашҡас, тегеһе: "Юҡ, мунсаға китеп барам", - тип әйткән имеш. Тәүгеһе: "Ә, шулаймы ни, әлләһине мунсаға китеп барамы тип торам..." - тигән, имеш. Ошо көләмәсте ишетмәгән кеше юҡтыр, моғайын. Ә бит тормошта ысынлап та шундай хәлдәр булып тора.

Үткән көҙ баш ҡалаға барырға тура килгәйне. Иң беренсе нәүбәттә, "Киске Өфө" мөхәрририәтенә инеп, хеҙмәттәштәремде күреп сығырға ниәтем. Баш мөхәррир менән хәл-әхүәл белешеп, бүлек мөхәррирҙәрен күргәс, Миләүшә Ҡаһарманова хаҡында ла һорашам. "Ул ауылына ҡайтып китте...", - ти Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы. Унан тағы ниҙер әйтте әйтеүен, әммә мин, әлеге һаңғырау кеше, ҡабат-ҡабат төпләшеп, уны ҡаңғыртып тормаҫҡа булдым. "Ҡалай яҡшы...", - тип, күтәренке кәйеф менән үҙемсә әңгәмәне дауам итәм. Йәнәһе лә, тыуған яҡтарға ҡайтып йөрөп килеү - бик һәйбәт эш. Баш мөхәррирҙең йөҙөнә ҡарап, уның мине бүлдереп, тағы ниҙер әйтергә теләгәнен тойомлайым. Усымды-локаторымды ҡолағыма ҡуйып, уның һүҙенә иғтибар итәм. "Атаһы мәрхүм булып ҡалған, шуны ерләргә ҡайтты Миләүшә", - тигән һүҙҙәрҙе аңғарып ҡалдым... Минең өсөн ҡабатлап, ныҡ ыраҡ тауышлана биребереберәк әйтелгән был хәбәрҙе ишеткәс, әлбиттә, үҙемә ифрат та уңайһыҙ булды...

Телефон аша кемдер менән һөйләшә башлаһам, йыш ҡына әңгәмәсемдең ни әйткәнен аңлай алмай аҙапланам, шуға күрә, уның минә урыҫ телендә әйтеп ҡарауын, йә иһә үҙем аңғармаған һүҙҙең синонимын атауын үтенәм. Шулай, икенсе төрләрәк аңғыраймышлы булһа, ҡайсаҡ уны төшөнөп тә алам. Бер мәл минә Ғайса ағайым шылтырата. Ниҙер хаҡында уға мәғлүмәт биреүемде үтенеүен һиҙәм, әммә яҡшылап аңлап етмәйем. "Русса әйтеп ҡара, ағай", - тием. "Мин һиңә русса әйтеп торам бит", - тигәнен төшөнәм. "Улай булғас, киреһенсә, башҡортсаға әйләндереп әйт". "Башҡортсаһын белмәйем". Шулай итеп, ағайымдың ни әйтергә теләгәнен барыбер аңлай алманым (оло кеше булараҡ, смс тигән нәмәне лә яҙа белмәй ул). Һуңынан, үҙе менән осрашҡас ҡына, кроссворд сисеп ултырған был Ғайса ағайым фәлән һүҙҙең башҡортсаға тәржемәһен һораған икәнен белдем...

Автомобилемде страховкалау мәле килеп еткәс, ғәҙәтем буйынса, үҙемдең таныш хеҙмәткәргә - Венера Фәйзулла ҡыҙына шылтыратам. Уның "Әйе", тигәнен бер аҙ ҡарлыҡҡандай тойолған, хатта ирҙәр тауышы һымағыраҡ итеп ишетәм. Абонентым тамағына һалҡын алдырған, ахырыһы. "Венера Фәйзулловна, минең ОСАГОның срогы сығып..." - тип һүҙ башлауыма, әлеге ҡалын тауыш мине бүлдерә лә башланы: "Ағай, мин..." Тик уны йүнләп ишетеп етмәгәс, мин үҙемдең яҡты ҡайырам: "Һаңғырау икәнемде яҡшы беләһегеҙ, шуға мине тыңлағыҙ, Венера һылыу, һеҙҙе мин барыбер ишетмәйем", - тип, йомошомдо әйтергә тотондом. "Тамағы ауыртҡан страховщицам" мине һис кенә лә тыңлағыһы килмәй, ахырыһы, һүҙҙәремде һаман бүлдереп маташа. Ысынлап та, бәлки, минең менән һөйләшергә ваҡыты ла юҡтыр. Эш кешеһе бит. "Әй, ярай улай булғас, Венера Фәйзулловна, трубканы улыма бирәм. Әйтер һүҙегеҙҙе уға әйтегеҙ", - тинем дә телефонымды яҡында йөрөгән улыма тотторҙом. Улым телефонды ҡолағына ҡуйып, бер аҙ тыңлағас, һыны ҡатып көлөргә тотонмаһынмы... Бынағайыш, ниндәй ҡыҙыҡ тапты былар? Бер аҙҙан телефонды һүндереп, көлә-көлә улым минә өндәшә: "Атай, һин Йәлил ағайға шылтыратҡанһың бит!.." Бәй, һаңғырау ғына түгел, өҫтәүенә күрәгарау икәнмен дә баһа, ауыҙыңа май булғыры!

Инде бер нисә йыл насар ишетеү сәбәпле, кешеләрҙең ирендәренә ҡарап, ни һөйләгәндәрен бер аҙ ғына төҫмөрләй башлайым, ахырыһы. Кесе улымдың Әлисә һәм Самина исемле ҡыҙҙары бар. Ғәйәт шаяндар. Беренсе синыфта уҡыған Самина һөйләшкәндә, үҙе лә аңғармаҫтан, бер аҙ урыҫ теленә төшөп китеүсән. Ҡабат-ҡабат һорашып, ни әйткәнен төшөнөп алғас: "Ҡыҙым, бына ошо һүҙҙәреңде хәҙер саф башҡортсалап ҡына һөйләп бир инде. Мин урыҫса аңламайым бит", - тигән булам. Уның ихласлап, башҡортса ни әйткәнен ауыҙынан ҡарап төшөнәм. "Уәт, афарин, ҡыҙым, ифрат дөрөҫ!

Һәр саҡ ана шулай үҙ телеңдә, башҡортсалап, матур итеп һөйләшеп йөрө, йәме", - тип уның арҡаһынан һөйгән булам. "Ярай", - ти ейәнсәрем ихлас ҡына итеп. Тик... Ни өсөндөр, был ике шуҡ ҡыҙ "шырҡылдаша" башлай! Бер ниндәй ҙә көлкө тапмагас, "Нишләп көлөшәһегеҙ ул", тип һорашҡан булам. Оло ейәнсәрем Әлисә: "Ҡартатай, Самина һиңә бер өн дә сығармаҡты бит, тик ауыҙын ғына йыбырҙатты", - тигәс, үҙем дә көлөргә тотондом. Ейәнсәрҙәрем минең һаңғыраулығыма өйрәнеп тә бөткән инде. Хәҙер улар әйтер һүҙҙәрен ҡағыҙға яҙып бирә, йә иһә ниҙер әйтер алдынан, бер ҡулымды тотоп, усымды ҡолағыма тапҡырына ҡуйҙыра ла, шунан ғына үҙенең хәбәрен һөйләй башлай.

Иҫкергән "Буран" урынына яңы "LG" саң һурҙырғысы алғайныҡ. Бөтөнләйгә тиерлек тауышһыҙ булыуына ҡарамаҫтан, ифрат та ҡеүәтле булып сыҡты: щеткаһы линолеум йәйелгән иҙәнгә йәбешеп аптырата. Шулай бер заман, хәләл ефетем өйҙө саңдан таҙартып алырға ҡушты ла үҙе ҡайҙалыр сығып китте. Әлеге тауышһыҙ аппаратты ҡабыҙып алып, фатир буйлап рәхәтләнеп саң һурам. Кәйеф һәйбәт. Хатта элек иҙәнгә йәбешеп ыҙалатҡан щеткаһы ла был юлы еңел генә шыуғандай. Бер бүлмәне ентекләп таҙартып алғас, икенсеһенә күсергә ниәтләп, саң һурҙырғысымдың төймәһенә баҫып һүндерәйем тигәнсе, аппаратым кинәт кенә геүләй башламаһынмы. Хатта тауышын да бер аҙ ишетә башлағандай булдым. Бәй! Башта, кнопкаға етешһеҙ баҫып, ҡабынмаған аппарат менән бер бүлмәне "йыйыштырып" сыҡҡанмын да баһа...

Ике-өс йыл самаһы элек, ноябрь айҙарында, Байым ауылында йәшәгән ҡәйнәмә ҡунаҡҡа барғайныҡ. Ифрат шаян, йор һүҙле булған Мансур бажам да йәшәй ана шул ауылда. Бер көн таң менән килеп еткән. Миһран ҡәйнеш менән күлгә кисә кис ҡуйған ауҙы барып ҡарарға кәрәк икән. Ҡәйнештең резина көмәһе лә бар. Шуны автомобилгә тейәп алып, әлеге ауҙы ҡарарға киттек. Төндә ныҡ ҡына һыуытҡанға күрә, күл яртылаш йоҡа боҙ менән ҡапланып, ауҙың бер өлөшө боҙ аҫтында ҡалған. Кәмәләренә ел тултырып алып, ҡәйнеш менән бажа, урта тирәһе кәмендә өс метрҙай тәрәнлектәге һыуға йөҙөп инеп тә киттеләр. Мин яр башынан ғына тегеләрҙе күҙәтәм. Резина кәмәләре менән йоҡа боҙҙо етеҙ генә йырып, күл уртаһына барып та етте былар. Күпмелер ваҡыттан бажа ишкәктәре менән йәнтәслем был яҡҡа ҡарай ишә башланы. Ә ҡәйнеш алға ята биреберәк, ике ҡуллап кәмәһенең ике ягына йәбешеп алған. "Ауҙың бер башын тотоп, һыу буйлатып балыҡ һөҙөп килә башланы былар, тик ҡайҙа шулай ашығалар?" тип уйлайым. Шул арала балыҡсылар хаҡындағы ниндәйҙер бер көләмәс иҫемә килеп төштө. "Бажа, ҡәйнеш, - тип ҡысҡырам тегеләргә, - онотмаҫ борон бер анекдот һөйләйем әле, тыңлағыҙ", - тинем дә, тегеләрҙең минә ниҙер әйтергә маташҡанын ишетмәй, һөйләй ҙә башланым. Тик, ни өсөндөр, былар мине тыңларға уйламай, ауыҙыңа май булғыры. Шундай ҡыҙыҡлы көләмәсте "әрәм итәләр"... Минә бөтөнләйгә иғтибар итмәүҙәрен күреп, тағы ла ныҡыраҡ тауышлана биреп, һөйләүемде дауам итәм. Бажа хатта асыулы ҡараш ташлап, минә тағы ниҙер әйткәндәй булды. Ишетмәгәс, бер ни ҙә аңламайым. Ыш-быш килеп ярға төкәлделәр. Бажам менән ҡәйнештең йөҙҙәре етди. Ә резина кәмә... байтаҡ ҡына бушағандай! Баҡһаң: ысынлап та анекдот ҡайғыһы булмаған икән быларҙа. Кәмәләре ике урындан боҙға йыртылып, ҙур ғына булған шул тишектәрен ҡәйнеш йомарлап тотоп, көскә килеп еткәндәр. Хәҙер берәй мәжлес булһа, Мансур бажам ошо хәлде анекдот итеп һөйләүсән: "Бажам һыу төбөнә китмәҫ элек, уға анекдотымды булһа ла һөйләп өлгөрөп ҡалайым, тип уйлағандыр инде...", - тип мәрәкәләргә ярата. Ә ул саҡта, ысынлап та, мәрәкә ҡайғыһы булмағандыр шул...

Минең һаңғыраулығымды күргән бәғзе бер таныштарым йәлләй башлай. "Нишләп табипҡа бармайһың?" - тип кәңәш бирергә тотоналар. Әммә мин, үҙем дә табип булараҡ, был сиремдең ғүмерҙә лә йүнәлмәҫен яҡшы белгәнгә күрә, һәр саҡ уларға шулай яуап бирәм: "Аяҡтары йә ҡулы өҙөлгән кешенең, шул ағзаһының ҡабаттан үҫеп сығыуына өмөтө булмаған һымаҡ, минең ишетеү нервтары ла ҡабаттан үҫмәйәсәк. Шуға күрә, бушҡа ваҡыт, көс сарыф итмәй, үҙ хәлем менән ризалашып, ошо сиремдән хатта бихисап ыңғай яҡтарын күреп ғүмер итергә тырышам". "Һаңғыраулыҡтың ыңғай яҡтары ла була икән дә?.." - тип аптырайҙар. "Була икән шул: һәр төрлө кәрәкмәгән урам шау-шыуҙары, ғәйбәт хәбәрҙәр, бихисап каналлы телетапшырыуҙарҙағы теләһә ниндәй мәғлүмәттәрҙе ишетмәйем. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм һәр саҡ ошо доғаны уҡыр булған: "Әғүҙу билләһи мин ғилмил-лә йәнфәғ" (Файҙаһыҙ ғилемдән Аллаһҡа һыйынам)..."

Бер мәл тимер юл вокзалы тукталышында ҡара күҙлек кейгән бер кешенең минә ниҙер өндәшеүен күрәм. "Мин һаңғыраумын, бер ни ҙә ишетмәйем", - тип уға яҡынлараҡ киләм. Ул, кеҫәһенән сығарып, минә ҡағыҙ киҫәге тоттора. Уҡыйым: "Мин бөтөнләйгә тиерлек һуҡыр кеше. Фәлән һанлы автобусҡа ултырырға ярҙам итегеҙ, зинһар". Был кешене тәғәйенләнгән маршрутҡа ултыртышып ебәрҙем дә, үҙемсә уйлап ҡуйҙым: "Әлхәмдулиллаһ, минең хәлем уныҡынан күпкә еңелерәк икән..."

Бына шулай, ҡәҙерле туғандар, Аллаһы Тәғәлә биргән һәр нәмәгә лә риза булып, уның ыңғай ягын күрә белеп йәшәһәң, тормошобоҙ әллә ни күңелһеҙ булмаҫ.

Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.

✓ *Башҡорт теле фондын булдырҙыҡ, гранттар тапшырабыҙ, башҡорт теленән диктант үткәрәбеҙ, телде өйрәнергә теләгәндәр өсөн курстар асырбыҙ. Туған телебеҙҙе һәм мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлайыҡ.*

ИНТЕРНЕТТАН

НИСӘ ЙӘШТӘ

әсәй булырға?

■ Голландия ғалимдары күп балалы әсәй булыу өсөн нисә йәштә бала таба башларға кәрәклеген иҫәпләп сығарған. Һуңғы 300 йыллыҡ статистикаға таянып, бала табыу өсөн иң идеаль йәш аталған. Әммә был һан ҡатын-ҡыҙҙың психологик торошонан һәм ул йәшәгән илдең экологияһына бәйле үҙгәрә ала. Шулай ҙа бер бала менән сикләнергә теләгән ҡатын-ҡыҙ 32 йәшкә тиклем бала табырға тейеш. Был ваҡиғаны һуңғараҡ ҡалдырыу баланың сәләмәтлегендә сағылыуы ихтимал. Әгәр ҙә ғаиләлә ике бала булһын, тигәндәр тәүге сабыйын 27 йәшкә тиклем ҡулына алырға тейеш. Күп балалы ҡатындар иһә 23 йәштән үк хыялын тормошҡа ашыра башларға бурыслы. Әле биш йыл элек кенә хәбәр итеүҙәренсә, күп Европа илдәре өсөн 30 йәштә тәүгә әсәй булыу ғәҙәти хәл иҫәпләнә ине. Бизнес өлкәһендә ҙур уңыштарға өлгәшкән ҡайһы бер ханымдар 35 йәштә лә һуң түгел тип раҫлай. Тағы бер тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе ҡыҙыҡ булыр моғайын - 27 йәшлек ҡатын-ҡыҙҙарҙың балаһы даһи булып тыуа. Ә бына 16-22 йәшлектәрҙең балаһы интеллект кимәле менән артыҡ айырылып тормай. Медицина күҙлегенән ҡарағанда, 15 йәштә әсәй булыу күпкә яҡшыраҡ.

■ Ғалимдар Wi-Fi сәләмәтлектең ҡаҡшауына килтереүе ихтимал, тип белдерә. Дания ғалимдары балаларҙа һәм бүлмә гөлдәрендә һынауҙар үткәргән. Бер төркөм уҡыусылар Wi-Fi селтәренә тоташтырылған телефондарын яҫтыҡ аҫтына һалып йоҡлаған. Беренсе төндән һуң уҡ балалар баш ауыртыуына, иғтибарҙы туплауы ауыр булыуына зарланған. Тәжрибәнең икенсе өлөшөндә уның бүлмә гөлдәренә тәьҫире тикшерелгән. 6 гөлдө 12 көнгә Wi-Fi сығанаҡлы бүлмәгә бикләгәндәр, тағы 6 гөл ябай бүлмәгә урынлаштырылған. Экспериментҡа тәғәйенләнгән ваҡыт үтеүгә, беренсе бүлмәләге гөлдәр һулыған, икенсе бүлмәләге гөлдәр сәскә атыуын дауам иткән. Wi-Fi -ҙың тәьҫир итеү механизмы әлегә өйрәнелмәгән, бының өсөн ҙур һынауҙар үткәреү кәрәк буласаҡ. Шулай ҙа ғалимдар хәҙерҙән үк йоҡларға ятҡанда уны һүндерергә һәм кеҫә телефондарын карауаттан 1,5 метр йыраҡлыҡта тоторға кәңәш итә.

■ Британия ғалимдары иҫәпләп сығарыуынса, ҡатын-ҡыҙ биҙәнеү өсөн йылына 91 сәғәт сарыф итә икән. Ғүмер оҙайлығын уртаса 70 йәш тип алабыҙ икән, ҡатын-ҡыҙ косметикаға ғына 43 аҙна бүлә. Әммә төрлө төбәктә йәшәгән гүзәл заттарҙы айырып ҡарай башлаһаң, был уртаса һандар бер-береһенән айырылып тора. Мәҫәлән, көньяҡта йәшәүселәр төньяҡта йәшәүселәргә ҡарағанда макияжға ваҡытты күберәк бүлә. Йылы яҡта көн итеүселәр араһында көнөнә 45 минутын биҙәнеп үткәреүселәр 12 процент, һыуығыраҡ төбәктәрҙә йәшәүселәр араһында бындайҙар 8 процент ҡына. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусыларҙың 13 проценты бөтөнләй косметика ҡулланмай. 9 процент респондент биҙәнмәйенсә өйҙән сыҡмауын белдергән. 1 процент - спорт менән шөғөлләнгәндә лә макияж ҡуллана.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡортостандан, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән һәм 27 сит илдән биш йөҙгә яҡын делегатты баш ҡаланың "Торатау" Конгресс-холл бинаһына туплаты. Йыйын барышында делегаттар һигеҙ фекер алышыу майҙансығы эшендә ҡатнашты. Шул майҙансыҡтарҙағы эшлекле фекер алышыуҙар һөҙөмтәһендә ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров тыңланы һәм һәр күтәрелгән мәсьәлә буйынса үҙ фекерен әйтә барҙы. Радий Фәрит улының сығышынан ҡайһы бер өҙөктәр килтерәйек.

ҺҮҘЕБЕҘ ҺӘМ ҠЫЛЫҒЫБЫҘ МЕНӘН...

халҡыбыҙҙың бөйөклөгөн арттырайыҡ!

"Башҡорт теле, ысынлап та, яҡлауға мохтаж, ләкин тәү сиратта битарафлыҡтан, алдан күрә белмәүсәнлектән, эшләй белмәүҙән, - тип белдерҙе Радий Хәбиров V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы барышында. - *Бөгөн күп кенә балалар һәм өлкәндәр ҙур теләк менән башҡорт телен өйрәнергә әҙер. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезында уларға ошо йәһәттән нисек ярҙам итеү тураһында һөйләштек. Башҡорт телен кәрәкле, модалы итергә кәрәк. Тиҙҙән иҫке, күңелһеҙ методикаларға алмашҡа интерактив формалар, электрон дәреслектәр, коммуникатив технологиялар килер, уҡытыусыларҙы әҙерләү системаһы ла элеккеһенән айырылып торор. Беҙ ошо йүнәлештәр буйынса системалы эш алып барасаҡбыҙ. Башҡорт теле фондын булдырҙыҡ, гранттар тапшырабыҙ, башҡорт теленән диктант үткәрәбеҙ, телде өйрәнергә теләгәндәр өсөн курстар асырбыҙ. Туған телебеҙҙе һәм мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлайыҡ. Быны беҙҙән башҡа бер кем дә эшләмәҫ!"*

Радий Хәбиров Башҡортостанда йәшәгән, республиканы яратҡан һәм уның мәнфәғәте өсөн эшләгән һәр кемдең үҙен башҡорт тип иҫәпләргә хоҡуҡлы булыуын да белдерҙе. *"Башҡорттарҙы "башҡортҡа" һәм "башҡорт булмаған"ға бүлеү бөтөнләй дөрөҫ түгел. Кемдер телде тейешле кимәлдә белмәһә йәки ниндәйҙер диалектта һөйләшһә, ҡайһы бер "тел белгестәре" уға "сит кеше" тип ҡарай башлай. Диалекттары әҙәби башҡорт теленә инмәгәндәрҙе айырып ҡарауҙан туҡтарға кәрәк. Уларҙың башҡорт филологияһы факультетын тамамлағандарға ҡарағанда нығыраҡ башҡорт рухлы булыуҙары мөмкин. Әгәр ул башҡортса һөйләшмәй, ләкин үҙен ошо бөйөк халыҡтың бер өлөшө итеп тоя, шуның менән ғорурлана икән, ул башҡорт. Мин дә оҙаҡ ваҡыт кеше алдында башҡортса һөйләшмәнем, сөнки әҙәби телде белгәндәрҙең ҡырын ҡарашынан ҡурҡа инем. Ләкин коллегаларым, дуҫтарым менән рәхәтләнеп туған телемдә аралашам. Һәләтемде мөмкин булғанса үҫтерәсәкмен".*

"Беҙҙе донъяла боронғо стереотип итеп ҡабул итмәһендәр өсөн башҡорттарға булған элекке ҡарашты үҙгәртергә кәрәк, - тип бил-

✓ Хәҙерге башҡорттоң йыйылма образында ата-бабаларыбыҙ аҡылы, эскерһеҙлек, алсаҡлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ, хеҙмәт һөйөүсәнлек, һынауҙар алдында ирешмәүсәнлек, мобиллек, заманса үсешкә әҙерлек кеүек сифаттар булырға тейеш.

дәләне республика етәксеһе. - Минең уйымса, хәҙерге башҡорттоң йыйылма образында ата-бабаларыбыҙ аҡылы, эскерһеҙлек, алсаҡлыҡ һәм ҡунаҡсыллыҡ, хеҙмәт һөйөүсәнлек һәм төрлө һынауҙар алдында бирешмәүсәнлек, мобиллек һәм заманса үсешкә әҙерлек кеүек сифаттар булырға тейеш. Башҡортостан Европа һәм Азия сигендә урынлашҡан. Шуға күрә беҙҙә көнсығыштың һәм көнбайыштың иң яҡшы өлгөләренең булыуы осраҡлы түгел. Ни менән генә шөғөлләнһәк тә, беҙгә әхлаҡлы белемле кешеләр, эшебеҙҙең оҫтаһы булып ҡалырға, һәр һүҙебеҙ һәм ҡылығыбыҙ менән башҡорт халҡының бөйөклөгән артырырға кәрәк. Баһалап бөткөһөҙ мәҙәни мираҫыбыҙҙы белергә һәм хөрмәт итергә тейешбеҙ".

Башҡортостан етәксеһенең Өфөлә Совет майҙанында легендар генерал Миңлеғәле Шайморатовҡа һәйкәл ҡуйыла, тип хәбәр итеүен делегаттар алҡышлап ҡаршыланы.*"Беҙ Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында Донбаста батырҙарса һәләк булған 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры Миңлеғәле Шайморатовтың тыуыуына 120 йыл тулыуҙы лайыҡлы билдәләргә тейешбеҙ. 1942 йылдың 25 мартында тап Совет майҙанында легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһын оҙатыу тантанаһы була. Дивизия командиры Миңлеғәле Шайморатов республика етәкселегенә яугирҙарҙың фронтҡа китергә әҙер булыуы тураһында еткерә. Совет майҙанында парк булдырыла. "Был бөтә халыҡ урыны булырға тейеш",* - тип билдәләне Радий Хәбиров һәм Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитетына дивизия командиры һәйкәле өсөн аҡса йыйыу тураһында иғлан итеү тәҡдимен индерҙе.

V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡорт халҡының арҙаҡлы шәхесе, шағир Шәйехзада Бабичҡа арналған һәйкәл асылыуы һәм "Торатау йыйыны" менән дә хәтерҙә ҡалды. Әйткәндәй, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе итеп Искәндәр Юлдашев һайланды, ә БР Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Эльвира Айытҡолова Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумын етәкләйәсәк, тип билдәләнде. Йыйын барышында делегаттарға үҙҙәрен борсоған мәсьәләләр, тыуған ил һәм тел яҙмышы тураһында фекерҙәре менән уртаҡлашыуҙарын һорап мөрәжәғәт иткәйнек, гәзит уҡыусылар иғтибарына уларҙың яуаптарын тәҡдим итәбеҙ.

Марат Бәхтиев, Тверь төбәге башҡорттары ҡоролтайы рәйесе: Беҙҙең төбәктә эшләгән башҡорттарҙың тормошо яҡшы, ә эшләмәй бер пенсияға ҡарап торғандары насар йәшәй. Был төбәктән генә тормайҙыр, ҡайҙа ла бер үк тормош хәҙер. Мине башҡорттарҙың белем алырға тырышып ятыуы ҡыуандыра, башҡа милләттәр менән сағыштырмайым, әммә юғары белем алыуҙың мөһимлеген аңлауыбыҙ һыңғай түгел. Шулай ҙа бөгөн глобаль дәүләт мәсьәләһе мине күберәк борсой, сөнки башҡорттар милләт булараҡ тик дәүләт составында ғына һаҡланып ҡаласаҡ. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының биш саҡырылышында ла ҡатнаштым һәм был йылдар эсендә ил шул тиклем ҙур үҙгәрештәр кисерҙе, тип әйтә алам. Бынан биш йыл самаһы элек кенә Рәсәй дәүләтенең бөтөнлөгөн һаҡлаусы, иҫәнлеген тәьмин итеүсе булған милли мәсьәлә хәҙер ни өсөндөр дәүләт именлеге мәсьәләһе булараҡ ҡабул ителмәй. Был үткән быуаттың 80-се йылдарын хәтерләтеп тә ҡуя, тап шул осорҙа Советтар Союзының күп милләтле ил булыуына иғтибар итмәй башланылар һәм ил оло үҙгәрештәргә дусар ителде. Беҙ бөтәбеҙҙә лә бер төрлө американдар тип атап йөрөтөргә Америка Ҡушма Штаттары түгел, Рәсәй бөтөнләй икенсе, үҙенсәлекле тарихлы дәүләт. Ошондай ҙур дәүләттә бөтә халыҡтар ҙа дуҫ, бер маҡсатлы булып йәшәһен өсөн империя күҙлегенән сығып фекерләү талап ителә. Шуға ла мине ошо ҙур дәүләт эсендә халҡым үҙ урынын нисек билдәләр, йәшәйешен нисек күҙаллар, тиғән һорауҙар ҡыҙыҡһындыра. Сөнки үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап йәшәп булмай.

Флүзә Хәйруллина, Эстонияның Таллин ҡалаһынан делегат: Ғаиләбеҙ менән Эстонияла ҡырҡ йылға яҡын йәшәйбеҙ, ирем дә, үҙем дә Башҡортостандан. Мин белемем буйынса эстон теле уҡытыусыһы, магистратура тамамланым һәм ғүмер буйы балалар баҡсаһында эшләнем. Унда тулыһынса тел мөхите тыуҙырылған, һәр атай-әсәй үҙе теләп бәләкәйҙән балаһына эстон телен өйрәтә. Сөнки дәүләт телен белмәйенсә тороп, ун дипломың булһа ла эшкә урынлашыу мөмкин түгел. Шуға, Эстонияла йәшәгән башҡорттар ҙа эстон, инглиз телдәрен өйрәнеүгә ҙур иғтибар бүлеп, ҡатнаш ғаиләләрҙә булғандары хатта туған телен белеүҙе мөһим тип иҫәпләмәгән осрактар бар. Бына шундай шарттарҙа балалар, йәштәр тамырҙарҙы, туған телебеҙҙе, мәҙәниәтте, тарихты һәм динде онотмаһын, тип тырышабыҙ. Тәүге йылдарҙа татар милли ойошмаһы үткәргән сараларҙа бергә ҡатнашып йөрөнөк, шунан "Ағиҙел" башҡорт мәҙәни ойошмаһын булдырҙыҡ. Хәҙер егерме йыл тирәһе шуның рәйесе булып торам. Ойошма ағзалары менән Палдиски ҡалаһында һабантуйҙар, йыйындар үткәрәбеҙ, байрам саралары ойоштороабыҙ. Эстонияла йәшәһәк тә, башҡорт булыуыбыҙҙы башҡаларға йырбейеү, милли ризыҡтар, милли кейемдәр аша күрһәтергә тырышабыҙ, башҡа халыҡтар араһында айырылып торабыҙ, беҙгә ҡыҙыҡһынып, хөрмәт менән ҡарайҙар. Балаларым башҡортса матур итеп һөйләшә, бәләкәйҙән һәр байрам сараһында ҡатнашып, традицияларҙы белеп-күреп, өйрәнеп үҫтеләр. Бала саҡтарында һабантуйҙарҙа ҡатнашып, ойоштороусылар араһында уралып, буталанып йөрөнөләр, ул мәлдә ҡамасау итәһегеҙ тип тә ебәрә торғайныҡ. Үҙебеҙҙең башҡорт милли уйындарында урындағы башҡа халыҡ балаларын да ҡатнаштырырға теләп, ситкә китеп торорға ла ҡуша инек. Бына шулай йөрөгән балалар хәҙер рупор тотоп, үҙҙәре ойоштороп, башҡорт сараларын үткәреп йөрөй: йырбейеүгә оҫталар, улым ҡурайҙа уйнай, хажға барып ҡайтты, ҡыҙым матур итеп Сафуан Әлибай, Мостай Кәрим, Әнғәм Атнабай кеүек шағирҙарҙың шиғырҙарын яттан һөйләй. Уларҙы тыңлап һөйөнәбеҙ. Йәштәр үҙҙәрен ғорур рәүештә башҡорт итеп тойоп йәшәй. Бында, Башҡортостанда йәшәүсе милләттәштәрҙең, балаларыбыҙға туған телде өйрәтеүе ауыр, тиеүен ишетһәм, үҙ миҫалыбыҙҙа тәрбиәләгеҙ, тип кәңәш итәм. Педагог Антон Макаренко ла балаға йөҙ тапҡыр әйтергә түгел, уның бер тапҡыр күрергә тейешлеге тураһында әйткән. Туған телгә, мәҙәниәткә һөйөү, рухи тәрбиә биреүҙең нигеҙе ғаиләлә, ата-әсә тарафынан һалыныуын иҫтә тотоп йәшәйбеҙ һәм милләттәштәргә лә әйтер кәңәшем шул булыр.

Ришат Шәрипов, Бөрйән районы делегаты: Беҙҙең һәләтле кешеләребеҙ ситкә сығып китеү яйын ҡарай бит. Ҡала ерендә һәләтле кешеләрҙе үҫтереү, йәки эш хаҡтары буйынса дәртләндереү тиғән нәмә бар, ә ауылда бындай саралар юҡ. Ауылға эшкә ҡайтарыу буйынса дәүләт программалары булһа ла, бөгөн ауыл мәктәптәрендә физика, химия, биология кеүек төҙөл фәндәр уҡытыусыларына ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Ҡайһы бер йәштәр, уҡытыусы булып 20 мең эш хаҡына йөрөгәнсе, "Магнит" магазинында 35 мең алып, һатыусы булып эшләйем, тип тә әйтә. Милли кадрҙар мәсьәләһендә лә хәлдәр бигүк шатланырлыҡ түгел, етәксе урындарында беҙҙең халыҡ вәкилдәре аҙ. Бының сәбәбен билдәләй алмайым: етәксе булырлыҡ сифаттар етмәйме, әллә сабатаны түргә әләбеҙме? Башҡорт халҡының белемле, алдынғы ҡарашлы йәш быуынына тормошта үҙ урынын табырға ярҙам итеү маҡсатында эшләнгән махсус программалар кәрәк. Ауылдарҙы күтәреү буйынса ла етди фекер алышыу талап ителә, фермерҙарға ниндәйҙер ярҙам бар, ә шәхси хужалыҡ тотоп йәшәгән халыҡҡа бер нәмә лә юҡ. Улар үҙҙәре етештергәнде, үҙенән артҡанды ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптырана. Ғөмүмән, ауылдарҙағы көнитмеште тәьмин итеүсе, халыҡты үҙ ауылында еректереүсе проекттар-программалар кәрәк. V Ҡоролтай резолюцияларына ла инергә тейеш бындай тәҡдимдәр.

Гөлнара Ноғоманова, Израиль, Хайфа ҡалаһынан делегат: V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса фекерләшергә теләп килдем. Беҙ Израилгә күсеп киткәнгә өс йыл, улым бында бишенсе синыфҡа тиклем генә белем алды. Сит илдә башҡорт телен өйрәнеү мөмкинлеге юҡ, хатта урыҫ телен дә өйрәнмәйбеҙ. Телде бөтөнләй онотоп ҡуймаҫ өсөн балама диктанттар яҙҙырам. Шуға ла туған тел мәсьәләһе минең өсөн V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында күтәрелгән һорауҙар араһында иң мөһиме. Сөнки тел - ул үҙ халҡыңдың мәҙәниәте, әҙәбиәте, сәнғәте һәм йолалары айышына төшөнөүгә ярҙам иткән төп сара тип иҫәпләйем. Мин сит илгә сығып киткәс кенә үҙемдең башҡорт асылыма ҡайттым, тиһәм, дөрөҫ булыр. Шуға туған телдә аралашыуҙы, тыуған яҡтың хозур тәбиғәтен, матур һәм таҙа баш ҡалабыҙҙы һағынып ҡайтам. Бигерәк тә Шәреҡ илдәренән һуң бындағы таҙалыҡ, матур үҙгәрештәр күҙгә ташлана.

Ирек Баишев, Германия Лейпциг ҡалаһынан делегат: Бындай оло йыйындарҙа өсөнсөһөндә делегат булып ҡатнашам. Шуға күргән-белгән һәр кем күптәнге дуҫтар һымаҡ, ихлас сәләмләшеп, аралашып ҡайтабыҙ. Лейпциг ҡалаһында оҙайлы йылдар йәшәйем һәм шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнәм, үҙемдең фирмам бар. Ошо йәһәттән милләттәштәргә инициативалыраҡ булырға кәңәш итер инем. Күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй, тиҙәр бит. Эштән, үҙ эштәрен асып үҙаллы булыуҙан ҡурҡмаһындар һәм ситтән ярҙам көтөп ултырмаһындар. Ә инде V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына килгәндә, пленар ултырыш ваҡытында Башҡортостандың Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбировтың Өфөләге Совет майҙанында Шайморатов генералға арналған һәйкәл ҡуйыу буйынса тәҡдиме оҡшаны. Әммә баш ҡала бөтә донъяға танылған Төньяҡ амурҙарына бер иҫтәлекле таҡташ та булмауы күңелдә ҡыра.

Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

5. Усығыҙҙы йоҙороҡлап, уның эске яғы менән ҡалҡкан биҙен өҫтән аҫҡа 30 тапҡыр массажларға.

6. Уң ҡулығыҙҙы эсегеҙгә ҡуйып, уның өҫтөнә һулын һалығыҙ һәм, эсегеҙгә еңелсә генә баҫып, кендек тирәһен сәғәт йөрөшө буйынса 30 тапҡыр массажлағыҙ.

7. Күкрәгегеҙҙе тултырып тын алығыҙ һәм ҡапыл сығарығыҙ - 5-6 тапҡыр ҡабатлағыҙ. Әгәр ҡапыл тынығыҙҙы сығарыу ауыр икән, йайлап сығарығыҙ, әммә был осраҡта 30 тапҡыр ҡабатлағыҙ.

8. Уң аяғығыҙҙы тубыҡтан мөмкин тиклем нығыраҡ бөкләп, 15 тапҡыр күтәрегеҙ; һуңынан был күнегеүҙе һул аяғығыҙ менән эшләгеҙ.

9. Башығыҙҙы өсәр тапҡыр уңға-һулға бороғоҙ. Бер аҙ ял иткәндән һуң тағы ҡабатлағыҙ. Барлығы 20 тапҡыр эшләгеҙ.

Артабанғы дүрт күнегеү ултырғыста ултырып башҡарыла:

10. Уң аяғығыҙҙы һулына һалығыҙ һәм һул ҡулығыҙ менән табанығыҙҙы 30 тапҡыр массажлағыҙ. Артабан аяҡтарығыҙҙы алмаштырып, уң ҡулығыҙ менән һул аяҡ табанын массажлағыҙ.

11. Ике усығыҙ менән аяғығыҙҙың табанынан янбашығыҙға тиклем 20 тапҡыр "ҡан ҡыуҙырып", һыйпағыҙ.

12. Ике ҡуллап ирекле рәүештә муйынығыҙҙы уңдан-һулға 30 тапҡыр массажлағыҙ.

13. Ике ҡуллап муйынығыҙҙы йыуған кеүек итеп 2-3 тапҡыр массажлағыҙ.

Киләһе алты күнегеү баҫып эшләнә.

14. Уң ҡулығыҙҙы күтәрегеҙ һәм уны юғары тотҡан килеш 3 тапҡыр, һуңынан аҫҡа төшөрөп тағы ла 3 тапҡыр һелкkелегеҙ. Һул ҡулығыҙ менән дә шундай уҡ эштәр башҡарығыҙ. Барлығы 15 тапҡыр ҡабатлағыҙ.

15. Кәүҙәгеҙҙе ирекле рәүештә башығыҙ һәм ҡулдарығыҙ менән бергә уңға-һулға 20 тапҡыр борғолағыҙ.

16. Янбашығыҙҙы 20 тапҡыр янҡҡа борғолағыҙ.

17. Ҡулдарығыҙҙы тура тотоп, алға-артҡа 20-шәр тапҡыр түңәрәктәр эшләгеҙ.

18. 30 тапҡыр сүгәләп ултырығыҙ (приседание).

Иртәнге күнекмәләрҙе тамамлағандан һуң 200-300 мл таҙа (шишмә йәки сифатлы фильтр аша үткәрелгән), бүлмә температураһындағы һыуға 1 бал ҡалағы бал һалып болғап эсегеҙ. Эскәндә һауҙы ауыҙығыҙға алығыҙ ҙа, уны 2-3 секунд уртығыҙҙа тотоғоҙ һәм шунан һуң ғына йотоғоҙ. Организмды шлактарҙан таҙарта торған һыуҙы шулай эсеп бөтөгөҙ һәм ярты сәғәттән һуң ғына иртәнге аш ашағыҙ.

С. КУЗИНА.
(Дауамы бар).

8 ИЮЛЯ
ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.00, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "25-й час". [16+]
23.20 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Сиделка". [12+]
0.55 Т/с "Вокзал". [16+]
2.55 Т/с "Семейный детектив". [12+]

БСТ

7.00, 9.15 Сәләм. [12+]
9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
10.00, 16.30 Т/с "Боксер". [16+]
11.00 Итоги недели (на рус. яз.).
11.45 Специальный репортаж. [12+]
12.00 Счастливый час.
13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә.
14.30 Наука 102. [12+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [6+]
16.15 Гора новостей.
17.15 Ради добра. [6+]
18.00 "Свадьба наизнанку". [12+]
19.00, 22.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәнгелдәк. [0+]
20.15 Дорожный патруль. [16+]
20.30 Дневник Международных детских игр. [6+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
21.00 "Теге өсәү!" [12+]
23.15 Колесо времени. [12+]
0.15 Т/с "Следствие любви". [12+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.15 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]
5.15 Весело живем. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

9 ИЮЛЯ
ВТОРНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 0.55, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "25-й час". [16+]
23.20 Премьера. "Камера. Мотор. Страна". [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Сиделка". [12+]
0.55 Т/с "Вокзал". [16+]
2.55 Т/с "Семейный детектив". [12+]

БСТ

7.00, 9.15 Сәләм. [12+]
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
10.00, 16.30 Т/с "Боксер". [16+]
11.15 Республика Live. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час.
13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә.
14.30 Дорога к храму. [0+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
16.15 Гора новостей.
18.00 Специальный репортаж. [12+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәнгелдәк. [0+]
20.15 Криминальный спектр. [16+]
20.30 Дневник Международных детских игр. [6+]
20.45 С мотором... [12+]
21.00 Уфимское "Времечко".
22.00 "Честно говоря". [12+]
23.15 Ҡустәнәс. [12+]
23.45 Замандаш. [6+]
0.00 Т/с "Следствие любви". [16+]
2.30 Бәхетнамә. [12+]
3.30 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]
5.00 Автограф. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

10 ИЮЛЯ
СРЕДА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.20, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Крылья империи". [16+]
23.35 "Звёзды под гипнозом". [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Сиделка". [12+]
0.55 Т/с "Вокзал". [16+]
2.55 Т/с "Семейный детектив". [12+]

БСТ

7.00, 9.15 Сәләм. [12+]
9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
10.00 Т/с "Боксер". [16+]
11.15 "Честно говоря". [12+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 Счастливый час.
13.00, 19.00, 22.45 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә.
14.30 "Аль-Фатиха. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15, 23.15 Бала-саға. [6+]
16.15 Гора новостей.
16.30 Д/ф "Неустрашимый Венюков". [12+]
16.55 Церемония открытия 53 Летних Международных детских игр.
19.45 Сәнгелдәк. [0+]
20.15 Дорожный патруль. [16+]
20.30 Дневник Международных детских игр. [6+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
21.00 Историческая среда. [12+]
22.00 Вечерний телецентр. [12+]
0.00 Х/ф "Мы странно встретились". [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Песнь во сне". [12+]
5.15 Весело живем. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

11 ИЮЛЯ
ЧЕТВЕРГ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.25, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Крылья империи". [16+]
23.35 "Вечерний Ургант". [16+]
0.30 На ночь глядя. [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Сиделка". [12+]
0.55 Т/с "Вокзал". [16+]
2.55 Т/с "Семейный детектив". [12+]

БСТ

7.00, 9.15 Сәләм. [12+]
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
10.00, 16.30 Т/с "Боксер". [16+]
11.15 По сути дела... [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час.
13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә.
14.30 Автограф. [12+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.15 Гора новостей.
17.15 Точка зрения ЛДПР. [16+]
18.00 С мотором... [12+]
18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәнгелдәк. [0+]
20.15 Криминальный спектр. [16+]
20.30 Дневник Международных детских игр. [6+]
21.00 Уфимское "Времечко".
22.00 Республика Live. [12+]
23.15 "Песня года". [12+]
23.45 Современник. [12+]
0.00 Х/ф "О, счастливчик". [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Близнецы". [12+]
5.15 Весело живем. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

12 ИЮЛЯ
ПЯТНИЦА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Три аккорда". [16+]
23.15 "Вечерний Ургант". [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Валерий Розов. Человек, который умел летать". [16+]
1.00 Х/ф "Рокки Бальбоа". [16+]
3.00 "Про любовь". [16+]
3.50 "Наедине со всеми". [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.45, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Сиделка". [12+]
23.45 Торжественная церемония открытия XXVIII Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
1.40 Х/ф "Дама пик". [16+]
3.50 "Белая студия".

БСТ

7.00, 9.15 Сәләм. [12+]
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
10.00 Д/ф "Зеленый пояс Амура". [12+]
11.15 Д/ф "Остались верными клятве". [12+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 "Йома". [0+]
12.30, 21.00 Башкорттар. [6+]
13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).
13.30 Автограф. [12+]
14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
14.15 "Красная кнопка". [16+]
15.00 Интервью.
15.15 Алтын тирмә. [0+]
16.15 "Выше всех!" [6+]
16.30 "Свадьба наизнанку". [12+]
17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
17.45 Интервью. [12+]
18.00 У дачи. [12+]
19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]
19.45 Сәнгелдәк. [0+]
20.15 Ради добра. [6+]
20.30 Дневник Международных детских игр. [6+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
22.00 Вечерний телецентр.
23.15, 4.00 Караоке по-башкирски. [12+]
0.00 Х/ф "О, счастливчик". [16+]
2.00 Спектакль "Молодые сердца". [12+]
4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]
5.30 Д/ф "Фабрика грез". [12+]

13 ИЮЛЯ
СУББОТА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Сезон любви". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
9.00 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.10 Д/ф Премьера. "Египетская сила Бориса Клюева". К юбилею артиста. [12+]
11.10 "Честное слово" с Юрием Николаевым. [12+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15, 4.50 Д/ф "Теория заговора". [16+]
13.00 Д/ф "Александр Абдулов. Жизнь на большой скорости". [16+]
15.00 Х/ф "Карнавал". [0+]
18.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.30, 21.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
23.00 Международный музыкальный фестиваль "Белые ночи" Санкт-Петербурга". [12+]
1.00 Х/ф "Дьявол носит Prada". [16+]
3.00 "Про любовь". [16+]
4.05 "Наедине со всеми". [16+]

РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.15 "По секрету всему свету".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
14.20 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
15.25, 20.30 Т/с "Девичник". [12+]
0.40 "Выход в люди". [12+]
1.45 Х/ф "Алла в поисках Аллы". [12+]

БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).
8.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]
8.45 Д/ф "Вся жизнь - мечта". [12+]
9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]
9.30 "Физра". [6+]
9.45 "Перекличка". [6+]
9.55 Футбольный матч 53 Летних Международных детских игр. Матч за 3-е место.
11.00 "Книга сказок". [0+]
11.15 МузКәрәҙ. [0+]
11.30 "Городок АЮЯ". [0+]
11.55 Футбольный матч 53 Летних Международных детских игр. Финал.
13.00 Посмотрим... [6+]
13.30 Ҡустәнәс. [12+]
14.00 "Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Бенефис народного артиста РБ Азамата Гафарова. [12+]
19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
19.45 Сәнгелдәк. [0+]
20.00 Деловой Башкортостан. [12+]
20.15 Дневник Международных детских игр. [6+]
20.30 "Байык-2019". [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Д/ф "Преодоление". [6+]
22.30, 1.30 Итоги недели (на баш. яз.).
23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]
0.00, 4.15 Х/ф "Лера". [16+]
2.15 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]
6.00 Д/ф "Неустрашимый Венюков". [12+]

14 ИЮЛЯ
ВОСКРЕСЕНЬЕ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.50, 6.10 Х/ф "Сыщик Петербургской полиции". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.10, 12.15 "Видели видео?" [6+]
12.00 Новости с субтитрами.
13.00 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
15.00 Д/ф "Свадьба в Малиновке". Непридуманные истории". [16+]
16.00 Х/ф "Свадьба в Малиновке". [0+]
17.50 "Точь-в-точь". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Лучше, чем люди". Новые серии. [16+]
23.30 Международный музыкальный фестиваль "Белые ночи" Санкт-Петербурга". [12+]
1.30 Х/ф "Скандальный дневник". [16+]
3.10 "Про любовь". [16+]
4.05 "Наедине со всеми". [16+]

РОССИЯ 1

5.05 Т/с "Сваты". [12+]
7.20 "Семейные каникулы".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается.
13.55 Х/ф "Если бы да кабы". [12+]
16.10 Х/ф "Любовь говорит". [12+]
21.00 Москва. Кремль. Путин.
21.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.00 Д/ф "Год после Сталина". [16+]
2.05 Х/ф "Клинч". [16+]
3.50 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 Ҡурай даны. [12+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 "Песня года". [12+]
10.00 Бирешмә. Профи. [6+]
10.45 Байтус. [6+]
11.00 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.15, 11.45 "Ал да гөл. [6+]
11.30 "Сулпылар". [0+]
12.00 Бай бакса. [12+]
12.30 Итоги недели (на баш. яз.).
13.15 Алтын тирмә. [0+]
14.00 Бенефис народного артиста РБ Азамата Гафарова. [12+]
15.30 Праздник русской песни в Белокатае. [6+]
16.00 Дорога к храму. [0+]
16.30 Историческая среда. [12+]
17.00 Д/ф "Телевидение - жизнь моя". [12+]
18.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]
18.15 Дневник Международных детских игр. [6+]
18.45 Әлләсе... [6+]
19.30 "Свадьба наизнанку". [12+]
20.30 "Теге өсәү!" [12+]
21.00 Республика Live. [12+]
21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
22.30 "Красная кнопка". [16+]
23.15 "Байык-2019". [12+]
0.15, 4.30 Х/ф "Любовь под надзором". [16+]
1.45 Спектакль "Путем взаимной переписки". [12+]

НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1440 һижри йыл.

Июль (Зөлҡәғиҙә)	Иртәнге намаҙ	Ҡояш ҡалка	Өйлә намаҙы	Икенде намаҙы	Аҡшам намаҙы	Йәстү намаҙы
8 (5) дүшәмбе	3:22	4:52	13:30	20:19	21:49	23:19
9 (6) шишәмбе	3:23	4:53	13:30	20:19	21:49	23:19
10 (7) шаршамбы	3:24	4:54	13:30	20:18	21:48	23:18
11 (8) кесе йома	3:25	4:55	13:30	20:17	21:47	23:17
12 (9) йома	3:26	4:56	13:30	20:16	21:46	23:16
13 (10) шәмбе	3:28	4:58	13:30	20:15	21:45	23:15
14 (11) йәкшәмбе	3:29	4:59	13:30	20:14	21:44	23:14

"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

БР РӘССАМДАР СОЮЗЫНА 85 ЙЫЛ



Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

26-сы һандағы сканворд яуаптары.
Горизонталь буйынса: Минск. Ишетер. Лакшми. НАТО. Минус. Сүре. Окисел. Утар. Могул. Үрт. Баян. Ыу. Нияз. Сәрҙар. Суд. Ата. Киев. Лорд. Дудук. Тула. Акъяр.
Вертикаль буйынса: Мурманск. Ленинград. Смоленск. Инеш. Ирәкте. Мәскәү. Ишек. Завод. Уты. Ураҡ. Брест. Анод. Керчь. Улъя. Новороссийск. Бурыл. Одесса. Сталинград.

ҠОЛАҠ ҺАЛ!

Ҡайғы уртаҡлаша бел

Үҙ унышың менән уртаҡлашыу - яҡшы, әммә кемдеңдер ҡайғыһын, ҡазаһын уртаҡлашырға тәҡдим итеү - тағы ла яҡшыраҡ. Кемдер дуҫлыҡка мохтаж икән, һин уға дуҫ бул! Был турала һорағандарын көтмә. Кешене эскерһеҙ, иғтибар менән тыңла. Гәҙәттә, һинән дуҫтарса яҡлау һәм, гәйепләмәйенсә, бер аҙ иғтибар бүлеүеңде генә көтәләр.

Дуҫтар үҙгәрмәй

Уларға беҙҙең мөнәсәбәтебеҙ генә үҙгәрә. Әгәр һинә улар башҡаса ҡарай кеүек тойолһа, ысынында иһә, һин үҙең үҙгәргәнһең: һинең реакцияң, донъяны ҡабул итеүең, өмөттәрең үҙгәргән. Был ҡотолғоһоҙ, сөнки кешеләр үҫешә, көндәлек тормош ығы-зығыһы дуҫтарса тойғоларҙы һүрелдереүе мөмкин. Шуға был күренешкә килешеп ҡара.

Хыянатка ҡарашыңды үҙгәрт

Ир менән ҡатын хыянаты проблемаһы кешелек тарихы башланғандан алып бар. Беҙҙең өсөн ике мөл нигеҙ итеп алынырға тейеш: беренсеһе - үҙеңә һөйөү, икенсеһе - икенсе кешенең һайлауын ихтирам итеү. Үҙеңә һөйөү һәм ышанысты һайлаған кеше башҡаларға үҙ тәртибен һәм һайлаған юлын, ҡарарын контролдә тотоуға юл ҡуймаясаҡ. Һәр ваҡыт дөйөм тәртип нормаларына ғына таянһаң, ҡайҙа һинең шәхес булараҡ һайлаған юлың, ә ҡайҙа социум менән билдәләнгән догмаларға һуҡырҙарса әйәреү - аңлауы ҡыйын. Бындай осраҡта шәхес булараҡ үҫешеү өсөн шарттар булмай, һөҙөмтәлә бәхет тә юҡ.

Мине дөрөҫ аңлағыҙ, әхлаҡ ҡанундарын боҙорға саҡырмайым мин. Тик үҙеңдең эске "Мин"еңдең сигналдарына (бигерәк тә бындай сигнал шатлыҡ бүләк итерҙәй булһа) бик иғтибарлы булырға кәрәк, тип әйтеүем. Һәр ошондай сигнал - рухыңдың камиллашыу юлында үҙен сағылдырыу ысулы. Рухың бәхетенән күккә шашып осһа, тимәк, был дөрөҫ юл.

Стратегик фекерләүҙе үҫтер

Еңеү стратегияһын эшкәртеү өсөн дошмандың көслө һәм үҙеңдең йомшаҡ яҡтарыңды дөрөҫ баһаларға кәрәк. Гәҙәттә, үҙеңә артыҡ баһа бирмәгән һәм дошманды баһалап еткермәү ни тиклем хәүефле икәнен белгән баҫалҡы кешеләр еңеүгә өлгәшә.

Наталья ПРАВДИНА.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

ИЮЛЬ АЙЫНЫҢ ШИФАЛЫ ҮЛӘНДӘРЕ

Июль айында ҡылыс үлән (аир болотный), һаҙанаҡ (багульник болотный), мәтрүшкә, боланут, етен үлән (льнянка обыкновенная), тугай бөтнөгө (мята полевая), пастернак үләне, көкөрт үләне (плаун булавовидный), әрем, меңъяпраҡ, һыу боросо һәм геморрой үләне (горец почечуйный), бәпембә, көтөүсе муҡсаһы, юл япрағы, кипкәр (сушеница топяная), баҫыу ҡырҡбыуыны, эт дегәнәге (череда трехраздельная) үләндәрен; ҡара тилебәрән, ҡайын, вахта, ҡайын еләге, тайтояҡ (копытень европейский), ҡурай еләге, үгәй инә үләне, ҙур юл япрағы, талҡан емеш (толокнянка обыкновенная) япраҡтарын; ҡара тилебәрән һәм аҡ шыршы (пихта сибирская) бөрөһөн; бәйгәмбәр тырнағы (календула лекарственная), йүкә, гөлбаҙран (пижма обыкновенная) сәскәлектәрен; ҡыҙыл энәлек, зәңгәр сәскә (василек синий), үгәй инә үләне, гөлйемеш сәскәһен; ҡыҙыл энәлек, күк көртмәле, ҡайын еләге, балан, ҡурай еләге, ҡарағат, муйыл, ҡара көртмәле емештәрен; аҡ әнис орлоғон; балан ҡайыры; айыу ҡолағы (коровяк скипетровидный) сәскә таждарын; артыш тубырсыҡ-емешен; айыу көпшәһе (дягиль лекарственный), бәпембә, этҡолаҡ (окопник лекарственный), дөр-дөр сәскә (пион уклоняющийся) тамырын; аҡ шыршы һәм ҡарағай ылыҫы; болан күҙе (ромашка душистая) кәрзинкәһен йыябыҙ.

Үлән орлоҡланғанға тиклем уның һабағы, япрағы һәм сәскәһе файҙалы матдәләргә иң бай сағы. Емеше һәм орлоғо бешеп өлгөргән мәлдә дауаһы көслө. Тамыры, тамырһабағы, бүлбе, һуғанбашы вегетация осоро аҙағында, сентябрь-октябрь айҙары тирәһендә, файҙалы матдәләргә бай.

Ағыулы үҫемлектәрҙе йыйғанда һаҡ булырға кәрәк. Бындай үләндәрҙе башҡалары менән бергә киптерергә һалыуҙан, бутап йыйыуҙан һаҡ булырға һәм уларҙы тотҡандан һуң ҡулды һабынлап йыуыу мөһим. Ағас һәм ҡыуаҡ бөрөһөн бүрткән, әммә асылып өлгөрмәгән саҡта йыйыу яҡшыраҡ. Ҡырҡып алыу өсөн тәғәйенләнгән ағастарҙың ғына бөрөһөн һәм ҡайырын йыйыу мөһим. Дауа өсөн йәш үҫентеләрҙең ҡайырын алығыҙ, ярғыланып бөткән оло ағас ҡайыры яраҡһыҙ була. Япраҡтарҙы үлән сәскә атырҙан саҡ ҡына алда йәки сәскә атыу башында әҙерләйҙәр. Ә сәскәһе ата башлаған мәлендә файҙалы, уны һабаҡһыҙ итеп йолҡорға кәрәк. Емеш һәм орлоҡтарын яҡшы бешкән мәлендә йыйығыҙ. Тамыры, тамырһабағы, бүлбе, һуғанбашы вегетация осоро аҙағында ҡаҙып алына, ҡайһы берҙәрен иртә яҙ менән дә әҙерләрҙәр була. Һәр үҫемлекте төрлөсә киптерәләр. Бының өсөн махсус киптергес приборҙар ҡулланырға, эҫетелгән духовканы файҙаланырға була. Мәҫәлән, эфир майҙары күп булғандары - һары мәтрүшкә, бөтнөк (мята перечная), кейәү үләне һ.б. - ҡалын итеп йәйеп, һүрән температурала яй ғына киптерелә. Әгәр үҫемлектәр составында гликозид һәм алколоидтар булһа - уймаҡ сәскә (наперстянка), ҡаразирә (дурман), юл япрағы, ҡара тилебәрән һ.б. - ҡыҙыуыраҡ температурала шәп кенә киптерелә. Гөлйемеш, ҡайын еләге емештәрен, ҡәкүк емеше япрағын һәм башҡа витаминдар күп булған үҫемлектәрҙе юғары температурала тағы ла шәберәк киптерергә кәрәк. Шифалы үләндәрҙе ҡағыҙ, кизе-мамыҡ туҡымалан эшләнгән моҡсайҙарҙа һалҡынса һәм ҡоро бүлмәлә ҡараңғы урында һаҡларға кәрәк. Үләндәр 1-2 йыл тирәһе, тамырҙары 3-5 йыл тирәһе шифаһын юғалтмаҫҡа мөмкин.

✔ *Яңғыҙ ҡайын дауылдан ҡурҡыр, яңғыҙ кеше халыҡтан ҡурҡыр.*

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

АТЫҢ КЕМ?

ИСЕМДЕ КЕШЕ МАТУРЛАЙ

Исем кешегә тыуғас та йәбешә һәм ғүмер буйы оҙатып йөрөй. Шуның өсөн ата-әсәгә балаһына исемде уйлап ҡушырға кәрәк. Уның мәғәнәһе лә, башҡортса-русса яҙылышы ла, яңғырашы ла мөһим булырға тейеш. Бала үҙенең исеменән оялып, кәмһенеп йөрөмәһен өсөн ата-әсәләр быны иҫтә тотһон ине.

Бына, мәҫәлән, мин үҙем бәләкәй саҡта, йәшлек йылдарымда исемемде яратмай, атайым менән әсәйемә үпкәләп тә йөрөгәйнем. Имеш, үҙҙәренең дә исемдәре матур, ике апайыма ла икешәр ижектән генә торған, ҡолаҡҡа ятышлы ғына исем тапҡандар. Ә миңә боронғо, етмәһә, "йылға буйындай" оҙон ижекле исем ҡушҡандар. Атайыма үпкәмде әйткәс: "Һиңә ниндәй исем оҡшай? Ауыл Советына барып, таныҡлығыңды алыштырайыҡ һуң", - тине. Уға ла ризалашманым, оялдым. Баҡтиһәң, беҙҙең тирәләге ауылдарҙың береһендә Мәхмүзә тигән бик һәйбәт уҡытыусы булған икән. Ата-әсәйем мине лә уҡытыусы булһын тип ҡушҡан икән был исемде. Аллаға шөкөр, юрағандары юш килде. Мин дә уҡып сығып, уҡытыусы булып киттем. Исемемә лә өйрәндем. Ә ул, мин уйлағанса, бик насар түгел икән дә баһа. Мәғәнәһе лә бик матур - "данлы, маҡтаулы" тигәнде аңлата. Тора-бара шуны аңланым, исем ни тиклем күберәк ижектән торһа, шул тиклем һәйбәтерәк була икән. Аллаға шөкөр, үҙемдең йәшәү дәүеремдә исемемде аҡланым тип уйлайым.

Хәҙер үҙем өс тапҡыр әсәй, ете тапҡыр өләсәй булырға өлгөрҙөм. Ҡыҙҙарыбыҙға исемде аталары менән кәңәшләшеп, ятарып ҡуштыҡ. Оло ҡыҙыбыҙ Илүзә исемле (яңы исем) ил үҫә мәғәнәһендә. Икенсеһе - Әнүзә Фәнүзәнән ҡыҫҡартып алынған - "яҡтыртҡыс, маяҡ" тигәнде аңлата. Ә Рәлиә ҡыҙыбыҙ - (Рәйләнән алынған) "нигеҙ ҡороусы" тигән мәғәнәгә эйә. Ҡыҙҙарым үҙ исемдәренән зарланмайҙар, бик ҡәнәғәт булып йәшәйҙәр.

Ә инде ейән-ейәнсәрҙәр тыуғас, мин уларға исемлек яҙып ебәрәм. Үҙҙәре һайлаған исем дә мотлаҡ минең исемлектә булғанына һөйөнөп бөтә алмайым. Тимәк, фекерҙәребеҙ уртаҡ. Шәйәхмәтовтар ғаиләһендәге өлкән ҡыҙымдың балаларынан башлап китәйек. Тәүге ейәнемдең исеме Рөстәм. Ул фарсы теленән алынған, "мыҡты кәүҙәле, көслө, ҡеүәтле, баһадир, ҡыйыу, батыр" тигәнде аңлата. Ейәнем был сифаттарҙың барыһына ла эйәлер, тип уйлайым. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамларға торған ейәнем спорт менән дә әүҙем шөғөлләнә, мыҡты кәүҙәле, аҡыллы, баһадир егет. Исеме есеменә тап килеп тора. Ә икенсе улдарына исемде Арыҫлан йондоҙлоғо аҫтында тыуғас, Арыҫлан тип ҡуштылар. Ул ҡыйыулыҡ, батырлыҡ билдәһе. Өфөнөң А. М. Горький исемендәге 3-сө гимназияһында белем ала, спорт менән шөғөлләнә, йырлай ҙа, саксофонда ла уйнай, башҡа түңәрәктәргә лә йөрөргә ваҡыт таба. Ә ҡыҙҙары Әминә - "тыныс тәбиғәтле, ышаныслы, тоғро" тигәнде аңлата. Оҙон сәсле, ҡара ҡашлы, муйылдай ҡара күҙле был ейәнсәрем, саҡ мәктәпкә барыуына ҡарамаҫтан, бар яҡлап та булдыра. Шиғырҙы ла оҫта һөйләй, моңло йырлай, художестволы гимнастика менән дә шөғөлләнә, әсәһенә аш-һыу әҙерләшеүҙә лә ярҙамлаша.

Яҡуповтар ғаиләһендәге Әнүзә ҡыҙым өс балаға әсәй. Улар ҙа балаларына исемде минең менән кәңәшләшеп ҡуштырҙы. Айбулат - "ай" һәм "булат" һүҙҙәренән алынған, ҡорос кеүек ныҡ тигәнде аңлата. Был да ысынында шулай. Минең ейәнем бәләкәйҙән сыныфып үҫте. Йәй буйы саф һауала уйнап, ҡояшта ҡыҙынып, һыуҙа йөҙөп, туп тибеп, велосипедта йөрөһә, ҡыштарын сана, саңғы шыуып рәхәтләнә. Бәләкәйҙән үк, 5-6 йәштән каратэ менән шөғөлләнде, әле Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһында ирекле көрәш, ҡурай түңәрәктәренә йөрөй. Ярыштарҙа ҡатнашып, призлы урындар яулай. Сыныфып үҫкәс, ауырыу-сырхауҙар уны күп ваҡыт урап үтә. Икенсе улдарының исеме Нияз. Мәғәнәһе - "бүләк, үтенес, өмөт". Уға күбеһенсә иркәләп Ниязбай тип өндәшәбеҙ, үҙе лә шуға күнегеп бөткән. Был ейәнем ҡыҙҙар һымаҡ наҙлы ғына, бәләкәй, сибек кенә. Хис-тойғоға бирелеүсән, йыр-моңға ғашиҡ, хыялланырға ярата. Быйыл беренсе класҡа уҡырға барырға йыйына. Төпсөк ҡыҙҙарына Сәлимә исеме ҡуштыҡ. Ул - (ғәрәп теленән алынған) "сәләмәт, иҫән-һау, пак, ғәҙел" тигәнде аңлата. Әле бик бәләкәй, ләкин бөтә нәмәне аңлай, зирәк, отҡор бала. Киләсәктә үҙенең исемен аҡлар тип өмөтләнәбеҙ.

Аратовтар ғаиләһендәге Рәлиә ҡыҙымдың Әҙилә исемле ҡыҙы үҫеп килә. Ул ғәрәп теленән алынған, "ғәҙел, тура һүҙле" тигәнде аңлата. Ысынлап та уның шулай икәне холҡонда төҫмөрләнә. Ул бәләкәйҙән бейергә яратты, әсәһенә оҡшап, ҡул эштәренә оҫта булды. Уҡырға барғас та шундай түңәрәктәрҙе һайланы. Әле Өфөнөң 5-се лицейында 6-сы класты тамамлай. "Бисеринки" бейеү ансамблендә шөғөлләнә. Бәйгеләрҙә ҡатнашып, дипломдар, призлар яулап тора.

Минең ейән-ейәнсәрҙәремдең аталары - кейәүҙәрем дә матур, мәғәнәле исемдәр йөрөтә. Мәҫәлән, Венер - йондоҙ исеменән алынған. Ысынлап та, ул эшендә лә, ғаиләһендә лә, дуҫтары, туғандары араһында ла йондоҙ кеүек балҡып, юл күрһәтеп бара. Ришат - "тура юлдан барыусы, зирәк, аҡыллы, батыр, ҡыйыу" тигәнде аңлата. Ә Данил - "белемле, аҡыллы" тигән мәғәнәгә эйә. Ҡыҫҡаһы, минең ҡыҙҙарым да, кейәүҙәрем дә, ейән-ейәнсәрҙәрем дә үҙҙәренең исемдәренә лайыҡ булып, бәхеттә, шатлыҡта һәм сәләмәтлектә йәшәһендәр. Исем кешене матурламай, кеше исемде матурлай бит.

Мәхмүзә ШӘҒӘЛИЕВА.
Бүздәк районы
Ҡаңны-Төркәй ауылы.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

ЯЛТЫРҠАС...

Ҡармаҡҡа эләгеп, ялтырап килеп сыҡҡаны өсөн сабаҡты беҙҙең яҡта "ялтырҡас" тиҙәр. "Ялтырҡас, ялтырҡас, селәүемде алып ҡас...", тигән һамағы ла бар. Ысынлап та, шулай әйтеүең була, сабаҡ килеп тә ҡаба. Ә ваҡ селберәй балыҡтарҙы "йотҡалас" тибеҙ. Бала саҡта һыу ситендә мыжғып йөрөүсе йотҡаластарҙы усҡа алып йота торғайныҡ. Ырымы ла бар, йәнәһе, ваҡ балыҡтарҙы йотоусы кеше шәп йөҙә, моряк була, имеш. Сабаҡтарҙың һырты күк булғандарын "күкен" тип тә әйтәбеҙ. Ә ташбаш балыҡҡа килгәндә, беҙҙең ауылда был әрһеҙ балыҡты, ниңәлер, "ташый" тибеҙ.

Әхмәр ҮТӘБАЙ.

ШҮШМИН

Әсәйем "шүшмин" тип төрлө нәмә ҡатнашҡан дегетте йөрөттө. Ҡайһы бер һөйләштәрҙә "шушмин" тип ыҫмаланы атайҙар. Был һүҙҙең икенсе бер мәғәнәһе лә бар: ике төрлө милләттән, мәҫәлән, башҡорт менән татарҙан тыуғандарға ла шүшмин тигән исем тағыла. Әсәйем берәй әйбер ныҡ кибеп, ҡатып китһә, "кәкһегән" ти ине. Ә ағас һауытҡа ҡарата әйтелгәне икенсе төрлөрәк яңғырай: ҡаҡһыған, мәҫәлән, көбө ҡаҡһып бөткән.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

ҠОТЛАЙБЫҘ!

Гәзитебеҙ донъя күрә башлағандан алып ике тиҫтә йылға яҡын өҙлөкһөҙ рәүештә уның баш мөхәррире вазифаһын атҡарыусы **Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА** ошо көндәрҙә генә Башҡортостан Республикаһының юғары һәм почетлы дәүләт наградаһы - Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнде. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостан Хөкүмәтенең Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге республика премияһы лауреаты булған мөхәрриребеҙҙең халҡыбыҙҙың милли батыры исемен йөрөткән был орденға лайыҡ булыуы менән ғорурланабыҙ.

Хөрмәтле Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы! Башҡортостаныбыҙ, халҡыбыҙ мәнфәғәтендә артабан да шулай йәштәргә биргеһеҙ ижади ҡомар һәм ҡеүәт менән арымай-талмай эшләүегеҙҙе, туған телебеҙ һәм милли рухыбыҙға тоғролоҡ юлында халҡыбыҙҙың ҡаһарман һәм сая рухлы ҡыҙҙарының береһе булып, тағы ла юғарыраҡ үрҙәргә артылыуығыҙҙы, ҡотло ғаиләгеҙ түрендә бәхетле һәм оҙон-оҙаҡ ғүмер кисереүегеҙҙе теләйбеҙ!

"Киске Өфө"ләр.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

ХАЛЫҠ АҠЫЛЫ - ҠОЙОН,

ҡаршы тороуы ҡыйын

Яңғыҙ ҡайын дауылдан ҡурҡыр, яңғыҙ кеше халыҡтан ҡурҡыр.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Кешенең тәүге бурысы - ҡурҡыуҙы еңеү. Кешенең теҙ быуындары ҡалтырағанда уның һәр эше ҡолдарса килеп сығасаҡ.

(Томас Карлейль).

Дәүләт ирҙәренең йөрәге уның башында булырға тейеш.

(Наполеон).

Ҡорал өсөн ун һум һалғансы, матбуғат баҫмаһы өсөн бер һум һалыу файҙалыраҡ: ҡоралдан һөҙөмтә булыуы икеле, ә бына матбуғат баҫмаһы көн-төн туҡтамай һөйләй ала.

(Ричард Никсон).

Ҡайһы ваҡытта бәхетһеҙлекте кисереүе еңелерәк? Һинең дошмандарыңдың тағы ла бәхетһеҙерәк икәнен күргән саҡта.

(Фалес).

Изгелек - бер ваҡытта ла туҙмай торған берҙән-бер кейем.

(Генри Торо).

Теләһә ниндәй маҡсатҡа өлгәшеү өсөн ҡыҫҡа һәм оҙон юл бар.

(Зигмунд Фрейд).

Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кескәй генә сәскә тажында күҙгә күренмәгән бик кескәй генә халыҡ йәшәгән, ти. Шул сәскә үҫкән яланда бәләкәй генә күҙле, ҙур ҡолаҡлы Хартон исемле фил йөрөгән. Бер көндө уның ҡолағына ниндәйҙер тауыш ишетелгәндәй була. Хартон туҡталып, тыңлап тора. Әммә хәүефте белдергән аңлайышһыҙ өндәрҙең айышын төшөнә алмай ҙа ҡуя икән. Баҡһаң, теге сәскәгә һәм унда йәшәүсе теге халыҡҡа ҙур фажиғә янай икән. Ҡайҙандыр килгән ҡорттар ул сәскәнең тамырҙарын ҡоротороға, һабаҡтарын кимерергә итә имеш. Күҙгә күренмәгән халыҡ вәкилдәре ярҙам һорап, тағы ялбара башлай. Хартон ул сәскәне эҙләргә тотона, тик таба алмай. Шул саҡ ул күҙгә күренмәгән халыҡҡа: "Барығыҙ ҙа берҙәм йыйылып ҡысҡырһағыҙ, мин һеҙҙе ишетермен һәм табырмын", - тигән. Сәскә халҡы майҙанға йыйылып, бергәләшеп ҡысҡырған. Артабан Хартон тегеләргә: "Тағы ла кемегеҙҙер ситтә тороп ҡалдымы әллә? Һеҙҙе ишетәм, тик һүҙҙәрегеҙҙе аңлап еткермәйем", - тип өндәшкән. Сәскә халҡы йүгереп йөрөп ситтә тороп ҡалыусыны эҙләгән. Ҡараһалар, бер баҡсала ике бала ғәмһеҙ генә уйнап йөрөй икән. Уларын да алып килеп, тағы ла бергәләп ҡысҡырғандар. Тик шунан һуң ғына фил уларҙы табып, хәлдәрен күреп, аңлап, сәскәне һаҡ ҡына тамырынан һурып ала. Һурып ала ла, ҡорттар һәм башҡа ҡоротҡостар булмаған таҙа тупраҡлы яланға сығарып ултыртып ҡуя..."

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

Телефондар:

Баш мөхәррир	**253-25-44**
Баш мөхәррир урынбаҫары	**246-03-24**
Бухгалтерия	**246-03-23**
Хәбәрселәр	**252-39-99**

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 5 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 3707
Заказ - 1279/07